ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Кискә Өфө

24-30 июль (майай) 2026

№29 (1224)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Һыуға батҡан малайҙы... ни өсөн ҡотҡара алманым? 6

Әсә һөтө менән инмәһә... 7

Өйҙөң йәме бала менән 8-10

Алма-ата - Алматы 12

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

Ҡартлыҡ бәхет була алмай. Ҡартлыҡ - тыныслыҡ һәм бәлә генә була ала. Уны хөрмәт итһәләр, ҡартлыҡ тыныслыҡ кисерә. Онотһалар һәм яңғыҙлыҡта ҡалдырһалар, ул бәләгә әүерелә.

(В. Сухомлинский).

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров пациенттарға медицина хеҙмәте күрһәтеү сифатын һәм дауаханаларҙа ҡайһы бер табиптарҙың тупаҫ һәм битараф мөнәсәбәтен ҡаты тәнҡит утына тотто. Һеҙгә ошондай күңелһеҙ күренештәр менән осрашырға тура килгәне бармы?

Альбина ҠОТОЕВА, уҡытыусы: Дөрөҫөн әйткәндә, мин күптән инде хәҙер табиптарға йөрөп, нервылар һәм аҡса сарыф итеүҙән туҡтарға мәжбүр булдым. Күп ҡалаларҙың дауаханаларына йөрөп ҡараным. Бер ниндәй ярҙам ала алманым. Сирем хаҡында яҙып тормайым, ә бына ҡайһы бер табиптарының тәкәбберлеге, битарафлығы менән йәнгә тейгеләнеләр: барып инһәң, "королева" һымаҡ ултыралар - ниңә килгәнең өсөн хатта үҙеңде ғәйепләй башлайһың. Әллә ҡойто ғына белемдәрен йәшереү ысулымы икән был уларҙың, тип тә уйлап ҡуйыла, сөнки ауырыу менән һөйләшеү урынына ундайҙар компьютерға ҡаҙала, кәрәкле мәғлүмәт эҙләй башлай. Үҙҙәре ярҙам итә алмағас, исмаһам, Ғ.Ҡыуатов исемендәге Республика клиникаһына йүнәлтмә бирһендәр ине, ләкин был турала ауыҙ асыуың була, ҡорт саҡҡандай "һикереп" китәләр: аңлашыла - баш ҡала табиптары алдында үҙҙәренең көсһөҙлөгө фашланыуҙан йә шелтә алыуҙан ҡурҡалар, күрәһең.

Хәҙер бит РКБ-ға эләгеүе лә еңел түгел, үлем хәленә килеп етмәйенсә, Өфөгә бушлай тикшерелергә йүнәлтмә бирмәйҙәр - был ниндәйҙер табуға әйләнде. Ярай әле, әллә низә бер Өфө табиптары бригадалары ауыл райондарына килеп сыҡҡылай, тик төпкөл райондарға йышыраҡ кәрәк ине бындай медицина "десанты". Үкенескә, уларға күренергә өлгөрмәй ҡалғандар ҙа күп була йә алдан анализ биреп, әҙерләнеп тормағас, табип тулы тикшеренеү үткәрә алмай ҡайтып китә. Шуның өсөн ундай осраҡтарҙа ауылдарҙың медицина хеҙмәткәрҙәре халыҡты алдан иҫкәртеп, анализдарын әҙерләп торорға тейеш, тип уйлайым. Республикала ойошторолған бындай тәжрибә һәр төрлө аппаратуралар ярҙамында тулы медицина тикшереүенә иҫәп тотмаһа ла, хроник һәм яман сир кеүек ауырыуҙарҙы асыҡлай ала һәм ундайҙарға артабан ентеклерәк тикшеренеү һәм дауаланыу юлдарын күрһәтә.

Әйтеүемсә, мин хәҙер үҙ симптомдарымды анализлап, интернет-материалдар уҡып, табип һәм нутрициолог-блогерҙар кәңәшен тотоп, хәлемде еңеләйтергә тырышам. Аптырағас, хатта Баймаҡтағы халыҡ табибына ла күренеп ҡайтырға тура килде. Уның ҡарауы, район табиптарына барыу менән бәйле ҡурҡыу, тулҡынланыу кеүек кире тәьҫораттарҙан арындым, күңелем тынысланды. Райондар табиптарының бөтәһен дә бер епкә теҙеү дөрөҫ тә булмаҫ ине, бындай маҡсатым да юҡ. Бар матур итеп ҡабул иткәндәре лә, ләкин яғымлы мөғәмәлә генә квалификациялы ярҙамды алыштыра алмай шул, үкенескә...

Әлеге лә баяғы, батып барыусыны ҡотҡарыу батыусының үҙенең эше, тигән әйтем буйынса эш итергә ҡала, сөнки бер кемгә лә сер түгел: бөгөн медицина әһелдәре сир сәбәптәрендә соҡсонорға теләмәй, ә юғарынан төшөрөлгән протокол буйынса тышҡы билдәләрҙе "дауалау" менән сикләнә. Ә инде берәй намыҫлы, ярҙамсыл табип осрата алһаң, бик шәп тә бит, тик ул һиңә күпкә ҡиммәткә төшәсәк: бер тапҡыр ҡабул итеүен 10 меңгә баһалаған бер нисә профессорҙы беләм.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

ПЕНСИОНЕРҘАРҒА...

1 августан пенсионерҙарҙың өс категорияһына өҫтәмә аҡса түләнә. Бында эшләп йөрөүсе пенсионерҙар, тупланма пенсия алыусылар һәм 80 йәштән өлкәндәр хаҡында һүҙ бара.

Эшләп йөрөүсе пенсионерҙар. 1 августан Социаль фонд эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың пенсияһын автоматик рәүештә яңынан иҫәпләй. Максималь өҫтәмә өс пенсия коэффициенты менән сикләнгән. 2026 йылда балл хаҡы (156,76 һум) иҫәпкә алынып, максималь өҫтәмә 470,28 һум тәшкил итәсәк. Ғариза яҙырға кәрәкмәй.

Тупланма пенсия алыусылар. 1 августан тупланма пенсиялар ҙа ғаризаһыҙ тәртиптә ҡайтанан иҫәпләнә. Өҫтәмәнең күләме аҡсаны ҡайҙа туплауға бәйле. Аҡса Социаль фонд идаралығында булһа, 17,3 процентҡа арта. Берлектә финанслау программаһында ҡатнашыусылар, Әсәлек капиталын ҡулланыусылар йәки үҙаллы иғәнә индереүселәр өсөн өҫтәмә 19,3 процент була.

80 йәше тулған пенсионерҙар. Июлдә 80 йәшен тултырған пенсионерҙар августан икеләтә билдәләнгән түләүҙәр (күләме 19 169, 38 һум) аласаҡ. Өҫтәмә автоматик рәүештә тәғәйенләнә һәм пенсияның страховка өлөшөнә генә ҡағыла. Июлдә беренсе төркөм инвалидлыҡ алған граждандар ҙа ошондай уҡ өҫтәмәгә хоҡуҡлы.

БАШ ҠАЛАМ

ҠАҒИҘӘЛӘР - БАШҠОРТСА

Ошо көндәрҙә Өфө урамдарына электр самокаттарын ҡулланыу ҡағиҙәләре тураһында башҡорт телендә мәғлүмәт плакаттары урынлаштырылды.

Иллюстрацияларҙы кикшеринг сервистарының береһе Өфө рәссамы Зилә Шинова менән берлектә әҙерләгән. Плакаттар самокат ҡулланыусыларға хәүефһеҙлектең төп талаптары тураһында иҫкәртеү маҡсатын тотоп эшләнгән. Уларҙа - Мостай Кәрим, Салауат Юлаев, башҡорт айыуы, Өләсәй-бал ҡорто һәм милли кейемдәге ғашиҡ пар. Һәр персонаж ҡағиҙәләрҙең береһен һүрәтләй. Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен ошо рәүешле биреү, уларҙы республика халҡына мөмкин тиклем аңлайышлы еткерергә ярҙам итә.

(Дауамы 3-сө биттә).

12+

✔ Йыш килгән ялыуҙарҙың береһе - АЗС-тарҙа ниндәй бензиндың булмауы хаҡында мәғлүмәт бирмәү. Министр урынбаҫары һүҙҙәренсә, был хаҡта дежурҙа торған йәмәғәт үҙәктәре хеҙмәткәрҙәренән белешергә мөмкин.

ҠЫҪҠАСА

ЮЛ ҺАМАН ЯҠТЫРТЫЛМАЙМЫ?

Башҡортостан Башлығы Р 240 трассаһын яҡтыртыуға бәйле хәлде тәнҡитләне. "Өфө - Стәрлетамаҡ трассаһында яҡтыртыу 5 октябргә тиклем булырға тейеш, юғиһә, был эшкә прокуратура һәм Рәсәй тәфтиш комитетының Башҡортостан буйынса тәфтиш идаралығы ҡушыласаҡ", - тип белдерҙе төбәк етәксеһе. Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Рөстәм Ғәзизов эштең бер нисә этапта барыуын һәм көҙгөһөн тамамланырға тейешлеген аңлатты. "Беҙ ике этапта һөйләшеп килештек. Беренсе этап - эш башҡарыусылар 1 августа доклад яһай, икенсе этап - улар сентябрҙә яҡтыртыу буйынса бөтә эште тамамлай, - тип хәбәр итте ул. - Өлөшләтә муфталарҙы, ҡайҙалыр кабель алмаштырыу талап ителә. Йәғни монтажлауҙа яңы етешһеҙлектәр асыҡлана". Радий Хәбиров 5 октябрҙә эштәрҙе тамамлау тураһында һуңғы доклад иғлан ителергә тейешлеген белдерҙе. " Һеҙ әйткәнсә, 7 сентябрҙә беренсе этап тураһында доклад көтәм, 5 октябрҙә бөтә эштәр тамамланыуы тураһында доклад булырға тейеш", - тине Башҡортостан Башлығы.

✔ **Быйыл Башҡортостанда 8,5 меңгә яҡын МХО ҡатнашыусыһы медицина ярҙамы алған. 300 яугир реабилитация курсы үткән, тип һөйләне Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаев.** Уның билдәләүенсә, МХО яугирҙарын реабилитациялауҙа Республика һуғыш ветерандары госпитале әһәмиәтле роль уйнай. 2025 йылда ул яугирҙарҙы реабилитациялауҙы ойоштороу буйынса Рәсәйҙә иң яҡшыһы тип танылды. Госпиталь заманса юғары технологик ҡорамалдар һәм роботлаштырылған системалар менән йыһазландырылған. "Табиптарҙың мультидисциплина бригадаһы (травматологтарҙан алып психологтарға тиклем) пациенттарҙы һауыҡтырыуға күп көс һала. Һәр яугир өсөн индивидуаль дауалау картаһы әҙерләнә, ә пациент дауахананан сыҡҡандан һуң да шөғөлләнә алһын өсөн һауыҡтыу тергеҙеү технологияларына өйрәтеү мөһим этапҡа әүерелә", - тип билдәләне Урал Килсенбаев.

✔ **Башҡортостанда быйыл йәй 1800-ҙән ашыу ял һәм һауыҡтырыу ойошмаһы эшләй. Бөгөнгә уларҙа 270 меңдән ашыу бала ял иткән, тип хәбәр итте республика Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаев.** "Һәр бала күңеленә яҡҡан шөғөл табырға мөмкин: профилле сменалар, ижади лабораториялар эшләй, спорт ярыштары һәм оҫталыҡ дәрестәре уҙғарыла. Улар иҫәбенә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары ла инә. Ҡала ситендәге 28 ойошмала улар өсөн сменалар ойошторолған, бай программа әҙерләнгән. Әлеге ваҡытта унда бөтәһе 1312 бала ял иткән", - тип билдәләне Урал Килсенбаев. Быйыл республика Донецк һәм Луганск халыҡ республикаларынан 600 баланы ҡабул итә. МХО-ла ҡатнашыусыларҙың балаларына өҫтәмәлек бирелә - 3 меңдән ашыу бала өсөн бушлай профилле сменалар ойошторола. Балалар менән 30 меңгә яҡын хеҙмәткәр, шул иҫәптән 16,5 мең педагог һәм 4 мең самаһы вожатый эшләй. Йәйге һауыҡтырыу кампанияһына яҡынса 3 миллиард һум аҡса бүленгән.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

АЙЫРЫМ СИРАТ КӘРӘКМЕ?

Яғыулыҡ баҙарындағы хәл буйынса брифинг барышында Башҡортостандың сәнәғәт министры урынбаҫары Олег Тыщенко водителдәргә, Өфөлә дизель яғыулығы ғына һатылған 2-3 заправка асырғамы-юҡмы, тигән һорау менән мөрәжәғәт итте. Ҡағыҙа буларaҡ, дизель яғыулығы һәр ваҡыт бар, ләкин транспорт хужаларына бөтәһе менән бергә оҙон сиратта торорға тура килә. Фекерҙәрҙе Республикаға идара итеү үҙәгенең социаль селтәрҙәге төркөмөнә яҙырға мөмкин.

Йыш килгән ялыуҙарҙың береһе - АЗС-тарҙа ниндәй бензиндың булмауы хаҡында мәғлүмәт бирмәү. Министр урынбаҫары һүҙҙәренсә, был хаҡта Өфөнөң 31 заправкаһында дежурҙа торған йәмәғәт үҙәктәре хеҙмәткәрҙәренән белешергә мөмкин.

Алыҫта урынлашҡан райондарға яғыулыҡ ебәреү мәсьәләһе көнүҙәк булып ҡала. Олег Тыщенко әйтеүенсә, яғыулыкты ташыуға бәйле проблемалар бар. "Бензин күп, әммә Мишкәгә тигән бер рейс Өфө буйынса биш-алты рейсҡа тиң. Шуға күрә Ҡариҙел яғына, Бөрйән яғына - ошондай алыҫ райондарға бензовоздарҙы йыш ебәрә алмайбыҙ", - тине министр урынбаҫары.

"Бензинға ихтыяждың ҙур булыуына бәйле уның сифаты үҙгәрмәнеме?" тигән һорау яңғыраны брифингта. Олег Тыщенко һүҙҙәренсә, яғыулыҡтың ГОСТ-ҡа тап килеүен Росстандарт һәм Роспотребнадзор тикшерә. "Етештереүгә килгәндә, беҙҙең предприятиеларҙа иң яҡшы технологиялар ҡулланыла, евро-5 һәм евро-6 сифатлы бензин сығарабыҙ", - тип билдәләне спикер.

Олег Тыщенко һүҙҙәренсә, канистр менән һатыуҙы тыйыу ҡағиҙәләре федераль хөкүмәт тарафынан билдәләнгән һәм уны ғәмәлдән сығарыу урындағы кимәлдә хәл ителмәй.

БЕР АҘ КӘМЕГӘН

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 16 июлдә Милли медицина радиология тикшеренеү үҙәгенең генераль директоры, Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш белгес-онкологы Андрей Каприн менән осрашты. Осрашыуҙа Башҡортостанда тыуып үҫкән, Михаил Чумаков исемендәге Федераль иммунобиологик препараттарҙы тикшереү һәм эшләү ғилми үҙәгенең генераль директоры, академик Айҙар Ишмөхәмәтов та ҡатнашты.

Радий Хәбиров республикала онкологик ярҙамды үҫтереүҙең әһәмиәтен һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығына, федераль ғилми үҙәктәргә ярҙамдары өсөн рәхмәт белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, республикала бөтәһе 296 табип-онколог эшләй, шуларҙың 179-ы - амбулатор шарттарҙа. 2026 йылдың тәүге ярты йыллығында республикала онкологик ауырыуҙар һаны уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 5,3 процентҡа кәмегән. Осрашыуҙа шулай уҡ 2019 йылдан республикала ғәмәлгә ашырылған "Онкопатруль" проекты тикшерелде. Андрей Каприн Башҡортостанда федераль проекты тормошҡа ашырыу кимәлен юғары баһаланы һәм республиканың идара итеү командаһына төбәктә онкология хеҙмәтен үҫтереүгә иғтибары өсөн рәхмәт белдерҙе.

ЗАМАНҒА ЭЙӘРЕП...

Башҡортостанда тәүге юғары уҡыу йортоноң - Өфө фән һәм технологиялар университетының яһалма интеллект буйынса советы ойошторолдо.

Совет юғары белем биреү системаһында яһалма интеллекты ҡулланыу мәсьәләләре менән шөғөлләнәсәк. "Бөгөн яһалма интеллекты ҡулланыуҙы тәртипһеҙ практиканан аңлайышлы ҡағиҙәләр, ҡулланыу сиктәре, яуаплы кешеләр, аныҡ педагогик маҡсат, уҡытыусыларҙың һәм уҡыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау менән идара ителеүсе системаға күсереү кәрәк. Юғары уҡыу йортонда булдырылған совет ошо мәсьәләләрҙе хәл итеү менән шөғөлләнәсәк", - тине университет ректоры Вадим Захаров.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Хөкүмәте вице-премьеры Дмитрий Чернышенко Төмәндә форумда сығыш яһап, бөгөн студенттар мәғлүмәт эҙләү өсөн генә түгел, ә ҡатмарлы анализ, гипотезаларҙы тикшереү һәм ғәмәли мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн дә яһалма интеллект ҡуллана, тине. Уның һүҙҙәренсә, юғары мәктәптең төп бурысы - уҡыусыларға һәләттәрен күсәйтеү өсөн инструменттар биреү.

Өфө университеты яңы үҙгәрештәргә бик тиҙ яраҡлаша. Юғары уҡыу йортоноң бөтә белем биреү программаларында ла ИИ буйынса дисциплиналар һәм модулдәр бар. Быйыл ул IT-белгестәр әҙерләүҙә башлай. Шулай уҡ SuperJob порталы рейтингында IT-йүнәлештәрҙе тамамлаусыларҙың эш хаҡы кимәле буйынса Рәсәйҙең алдынғы егерме юғары уҡыу йорто иҫәбенә инә.

ЯНҒЫНДЫ КҮҘӘТӘЛӘР

Башҡортостандың урман янғынын һүндереү хеҙмәте урмандарҙағы хәлде һауанан күҙәтеүен дауам итә.

Дүрт маршрут буйынса 4,1 миллион гектар урман фондында вертолет патруле алып барыла. Һауа суднолары Өфөлә, Белоретта һәм Бөрйән районының Иҫке Собханғол ауылында урынлашҡан. Эш "Экологик именлек" милли проекты сиктәрендә башҡарыла. Йыл башынан алып ҡуҡтә 111 осош яһалған, тип хәбәр ителәр республиканың Урман хужалығы министрлығынан. Дөйөм 87 гектар майҙанда 15 янғын теркәлгән. Бөрйән һәм Учалы райондарында ике янғын сығанағы һауанан күҙәтеү барышында асыҡланған.

"Башҡортостандың таулы-урманлы райондары өсөн авиапатруллек итеү күҙәтеүҙең иң һөҙөмтәле ҡоралы булып ҡала. Янғын сығанаҡтарын асыҡлау беҙгә өҫтөнлөк - ваҡыт бирә", - тип билдәләне республиканың урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов. Уның һүҙҙәренсә, ике янғын да тиҙ арала һүндерелгән. Контроль системаһы урманды уттан һаҡлауға һәм янғын сығанаҡтарын мөмкин тиклем иртәрәк асыҡлауға йүнәлтелгән.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры табиптарға пациенттарҙың ялыуҙары өсөн шелтә белдерҙе. Билдәле булыуынса, Өфө ҡалаһының 3-сө балалар стоматология поликлиникаһының һәм Благовещен үҙәк район дауаханаһының баш табиптары шелтә алды. Сығанаҡтар мәғлүмәттәре буйынса, дисциплинар яза - беренсе аҙым. Әгәр учреждениеларҙың эше яҡшырмаһа һәм ялыуҙар ҡабатланһа, етәкселәр эштән бушатыла.

✔ Башҡортостанда һуңғы ваҡытта яғыулыкты ҡулланыу тәүлегенә 3 мең тоннанан 3,5 мең тоннаға еткән. Был хаҡта БР сәнәғәт һәм инновациялар министры урынбаҫары Эдуард Мостафин хәбәр итте. Әммә сираттар һаҡлана, сөнки бөтә заправкалар ҙа эшләмәй. Мәҫәлән, трейдерҙарҙан бәләкәй партиялар менән һатып алған шәхси АЗС-тарға ярҙам итеү мөмкинлеге тикшерелә, тиҙҙән заправка өсөн урындарҙың күбәйеүе ихтимал. Бынан тыш, Өфөлә 35 "Лукойл" яғыулыҡ ҡойоу станцияһының етәүһе эшләмәй ине, был арала уларҙың йәнә яғыулыҡ һата башлауы көтөлә.

✔ "Иннопром-2026" халыҡ-ара сәнәғәт күргәҙмәһендә Башҡортостан хеҙмәттәшлек һәм уртаҡ инвестиция проекттары тураһында бер нисә килешеү төҙөнө. Иң эре проект - Өфө трансформатор заводын яңыртыу. Икенсе проект Туймазыла һыуыту-парландырыу аппараттары производствоһын киңәйтеүгә ҡағыла. Бынан тыш, Башҡортостан төбәк-ара хеҙмәттәшлекте киңәйтте. Ҡарасәй-Черкес, Луганск Халыҡ Республикаһы, Силәбе өлкәһе һәм Сыуашстандың профилле министрлыҡтары менән үҙ-ара эш итеү тураһында килешеүҙәргә ҡул ҡуйылды.

✔ Аҫҡын районында Сарыс йылғаһының ташыуы һөҙөмтәһендә райондың Үршиҙе, Сураш, Солтанбәк ауылдарында 102 йорт яңы биләмәһен һыу баҫҡан. "Ауылдарҙа һыу кимәлен күҙәтеү өсөн ваҡытлыса постар ҡуйылған. Һыу баҫыу ихтималлығы булған урындарҙа йәшәгән халыҡты алдан иҫкәртеү һөҙөмтәһендә 162 кешенең 152-һе һыу ташҡансы үҙаллы эвакуацияланған. Урындағы халыҡҡа адреслы ярҙам күрһәтелә: һыу һәм аҙыҡ-түлек килтереү ойошторолған. Ваҡытлыса урынлаштырыу пункттары әҙер",- тип белдерҙеләр Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса баш идаралығының матбуғат хеҙмәтендә.

✔ Салауат Юлаев һәйкәлен һаҡлау буйынса эштәрҙе башҡарыу өсөн Проект документацияһына Дәүләт тарихи-мәҙәни экспертиза акты Башҡортостан Республикаһының рәсми порталында йәмәғәтселеккә фекер алышыуға сығарылды. Экспертиза заказсыһы - Художество академияһы фонды. Тәҡдимдәр биреү ваҡыты - 2026 йылдың 17 июленән 2026 йылдың 27 июленә тиклем.

✓ Урал Килсенбаев социаль селтәрҙә Өфөләге яңы проектҡа ҡарата фекерен белдерҙе: "Идея бик һәйбәт һәм ваҡытлы, әммә уны урын-еренә еткереп эшләмәгәндәр", - тине беренсе вице-премьер.

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ

ЛЕНИН ПАРКЫНДА...

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә Ленин исемендәге паркты үҙгәртеп ҡороу эштәре менән танышты.

Әйткәндәй, йәмәғәт киңлеген "Тормош өсөн инфраструктура" милли проектының "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" программаһы буйынса яңыртыу эшен былтыр яҙ башлағайнылар һәм быйыл октябрҙә тамамларға уйлайҙар. Парк төбәктәге мәҙәни мираҫ объекты статусына эйә. Шуға ла Башҡортостан Башлығы ҡушыуы буйынса проект республика Йәмәғәт палатаһының тарихи мемориалдарға һаҡсыл ҡарашты һәм технологияларҙы күҙәтеүсе махсус эш төркөмө контролендә. Билдәле булыуынса, подряд ойошмаһы вәкилдәре баҫҡыстарҙың гранитлы тупһаларын ҡайтанан тергеҙеүҙе тамамлаған, амфитеатрҙы, фонтандарҙы монтажлаған. Эшселәр кафе бинаһын күтәрә, инженер селтәрҙәрен һуҙа, яҡтыртыу бағаналарын, яҡтыртҡыстарҙы ҡуя һәм башҡа эштәрҙе атҡара.

Радий Хәбиров үҙгәртеп ҡороу эштәренең раҫланған графикка ярашлы атҡарылыуын билдәләне. "Ҡаланың был өлөшөн, ниһайәт, тәртипкә килтерә аласағыбыҙға ҡыуанам. Ысынлап та, шәп килеп сығасаҡ. Был парк оҙаҡ ҡына ваҡыт мемориаль киңлек кенә булды. Беҙҙең маҡсатыбыҙ - уны кешеләр өсөн ял урыны итеү. Шуға күрә бында ике балалар майҙансығы, саралар өсөн амфитеатр, спорт зоналары барлыҡҡа киләсәк", - тине Радий Фәрит улы.

ҠУРСАҠ ТЕАТРЫ...

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры үҙенең кескәй тамашасыларына һәм йәйге каникулдар мәлендә Өфөгә ҡунаҡҡа килгән балалар өсөн ҡыҙыҡлы экскурсия тәҡдим итә.

Йәйҙең иң ҡыҙыу мәлендә лә театр ялға туҡтамай, балалар өсөн махсус программа тәҡдим итә. "Һаумы, ҡурсаҡ театры донъяһы!" тип аталған проект - ҡурсаҡ театры һәм уның сәхнә артындағы майҙансыҡтар буйлап ойошторолған мауыҡтырғыс сәйәхәт ул. 29, 30, 31 июль көндәрендә сәғәт көндөҙгө 12-лә үтәсәк сәйәхәт мәлендә балалар һәм уларҙың ата-әсәләре музей майҙаны, ҡурсаҡтарҙы һаҡлау урыны һәм рәссамдың оҫтаханалары менән таныша аласаҡ. Ә 8 август көндө ҡурсаҡ театры әкиәттәр уйнай башлаясаҡ.

"РӘХӘТТӘ" РӘХӘТЛӘН!

25-26 июлдә Өфөләге "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында Рәсәй кимәлендәге V "Рәхәттә" халыҡ-ара һаулыҡ һәм туризм форумы үтә.

Был юлы ойоштороусылар төп иғтибарҙы әүҙем оҙон ғүмерлелек темаһына бүлмәксе. "Сәләмәтлек биләмәһе"ндә урынлаштырылған алдынғы медицина технологиялары ярҙамында һәр кем бушлай һаулығын тикшертә аласаҡ. Был үҙенсәлекле "киңлек" иртәнге сәғәт 10-дан киске 17 сәғәткә тиклем парктағы үҙәк аллеялағы тирмәләр павильонында эшләйәсәк. Унда артериаль ҡан баҫымын, тән ауырлығын үлсәргә, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлеген тикшертергә мөмкин буласаҡ. Мөрәжәғәт итеүселәргә Өфөләге 43-сө поликлиника терапевы ҡабул итәсәк һәм һаулыҡ менән бәйле һорауҙарығыҙға яуап бирәсәк. Әгәр ул берәй сирҙе асыҡлаһа, ентекле тикшереүгә ебәрәсәк. Ошонда уҡ төп анализдарҙы тапшырырға мөмкин буласаҡ. ВИЧ-инфекцияға аноним тест үткәреп буласаҡ.

Фестивалдә, медицина тикшереүҙәренән тыш, мунса мәҙәниәте менән таныштырасаҡтар. Маҡтаулы ҡунаҡтарҙың береһе, сабыныу оҫтаһы, Мунса эше академияһы уҡытыусыһы Иван Бояринцев киләсәк. Ул миндекте, еҫле майҙарҙы дөрөҫ файҙаланырға, мунсалағы һауа температураһын дөрөҫ файҙаланыу һәм башҡалар тураһында һөйләйәсәк. Фестивалдә һеҙҙә шулай уҡ башҡорттарҙың мунса инеү йолалары мөхите, спорт ярыштары, милли аш-һыу көтә. Шуныһы ҡыуаныслы: бөгөн республикала сәләмәт тормош алып барыу, тыуған яҡты өйрәнеү төп брендтарҙың береһенә әүерелә бара.

БАШ ҠАЛАМ

ҠАҒИҘӘЛӘР - БАШҠОРТСА

(Башы 1-се биттә).

Әммә ҡайһы бер яҙыуҙарҙа орфографик грамматик хаталар булыуы ла асыҡланды. Башҡортостан Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев социаль селтәрҙә Өфөләге яңы проектҡа ҡарата фекерен белдерҙе: "Идея бик һәйбәт һәм ваҡытлы, әммә уны урын-еренә еткереп эшләмәгәндәр, - тип белдерҙе беренсе вице-премьер. - Бынан ары башҡорт телендәге барлыҡ текстарҙы ла белгестәргә тикшереүгә биреүҙе һорайым".

Урал Килсенбаев Өфө ҡала хакимиәте ҡарамағында эшләгән "Башҡортостан Республикаһы дәүләт телдәре тураһында"ғы законды тормошҡа ашырыу буйынса комиссияға мөрәжәғәт итергә саҡырҙы. Бынан тыш, республикала эшләп килгән БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Терминология һәм Топонимия хеҙмәттәре ярҙам итергә әҙер булыуын, "Баштәржемә" ресурсы барлығын иҫкә төшөрҙө. "Ошо мөмкинлектәр менән файҙаланығыҙ. Туған телгә килгәндә, ҡаланы биҙәүҙә хаталар булмаҫҡа тейеш".

ӘЙТКӘНДӘЙ...

Өфөлә электр самокаттарында һәм башҡа шәхси мобиль транспорт сараларында йөрөү ҡағиҙәләренә Ҡала хакимиәтенең 2024 йылдың 10 октябрендә донъя күргән 1710-сы ҡарары менән ҡайһы бер сикләүҙәр индерелгән. Документҡа ярашлы:

- төп урамдар киҫелешендә (149 урын) тиҙлек сәғәтенә 5-15 км менән сикләнә;
- парк зоналарында - 15-20 км/сәғ;
- уҡыуҙар осоронда инеп-сығыу урындары урамға ҡараған 32 мәктәп янында - 15 км/сәғ.

Электр самокаттарҙа йөрөү ҡағиҙәләрен боҙоу осрағы шаһиты булһағыҙ, фотоларҙы "Самокаттар: йәмәғәт контроле" *(@samokat_ru_bot)* чат-ботына ебәрегеҙ.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

ЯУҘА ЛА, ТЫНЫС ТОРМОШТА ЛА...

Һуғыш яланы хәрби техниканы ғына түгел, уны идара иткән кешеләрҙе лә үҙгәртә, ти "Себер" бригадаһының "Тир" позывнойлы БПЛА хеҙмәте начальнигы.

Был хаҡта ул "Горобзор" мәғлүмәт-яңылыҡтар порталына биргән интервьюһында әйтә. Әңгәмә барышында яугир ни өсөн компьютер уйындары менән мауығыусы йәштәр пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәренең нигеҙен тәшкил итеүен, хәрби дрон операторының тыныс тормошта ҡулланылған пилотһыҙ аппарат менән идарасының айырмаһын аңлата. Уның һүҙҙәренсә, киләсәктә "Баба-Яга" дроны ярҙамында ер эшкәртәсәктәр икән.

"Хәрби шарттарҙа һәм тыныс тормошта эшләгән дрон операторҙарын шартлатҡыстар менән эш итеү оҫталығы айыра. Йәғни, беҙ ҡәҙимге булмаған боеприпастар менән көн һайын эшләйбеҙ. Уларға зарарлаусы элементтар өҫтәп һалабыҙ, ҡуйылған маҡсатҡа ҡарап, фугас көсөн арттырабыҙ. Ошонан сығып, БПЛА операторы пилот ҡына түгел, ә инженер, химик һәм тактик та, тип әйтергә була", - ти "Тир".

Бай тәжрибә туплаған яугир Рәсәй Ҡораллы көстәренең элитаһы һаналған пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәренә эләгергә теләүселәргә, ҡулды күнектереү өсөн, тәүҙә Liftoff кеүек симуляторҙарҙы үҙләштерергә кәңәш итә. Унан һуң махсус курстарға йөрөргә мөмкин, унда дәрестәрҙе, ғәҙәттә, фронтовик-инструкторҙар бирә, тип аңлата ул.

"Һәр саҡ ябайҙан башларға һәм яйлап ҡатмарлы мәсьәләләргә күсергә кәрәк. Әгәр уҡыу барышында ямғырҙа ла, ҡар яуғанда ла эшләй алыуыңды аңлаһаң, әгәр дошманды табыу өсөн ерҙәге һәр нәмәне өҫтән күрергә өйрәнһәң, әгәр сабырлығың етерлек булһа, тимәк, һин - беҙҙең кеше", - ти "Тир".

Уның һүҙҙәренсә, фронтта алған тәжрибә юғалмаясаҡ, уны тыныс тормошта ла ҡулланырға мөмкин буласаҡ. Геодезия өлкәһе, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары - уларҙың барыһы ла ошо йүнәлештәге махсус белгестәргә мохтажлыҡ кисерә икән.

Әлеге ваҡытта Башҡортостанда пилотһыҙ системалар операторҙарын туплау эше әүҙем бара. Хеҙмәткә 18 йәштән 35 йәшкә тиклемге ир-егеттәр алына. Шулай уҡ 45 йәшкә тиклемге йәштәгеләр водитель, сапер, ашнаҡсы кеүек хәрби һөнәр буйынса ҡарала.

Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәренә хәрби хеҙмәткә инергә теләүселәр йәшәгән урыны буйынса хәрби комиссариатҡа мөрәжәғәт итә ала. Шулай уҡ быны Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 156 адресы буйынса урынлашҡан Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты аша ла эшләп була. Ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәре порталында ҡалдырырға ла мөмкин.

Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостандан "Риа" позывнойлы Махсус хәрби операция яугиры С. Динар II дәрәжә "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнде. Геройға награданы "Центр" ғәскәрҙәр төркөмөнә эш сәфәре ваҡытында РФ оборона министры Андрей Белоусов тапшырҙы. Башҡортостандың Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Айгиз Баймөхәмәтов Динарҙы бала саҡтан белеүе, уның 2024 йылдың авгусынан МХО биләмәһендә хеҙмәт итеүе хаҡында һөйләне. Ошо ваҡыт эсендә "Риа" өс тапҡыр яраланған, шуға ҡарамаҫтан, Ватанды һаҡлау буйынса хәрби бурыстарҙы намыҫ менән үтәүен дауам итә.

✓ Өфө районында ауыл хужалығы техникаһы өсөн запас частар етештереү цехы төҙөлә. Республика йортонда уҙған "Инвестиция сәғәте"ндә "Акрос РБ" компанияһының 250 миллион һумлыҡ яңы проектына дәүләт ярҙамы хупланды, тип хәбәр иттеләр Ауыл хужалығы министрлығынан. Производствоны 2028 йылда сафҡа индереү планлаштырыла, цехтың 25 хеҙмәткәре йыл һайын 500 агрегат һәм запас частар етештерә ала.

✓ Әбйәлил районы уҡсыһы Нуриман Хәйруллин һыбай уҡ атыу буйынса Рәсәй кубогында көмөш миҙал яуланы. Башҡортостан уҡсыһының һөҡланғыс сығышы хаҡында республиканың Спорт министрлығынан хәбәр иттеләр. Һыбай уҡ атыу буйынса Рәсәй кубогы 10-12 июлдә Мәскәү өлкәһендә уҙҙы. Нуриман Хәйруллин турнирҙың бөтә маршруттарында ла сығыш яһаны һәм һәр береһендә призлы урындар яуланы. Яҡташыбыҙ "Рейд-2,3,3-90" маршрутында - икенсе, "Башня-90"да - өсөнсө һәм "Скирмиш"та өсөнсө урынды алды.

✓ Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, төбәктә урыны менән һыуҙың туғайға сығыуы, түбән урындарҙы һыу баҫыуы көтөлә. "Әгәр һыу баҫыу ҡурҡынысы янаған ерҙә йәшәһәгеҙ, ҡиммәтле әйберҙәрҙе, документтарҙы һәм аҙыҡ-түлек запастарын өҫкө ҡатҡа йәки бейегерәк урынға күсереп ҡуйығыҙ. Тыштa йөрөгәндә һелкенеп торған ҡоймаларҙы һәм ағастарҙы урап үтегеҙ, өҙөлгән электр сымдарына яҡын килмәгеҙ. Һаҡ булығыҙ!" - тип иҫкәрттеләр ведомствола.

✓ 13 - 15 августа Сибай ҡалаһында "Урал аръяғы-2026" VIII Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы үтә. Сараның төп темаһы - "Еңеү иҡтисады". Ойоштороусылар - Стратегик башланғыстар агентлығы һәм Башҡортостан Хөкүмәте. "Йылдан-йыл республикабыҙҙа уҙғарылған "Урал аръяғы" инвестиция һабантуйында ҡул ҡуйылған контракттар суммаһы ғына артмай, ә проекттарҙың кимәле лә күтәрелә бара", - тип билдәләне республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров һәм бизнес берләшмәләр вәкилдәрен унда ҡатнашырға саҡырҙы.

✓ *Яңы килгән белгестәр тарафынан, ҡыуаныҫҡа күрә, тупаҫлыҡ һәм битарафлыҡҡа осрағаным юҡ әлегә; киреһенсә, бындай күренештәр, ғәжәпкә ҡаршы, күптән эшләгән, олораҡ табиптар яғынан йышыраҡ ҡабатлана.*

ИҪКӘРТЕҮ

ВИДЕОҒА ТӨШӨРӨРГӘ ЯРАМАЙ!

Пилотһыҙ осоусы аппараттар (БПЛА), Һауа һөжүменә ҡаршы оборона эше һәм уларҙы ҡулланыу эҙэмтәләре фотоһын һәм видеоһын баҫып сығарыу хәүефһеҙлек менән янай. Бындай кадрҙарҙың дошман ҡулына эләгеүе һәм мөһим мәғлүмәтте асыҡларға ярҙам итеүе ихтимал.

Омск өлкәһенең бер нисә кешеһен төбәктең нефть эшкәртеү заводына пилотһыҙ аппараттар һөжүме мәлен фото һәм видеороликтар төшөрөп баҫтырғаны өсөн административ яуаплылыҡҡа тарттырҙылар.

Тыйыуға ҡарамаҫтан, улар фото һәм видео төшөрөүҙе һәм социаль селтәрҙә баҫтырыуҙы дауам иткән. Бындай материалдар паника тыуҙыра, кеше именлегенә хәүеф менән янай. Федераль хәүефһеҙлек хеҙмәте бындай мәғлүмәттәрҙе таршырыу дәүләткә хыянат тип баһаланыуы һәм 20 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү төрөндәге язаға килтереүе тураһында иҫкәртә.

Башҡортостанда ла был ҡағиҙәләр ғәмәлдә. Тыйыу Башҡортостан Республикаһы Башлығының 15.09.2025 №УГ-935 Указы менән нығытыла. Уның буйынса БПЛА төрөн, уны осорған һәм ул төшкән урынды, атака объектын, килтерелгән зыянды асыҡларға ярҙам иткән кадрҙарҙы социаль селтәрҙәрҙә һәм комментарийҙарҙа таратырға ярамай. Дәүләт органдарының рәсми мәҡәләләре йәки шуларға һылтанып яҙылған мәғлүмәт иҫәпкә алынмай.

Был тәртипте боҙоусыларға Башҡортостан Республикаһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексы буйынса шундай штрафтар ҡаралған: граждандар өсөн - 3 меңдән 5 мең һумға тиклем, вазифалы кешеләргә - 10 меңдән 30 мең һумға тиклем, юридик шәхестәргә - 100 меңдән 500 мең һумға тиклем.

Хәрби объекттар йәки һауа һөжүменә ҡаршы оборона эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәттәрҙе асҡан өсөн, шул иҫәптән дәүләткә хыянат һәм террористик эшмәкәрлеккә булышлыҡ итеү тураһындағы статьялар буйынса, енәйәт яуаплылығына тарттырыуҙары ихтимал. Мөһим деталдәр ингән осраҡлы кадрҙар ҙа зыян килтереү өсөн ҡулланылыуы ихтимал. Шикле нәмә күрһәгеҙ, төшөрмәгеҙ, шунда уҡ рәсми органдарға хәбәр итегеҙ.

Дошман социаль селтәрҙәрҙәге һәр хәбәрҙе күҙәтә. Баҫылған кадр уға киләһе атҡанда аныҡыраҡ төбәргә мөмкинлек бирә. Һеҙ үҙ аҡсағыҙҙы һәм азатлығығыҙҙы ғына ҡурҡыныс аҫтына ҡуймайһығыҙ, ә дошманға ярҙам итәһегеҙ.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров пациенттарға медицина хеҙмәте күрһәтеү сифатын һәм дауаханаларҙа ҡайһы бер табиптарҙың тупаҫ һәм битараф мөнәсәбәтен ҡаты тәнҡит утына тотто. Һеҙгә ошондай күңелһеҙ күренештәр менән осрашырға тура килгәне бармы?

Альберт БАЙМӨХӘМӘТОВ, хеҙмәт ветераны, 2-се төркөм инвалид, Өфө ҡалаһы: Республика Башлығы Радий Фәрит улы, хәстәрлектәре былай ҙа күп һәм ҡатмарлы булыуға ҡарамаҫтан, йәшәйешебеҙҙең мөһим социаль өлкәһендәге мәсьәләне дөрөҫ тотоп алған, рәхмәт уға. Тәнҡит бик урынлы һәм ғәҙел, тип иҫәпләйем, сөнки һаулыҡ хәлем буйынса миңә бик йыш табиптарға мөрәжәғәт итергә тура килә һәм, үкенескә, һәр ваҡытта ла әлеге сифатлы ярҙамды ала алмаған һәм битараф мөнәсәбәткә тап булып, поликлиниканан әрнеп ҡайтҡан саҡтар була. Мин Өфөнөң бер поликлиникаһында медицина ярҙамы алам. Ысынлап та, республика Башлығы әйтеүенсә, һаулыҡ һаҡлау системаһын үҫтереүгә дәүләт тарафынан ҙур өлөш индерелә. Былтыр ғына беҙҙең был поликлиникала ла ремонт эштәре башҡарылды. Ә табиптар коллективы ныҡ яңырҙы: бик күп йәш белгестәр килде. Ошоға тиклем беҙҙең участкала даими терапевт булмай бик ыҙа сигә инек, хәҙер йәш табип тәғәйенләнде, ләкин күпмегә түҙер - әйтеүе ҡыйын, сөнки участка ярайһы ҙур һәм поликлиниканан алыҫта ята. Даими табип булмауына күбеһенсә ошо сәбәп ине, ахыры. Шулай ҙа яҡшыға өмөт итәбеҙ: егет-терапевт өсөн өйгә саҡырыуҙарға йөрөүе проблема булмаҫ, моғайын.

"Киске Өфө" гәзите биргән һорауға килгәндә, шуны әйтер инем: яңы килгән белгестәр тарафынан, ҡыуаныҫҡа күрә, тупаҫлыҡ һәм битарафлыҡҡа осрағаным юҡ әлегә; киреһенсә, бындай күренештәр, ғәжәпкә ҡаршы, күптән эшләгән, олораҡ табиптар яғынан йышыраҡ ҡабатлана. Бер яҡтан, уларҙы аңларға ла булалыр: тынғыһыҙ, яуаплы һөнәр эйәләре, әлбиттә, пенсия йәшенә етә килә арып та, ялҡып та китәләрҙер, ләкин был аҡланыу була алмай: улар бит был һөнәрҙе үҙҙәре һайлаған, был эшкә аңлы рәүештә килгән. Шулай булғас, ауырыу пациенттар асыулы табиптың ҡорбанына әйләнергә тейеш түгел!

Комиссия үткән саҡта былтыр миңә 46 йыл стажлы П. фамилиялы неврологҡа ике тапҡыр инеп сығырға тура килде. Тәүгеһендә сиратым етеп, кабинетына барып инһәм, яман тауыш менән был: "Ябығыҙ ишекте теге яҡтан, сәй эсеп алырға ла форсат юҡ!"- тип екерҙе. Икенсе тапҡыр инеүемдә лә кәйефе юҡлығы күренеп тора ине: һөйләгәндәремде рыя ғына тыңлап ултырҙы, аныҡлыҡ өсөн өҫтәп, бер һорау ҙа бирмәне, ҡағыҙ киҫәгенә дарыу яҙып тотторҙо ла - хуш. Мин, әлбиттә, уның хаҡында яҡшынан булмаған фекерҙәр ишеткеләй инем, шуға күрә артыҡ борсолманым: миңә уның винпоцетины түгел, ә комиссия ҡағыҙына ҡул ҡуйыуы ғына кәрәк ине. Артабан терапевҡа онлайн яҙылырға маташҡанда әлеге неврологҡа булған пациенттарҙың ошо табип эшенә баһаламаһына тап булдым. Бына нимә яҙа тәүге С. исемле ауырыу: "Эпилепсия менән яфаланам, ошо сәбәпле невролог П.-ға барҙым. Ул мине бик ризаһыҙлыҡ менән тыңланы һәм бер ниндәй ҙә анализ тапшырырға ла, МРТ, ЭЭГ кеүек медицина тикшереүенә лә, эпилептологҡа ла йүнәлтмә бирмәне. Башҡаса мин был табипҡа килмәйәсәкмен!" Тағы бер сирле яҙа:" Киҫкен ауыртыныу менән килдем. Сират рөхсәте менән невролог П.-ға индем.

ҒАИЛӘЛӘР ИҒТИБАРЫНА

ЯҢЫ ТҮЛӘҮ

Башҡортостанда балалы ғаиләләргә яңы түләүгә ғаризалар ҡабул ителә башланы. Уны тәғәйенләү шарттары ниндәй, кем бындай ярҙам һорап мөрәжәғәт итә ала?



Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе идарасыһы Фәнил Вәхитов аңлатыуынса, тәү сиратта был түләүҙәргә 18 йәшкә тиклемге йәки 23 йәшкә тиклемге ике йәки унан күберәк бала тәрбиәләгән, әгәр балалар көндөҙгө бүлектә уҡыһа, эшләүсе ата-әсәләр, уллыҡҡа алыусылар, опекундар һәм попечителдәр дәғүә итә. Түләүҙе ғаиләгә һәр ата-әсә һорай ала. Ярҙам сараһы йыл һайын түбән килемле ғаиләләргә уҙған йыл өсөн түләнгән физик берәмектәрҙең килеменә һалымдың бер өлөшөн ҡапларға мөмкинлек бирәсәк, йәғни быйыл мөрәжәғәт иткәндә былтырғы йыл өсөн НДФЛ түләнеүе мөһим. 2026 йылда ғариза биргәндә ғаиләнең 2025 йылдың ғинуарынан декабренә тиклемге килеме иҫәпкә алынасаҡ. Был осорҙа йән башына уртаса килеме уҙған йылда республикалағы йән башына йәшәү минимумынан бер ярым тапҡырға артмаған (23 673 һум) ғаиләләр түләүгә дәғүә итә ала.

Әммә был мохтажлыҡты баһалауҙың берҙән-бер параметры түгел. Түләү тәғәйенләгәндә мөлкәткә комплекслы баһа биреләсәк, ул берҙәм пособиеға хоҡуҡты иҫәпләгәндә үткәрелгәнгә оҡшаш. Күптәргә берҙәм пособие тәғәйенләү шарттары таныш:

- әгәр ғаиләнең һәр ағзаһына 24 квадрат метрҙан артыҡ майҙан тура килмәһә, ғаиләнең теләһә ниндәй майҙанда бер йәки бер нисә фатиры булырға мөмкин;
- әгәр милеккә бер йорт булһа, ул шулай уҡ теләһә ниндәй майҙанға эйә була ала, ә бер нисә йорт булһа, ғаиләнең һәр ағзаһына ул 40 квадрат метрҙан артмаҫҡа тейеш.

Ғаризаларҙы ҡараған саҡта үткән йылдағы бөтә рәсми килем иҫәпкә алына. Уларға эш хаҡы, пенсия, стипендия, алимент, граждандар-хоҡуҡи килешеү буйынса хеҙмәттәр күрһәтеүҙән, авторлыҡ заказы килешеүҙәре буйынса килемдәр, эшҡыуарлыҡ эшмәкәрле-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандан МХО яугире, разведка отряды командиры Айнур Хужин генерал Шайморатов орденына лайыҡ булды. Премьер-министр Андрей Назаров юғары наградаларҙы Республикаға идара итеү үҙәгендә Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә тапшырҙы. Лейтенант МХО-ла ҡатнашыусыларға даими ярҙам өсөн рәхмәт белдерҙе.

✓Дәүләт Думаһы граждар биләгән ер участкаларын рәсмиләштереүҙең ябайлаштырылған тәртибен оҙайтыу тураһында федераль законға үҙгәрештәр ҡабул итте. Уға ярашлы, 2026 йылдың 1 сентябрендә тамамланырға тейеш "Гараж амнистияһы" 2031 йылдың 1 сентябренә тиклем оҙайтыла. Был граждандарға үҙҙәренең күсемһеҙ милек объекттарын артыҡ бюрократик процедураларһыҙ үҙ исеменә теркәү мөмкинлеген бирә. Росреестр мәғлүмәттәре буйынса, был хоҡуҡ менән илдә 746 меңдән ашыу кеше файҙаланған да инде.

✓Республикала Ауыл хужалығы министрлығының агросәнәғәт комплексы предприятиеларын кредитлау мәсьәләләре буйынса махсус комиссияны эшке тураһында яңы положение раҫланды. Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов ҡул ҡуйған бойороҡ рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Документҡа ярашлы, комиссияның составы һәм эш регламенты раҫланған. Ул ауыл хужалығы предприятиеларының кредит алыуға ғаризаларын ҡарай, кредиттарҙың маҡсаты агросәнәғәт комплексын үҫтереү дәүләт программаһына тура килеү-килмәүен тикшерә, түләргә һәләтле булыуын баһалай.

✓Стәрлетамаҡтан 14 йәшлек гимнастка Полина Дмитриева спорт гимнастикаһы буйынса Рәсәй беренселегендә еңеүсе булды. Башҡортостан вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итеүенсә, Полина конкурстан тыш күпбәйге финалында сығыш яһап, 54,999 балл йыйған. Был уға Рәсәйҙең абсолют чемпионы Анна Калмыкованы уҙып китергә мөмкинлек биргән. "Бындай һөҙөмтә беҙҙә булғаны юҡ ине. Тиҙҙән был спорт төрөндә тәүге олимпия миҙалы ла яуланыр тип өмөтләнәбеҙ", - тине спорт министры.

✓Башҡортостан туристар ағымы күрһәткесе буйынса Рәсәй кимәлендә 16-сы урындан 13-сөгә күтәрелеп, Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында 3-сө урынға сыҡты, тип хәбәр итәләр республика Хөкүмәтенән. Ҡунаҡтарҙың күпселеге күрше Силәбе, Ырымбур, Свердловск өлкәләренән һәм Татарстандан килә. "Туристар һанының артыуы беҙҙең дөрөҫ йүнәлештә барыуыбыҙҙы раҫлай. Беҙгә сәйәхәт ҡылыусының үҙ зауыҡына тап килгән маршрут һайлай алыуы мөһим", - ти республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Светлана Верещагина.

✓ Ысынлап та, насар кәйефен пациенттарға төшөрөп йә юктан ғына ғауға ҡуптарыусылар бар ул беҙҙең арала ла. Ғәҙәттә, улар дауахана етәкселеге алдында яҡшатланып, унан сыҡҡас, ауырыуҙар алдында ысын йөҙөн күрһәтә.

Ләкин ул алдан яҙылып килмәгәнгә күрә, мине ҡабул итмәй сығарып ебәрҙе. Бик тупаҫ ҡатын. Ярай әле терапевт ҡабул итте, рәхмәт уға. Ләкин миңә бит сирем буйынса невролог тикшереүе кәрәк ине!.." Үкенескә, өсөнсө пациент та ризаһыҙлыҡ белдергән: "Башым сатнауға түҙмәй, неврологҡа килдем. Ҡулымда - МРТ һүрәте менән һығымтаһы. Ләкин П. уны ҡарап та торманы. Миңә глицин яҙып сығарып ебәрҙе. Был бит кешене мыҫҡыл итеү! Бик тупаҫ ҡатын. Уға барырға кәңәш итмәйем. Икенсе неврологты һайлағыҙ". Ә инде йоҡоһоҙлоҡтан интеккән 37 йәшлек дүртенсе баһалама авторын әлеге П.: "Был өлкән йәштә була торған нәмә, дауалап булмай", - тигән "диагнозы" менән шаҡ ҡатыра...

Бына шундай табиптар ҙа була шул! Әйткәндәй, был табип 2018 йылдан бирле квалификацияһын камиллаштырыу курсы үтмәгән. Ә бөгөн медицина өлкәһендә - көн дә бер асыш. Фән алға тәгәрәй, ләкин, пациенттарға глицин менән винпоцетин яҙып ултырыусы П. башҡа төрлө дауалау ысулдары менән ҡыҙыҡһынмай. Интернет- рейтингы - нуль! Тикшеренеү, дауалау һөҙөмтәһе, ауырыуға мөғәмәләһе, мәғлүмәтлелеге һәм был табипҡа барырға кәңәш биреү пункттарының һәр береһенә "Ҡот осҡос!" тигән баһа яҙып сығылған. Ошо поликлиника сайтында был неврологты хаҡлы ялға оҙатыуҙары хаҡында хәбәр уҡып, ҡыуанғайным - бушҡа булып сыҡты, ахырыһы: дауалау учреждениеһының табиптар исемлегендә һаман да уның фамилияһын һәм ҡабул итеү сәғәттәрен күреп, аптырашта ҡалдым...

Мәликә ЙӘҒӘРӘРОВА, медицина хеҙмәткәре: Һаулыҡ һаҡлау системаһында оҙаҡ йылдар инде ауыл ерендә эшләйем. Был өлкәләге бөтөн яман-яҡшы күренештәрҙе, йәғни "кухня серҙәрен", белеп-өйрәнеп, хатта ҡайһылары менән килешеп тә бөткәнмен. Районыбыҙҙың баш табибы әле йәш кеше, былай тырыш, ғәҙел күренә, шуға әлегә уның исемен сығармайым, тип, йәшәгән-эшләгән төйәгемде күрһәтмәүем аңлашылалыр, ә беҙҙең эштәге тәнҡитләнеүсе кире факттар беҙҙең район өсөн генә түгел, башҡа төбәктәргә лә хас типик күренеш икәнен дә яҡшы беләм, шуға күрә аноним рәүештә булһа ла "өйҙән сүп сығарыу"ҙан тартынмайым.

Республика Башлығының тәнҡите бик ваҡытлы һәм ғәҙел. Уның әйтеүе буйынса, һәр дүшәмбе һайын оператив кәңәшмәлә һаулыҡ һаҡлау министры отчетынан һуң табиптар һәм кесе медицина хеҙмәткәрҙәренең эш сифатын баһалау күрһәтмәһе миңә бик оҡшаны. Ысынлап та, насар кәйефен пациенттарға төшөрөп йә юктан ғына ғауға ҡуптарыусылар бар ул беҙҙең арала ла. Ғәҙәттә, улар дауахана етәкселеге алдында яҡшатланып, унан сыҡҡас, ауырыуҙар алдында ысын йөҙөн күрһәтә, юғарынан танау буйынан ҡарап, үҙҙәрен өҫтөн ҡуйып йөрөй башлай. Айырыуса беҙҙең менән эшләүсе баш табип урынбаҫары һәм өлкән шәфҡәт туташы үҙҙәрен һауалы тота. Пациенттарға ғына түгел, ундайҙарҙан минең кеүек төпкөлдә эшләгән фельдшер һәм шәфҡәт туташтарына ла эләккеләй. Ләкин мин, элекке кеүек, ундай коллегалар алдында ҡаушап төшмәйем хәҙер, сөнки ауылдаштарымдың ихтирамлы мөнәсәбәте, күп йыллыҡ тәжрибәм һәм, әлбиттә, өлкәнләтә йәшем дә ундайҙарға тура ҡарап һөйләшергә хоҡуҡ бирә, ауырыуҙарым мәнфәғәтен яҡлап, кәрәкле медицина саралары, аппаратуралар, препараттар талап итә алам.

Хаҡлы ялға сыҡҡас, иркен һулап, ҡыуанғайным, ләкин ауылға эшкә килеүселәр күп булмағанлыҡтан, баш табиптың урыныма кеше тапҡансы эшләп торорға үтенесен кире ҡаға алманым. Барыбер ауырыуҙар миңә йүгереп киләсәк, төн уртаһында ишегемде ҡағасаҡ - нисек итеп уларҙан баш тартайым? Ә әйтергә теләгәнем шул ине: республика Башлығы Радий Хәбиров талап иткәнсә, аҙна һайын медперсонал эше сифатына отчетты район кимәлендә лә булдырырға кәрәк. Сөнки Башҡортостан ҙур, ә төпкөл төбәктәрҙең күренмәй тороп ҡалыуы йә пациенттар ризаһыҙлығының баҫырып ҡалдырылыуы, тәнҡит өсөн эҙәрлекләү ихтималлығы ла бар бит, юғиһә. Пациенттар баһаламаһы буйынса һәр районда үҙенсәлекле монитор-рейтинг асып ебәреү бик күп тупаҫлыҡтарға юлды ябыр, битарафлыҡтарҙы юҡҡа сығарыр һәм проблемаларҙы урында оператив хәл итергә булышыр ине, тигән фекерҙәмен.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА
яҙып алды.

генән, мөлкәтте һатыуҙан килгән килемдәр, шулай уҡ банктарҙағы вкладтар буйынса процент һ. б. инә.

Әгәр ғаиләлә 18 йәшкә тиклемге йәки 23 йәшкә тиклемге 2 бала булмаһа, шулай уҡ йән башына уртаса килем йәшәү минимумының бер ярым тапҡырынан артһа, түләү бирелмәй.

Гражданлыҡ, ғариза биреүсенең балалары һаны һәм ҡағиҙәләрҙә ҡаралған башҡа шарттарҙы үтәү мөһим әһәмиәткә эйә. Әгәр ата-әсәләрҙең береһе һәм уның балалары Рәсәй гражданы булһа, ул икенсе ата-әсәһенең гражданлығына ҡарамаҫтан, ярҙам сараһын тәғәйенләү өсөн мөрәжәғәт итә ала.

Ата-әсәләрҙең никах статусы һәм балаларҙың кем менән йәшәүе, әгәр башҡа шарттар үтәлһә, түләү алыу хоҡуғына йоғонто яһамай. Шулай уҡ ғаиләлә ике бала һәм уларҙың аталары төрлө булған осраҡта, ғаилә башлығы түләүҙе рәсмиләштерә алмаясаҡ (әгәр уның бер балаһы булһа).

Ике һәм унан күберәк баланың эшләүсе ата-әсәләре өсөн түләү йылына бер тапҡыр бирелә. Түләүҙе билдәләү өсөн ағымдағы йылдың 1 июненән 1 октябренә тиклем мөрәжәғәт итергә мөмкин. Ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәре, Күп функциялы үҙәк аша йәки Рәсәй Федерацияһының Башҡортостан буйынса бүлексәһенең теләһә ниндәй клиент хеҙмәтендә бирергә мөмкин. Ҡарарҙар 10 эш көнө эсендә ҡабул ителә, ҡарау 30 көнгә тиклем оҙайтылырға мөмкин. Билдәләнгәс, түләү 5 эш көнө эсендә килә.

Граждандар Берҙәм бәйләнеш үҙәге телефоны буйынса шылтыратып, Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе белгестәренә мөрәжәғәт итә ала: 8-800-100-00-01.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

НЫҠЛЫ ТЫЛ - ЕҢЕҮҘЕҢ ЯРТЫҺЫ

Үткән аҙнаның йома төнөндә Wildberries маркетплейсының Тамбов өлкәһендәге Котовск складына украин дрондары һөжүме һөҙөмтәһендә логистика үҙәгенең 7 хеҙмәткәре һәләк булған, 25 кеше яраланған. Ә шәмбе төнөндә дошман аппараттары Мәскәү өлкәһенә ябырылды. Һөҙөмтәлә Ногинск нефть базаһы биләмәһендә янғын сыға. Яҡындағы бала табыу йорто хәүефһеҙ урынға күсерелә.

Мәскәү мэры Сергей Собянин һүҙҙәренә ҡарағанда, баш ҡалаға яҡынлаған 85 дрон юҡ ителгән, ә 19 июль кисенән алып Мәскәү өлкәһе төбәктәренә табан осоролған 400-ҙән ашыу шартлатҡыс аппараттың күбеһе бәреп төшөрөлгән. Мина ярсыҡтарынан йәрәхәтләнгән 7 кеше Мәскәү өлкәһе Домодедово дауаханаһына килтерелгән, шуларҙың өсәүһе - сит ил граждандары. Дошман дрондары Подольск, Домодедово, Одинцово ҡалаларында торлаҡ йорттар өҫтөнә төшөп шартлай, янғындар сыға. Был турала Мәскәү өлкәһе губернаторы Андрей Воробьев хәбәр итә. РФ Тәфтиш комитеты Котовск һәм Электросталь логистика үҙәктәренә һөжүм һөҙөмтәһендә тыныс граждандар һәләк булыуы сәбәпле, теракт тураһында енәйәт эше ҡуҙғатты. Рәсәй Ҡораллы көстәре Киевҡа төбәп, "Кинжал" баллистик, "Циркон" ракеталары һәм дрондар менән көслө яуап уты асты: 19 июлгә ҡарай төндә Украинаның хәрби-сәнәғәт комплекстары һәм логистика үҙәктәрен, пилотһыҙ осоусы шартлатҡыс аппараттар йыйыу-етештереү пункттарын юҡҡа сығарҙы, тип хәбәр итә хәрби эксперт Анатолий Матвейчук "АиФ" аҙналығына.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, дошман дрондары ямғырҙан һуң ҡотороп үрсегән бәшмәк төҫлө тиҫтәләп йөҙәрләгән һанда Рәсәй өҫтөнә яуҙырыла, ә иң яманы: тыныс граждандар ғүмерен өҙә, торлаҡ йорттарҙы емерә, яндыра һәм иң ҡурҡынысы - был хәл, кемдер комментарийҙа әйтмешләй, "көндәлек, ғәҙәти" күренешкә әүерелә бара. Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһенә туҡтауһыҙ террористик һөжүме менән Украина ҡурҡытыу маҡсатын ғына күҙҙә тотмай, ә көнбайыш партнерҙары иғтибарын да йәлеп итмәксе. Шул уҡ ваҡытта улар граждандар объекттарына һөжүмдең хәрби енәйәт икәнлегенә күҙ йома.

Әйткәндәй, "Европа икегә бүленә" бара, тип яҙа донъя мәғлүмәт сығанаҡтары: Евросоюздың өҫтән бер өлөшө Киев режимына ярҙам итеүҙән баш тарта. Spigel немец журналы яҙып сығыуынса, 2023 йылда Украинаға хәрби ярҙам яҡлы 21 илдән бөгөнгө көнгә 14 кенә ил тороп ҡалды. Хатта ки Австрия, Германия, Греция, Италия, Португалия һәм Франция Рәсәйгә ҡаршы әҙерләнгән 21-се санкция пакетын йомшартыуҙы талап иткәнлектән, Евросоюз әлегә был документ буйынса килешеүгә өлгәшә алмай. Тик был илдәр, үкенескә күрә, үҙ мәнфәғәттәрен ҡайғырта һәм санкцияны бөтөнләй юҡҡа сығарыу яҡлы түгел.

Шуныһы ҡыҙыҡ: Рәсәйгә мөнәсәбәтендә айырыуса Германия лидерының ыңғайға үҙгәреүе һәм Мәскәү менән килешеүгә ынтылыуы һиҙелә. Баҡтиһәң, аҫтына һыу үтә башлаған икән. Канцлер Мерцтың үҙенең таныуынса, "илдәге энергетика көрсөгөнөң сәбәбе - Рәсәйҙән газ килмәүендә". Ләкин тарих ағышын һәм әҙәм баштарын бутаусы һәр ваҡыт табылып ҡына тора. Отставкаға киткән Кир Стармер урынына килгән Британияның яңы премьеры Энди Бернем вазифаһына инер-инмәҫтән ГФР канцлеры Фридрих Мерц, Франция президенты Эммануэль Макрон һәм НАТО-ның генераль секретары Марк Рютте менән телефондан һөйләшә һәм Украинаға ярҙам мәсьәләһен нығытып ҡуя. Өҫтәүенә, ошо көндәрҙә Халыҡ-ара валюта фонды (МВФ) етәкселеге Киев режимын күтәрмәләү маҡсатында 690 млн доллар кредит бүлеү планын хупланы. Шулай итеп, Европалағы оппозицион көстәрҙең кәйефе Евросоюздың Рәсәйгә ҡаршы сәйәсәтен үҙгәртә алыуы икеле, тип фаразлай сәйәси күҙәтеүселәр.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Башҡортостанда концессия килешеүе нигеҙендә биш яңы мәктәп төҙөлә. Эштәрҙе "ПроШкола" фирмаһы алып бара. Килешеүгә ярашлы, Өфөнөң Ленин районында, Глумилин һәм Сағыу биҫтәләрендә, шулай уҡ Стәрлетамаҡта һәм Нефтекамала яңы мәктәптәр төҙөлөшө 2027 йылдың көҙөнә тиклем тамамланырға тейеш. "Концессия алымы инвесторҙың һәм федераль бюджет аҡсаһын йәлеп итергә мөмкинлек бирә", - ти республиканың мәғариф министры Илдар Мәүлетбирҙин.

✓ Республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров декабргә Өфөлә төҙөлгән вуз-ара студенттар кампусында эштәрҙе тамамлау бурысын ҡуйҙы. Уның һүҙҙәренсә, ошо ваҡытҡа объект студенттар унда йәшәй алһын өсөн бөтә кәрәкле ҡорамалдар, мебель һәм инвентарь менән тулыһынса комплектланған килеш тапшырылырға тейеш. Ете башнянан торған кампустың монолит каркасын ҡороу тамамланған, әле биналарҙы тыштан йөҙләү һәм быяла ҡуйыу эштәре алып барыла, эстә бүлмәләр бүленә.

✓ Өфөлә балаларҙы балалар баҡсаларына урынлаштырыу тәртибенең административ регламенты раҫланды. Тейешле ҡарар ҡала хакимиәте сайтында баҫылған. Документҡа ярашлы, ғаризаны бала тыуғандан алып уға 6 йәш ярымға тиклемге осорҙа ата-әсәһе йәки законлы опекуны бирергә тейеш. Теләгән балалар баҡсаһында буш урындар булмаған осраҡта, электрон йәки яҙма формала ризалыҡҡа ярашлы, был райондың башҡа мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында урын тәҡдим ителә. Сират реестры электрон порталда алып барыла.

✓ Йәйге каникул осоронда Башҡортостанда йәштәрҙең ваҡытлыса мәшғүллеген тәьмин итеүгә ҙур иғтибар бүленә. Быйыл белешмә менән белгестәргә бөтәһе 1,5 меңдән ашыу үҫмер мөрәжәғәт иткән. "Быйыл 14-18 йәшлек 12,4 мең үҫмерҙе ваҡытлыса эш менән тәьмин итергә уйлайбыҙ. Эш хаҡынан тыш, йәштәр ай һайын Кадрҙар үҙәгенән матди ярҙам сифатында 2,1 мең һумдан ашыу аҡса ала", - ти Башҡортостандың Кадрҙар үҙәге директоры Ридан Әхйәмов. Уҡыуҙан буш ваҡыттарында уҡыусылар һәм студенттар үҙҙәрен вожатый, тәрбиәсе ассистенты, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса хеҙмәткәр, комплектлаусы йәки менеджер ярҙамсыһы ролендә һынап ҡарау мөмкинлегенә эйә.

✓ АЗС-тарҙа иң оҙон сираттар Дим һәм Инорс кеүек халыҡ күп йәшәгән райондарҙа теркәлә, ҡайһы берҙә 100-150 машина булып китә. Өфөлә бер автомобилгә яғыулыҡ тултырыуҙың уртаса ваҡыты 6-7 минут тәшкил итә. Шунан сығып, сиратты үтеү ваҡытын иҫәпләп сығарырға мөмкин. 10 литр күләмендә яғыулыҡ һатып алыусыларҙың күберәк булыуы күҙәтелә. Тимәк, күптәр бакты тултырыу өсөн сиратта тора.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

✓ Һыу аҫтында тын алмай биш-алты минуттан артыҡ ятҡан кешенең баш мейеһендә кире ҡайтарып булмаҫлыҡ процестар башлана, унан бер кем дә тере ҡалмай. Ә һеҙҙең улығыҙ бик оҙаҡ ваҡыт булған бит күл төбөндә.

ПЕДАГОГ ҺҮҘЕ

Константин УШИНСКИЙ

БАЛА ТӘРБИӘҺЕ

Ғәҙәт ябай сифат түгел

Баланың холҡо-фиғеле генә түгел, уның белем алыуы, артабанғы үҫеше ғәҙәттәренә бәйле. Баланы уҡырға, яҙырға өйрәткән кешегә ғәҙәттең ни тиклем ҙур әһәмиәткә эйә булғанлығы асыҡ күренә. Тимәк, теге йәки был ғәҙәткә өйрәтеү ҡабатлатҡан күнекмәләрҙән тора. Күнекмәләр аша ғәҙәткә инеп киткән сифаттар балаға артабанғы тормошонда ярҙам итә. Әйтәйек, яҙырға өйрәнгән саҡта уға ҙур ихтыяр көсө кәрәк. Ихтыяр көсө берәй нәмәне эшләүҙе ҡабат-ҡабат талап итеүҙән башлана. Һеҙ талап иткән нәмә баланың ғәҙәтенә әүерелгәс, артабанғыһын талап итә башларға кәрәк. Бер юлы бер нисә талап ҡуйып, ҡайһы береһен аҙағына еткереүҙе шарт итеп ҡуймаһаң, йомшаҡлыҡ ебәрһәң, ихтыяр көсө тигән ышаныслы тәрбиә көсөнән мәхрүм ҡаласаҡһығыҙ. Шуның өсөн баланан талап иткән ҡағиҙәләрҙе өҫтө-өҫтөнә өйөү дөрөҫ булмай.

Балала насар ғәҙәт башланыу ҙа тәбиғи хәл. Әммә насар ғәҙәтте бөтөрөү яңыны өйрәтеүгә ҡарағанда ауырыраҡҡа тура килә. Даими дөрөҫ тәрбиә алып барылһа ғына ҡайһы бер насар ғәҙәттәр үҙенән-үҙе онотола, ә инде исем өсөн генә тәрбиә эше алып барып, баланың эске күңеленә иғтибар ителмәһә, насар ғәҙәттең тамырланыуы бик тә ихтимал.

Баланың насар ғәҙәтен бөтөрөү маҡсаты ҡуйғанда уның ғәҙәтенә ҡаршы түгел, ә был ғәҙәтте барлыҡҡа килтергән сәбәпкә ҡаршы тәрбиә эше алып барырға кәрәк. Мәҫәлән, балала алдау ғәҙәте барлыҡҡа килде ти. Ни өсөн алдай ул? Уны үтә иркәләп, маҡтап, ҡупайтып ебәреүҙәнме? Уның һәр һүҙе һеҙҙә һоҡланыу тыуҙырыуҙанмы? Әллә уға иғтибар кәмеп, һеҙҙең иғтибарығыҙҙы йәлеп итергә тырышыуҙанмы? Улай булһа, баланың алдауына шик белдереп, ышанмағанлыҡты һиҙҙертеп ҡуйғыларға кәрәк.

Ә инде үтә ҡаты ҡуллы булыуҙан балала алдау ғәҙәте башланһа, мөнәсәбәтте йомшартырға, иплерәк булырға кәрәк.

Баланың насар ғәҙәтен бөтөрөүҙә ҡырҡа боролош яһарға ынтылырға ярамай. Ул саҡта тәрбиәләүсе кешегә ҡарата нәфрәт уяныуы ихтимал. Тәрбиәсенең тәрбиә ысулдары төрлө булырға тейеш. Ҡайһы саҡта баланың алдауына иғтибар итмәгән кеше булаһың. Ҡайһы саҡта алдағанын белгәнлегеңде һиҙҙереп, кире мөнәсәбәтеңде белгертә биреп ҡуяһың.

Насар ғәҙәтте бөтөрөү ысулдары файҙалы, ипле, аҡыллы булырға тейеш. Ә инде бөтөрөргә теләгән насар ғәҙәт, ысынлап та, насар ғәҙәт булырға тейеш - уныһы инде үҙенән-үҙе аңлашыла.

Был осраҡта тағы бер һорау килеп тыуа: тәрбиәсе балаға уның был ғәҙәтенең, ысынлап та, насар икәнлеген аңлатырға тейешме, әллә үҙе әйткәндәрҙең һис шикһеҙ үтәлешен генә талап итергәме?

Насар ғәҙәттәрҙең дә төрлөһө була. Балаға быны аңлатыу һәм үҙенең дә ул ғәҙәтте ташлауға ихтыярын егеү яҡшы, әммә ҡайһы бер ғәҙәттәрҙе ташлатыу өсөн ҡәтғи тыйыу ҙа кәрәк.

Ә инде насар ғәҙәтте ташлаған осраҡта - бүләкләү йәки, киреһенсә, ташламаған хәлдә яза биреү менән ҡурҡытыу бөтөнләй яңылыш алым.

Әммә ҡайһы бер осраҡта, мәҫәлән, эшкә ялҡауланыу, ығышлыҡ кеүек ғәҙәттәрҙе бөтөрөүҙә аҙыраҡ дәртләндереп ебәреү ҙә зыянға булмаҫ. Ошо юл менән унда хеҙмәт яратыу ғәҙәте тәрбиәләп була.

(Дауамы. Башы 24-28-се һандарҙа).

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

ҺЫУҒА БАТҠАН МАЛАЙҘЫ...

ни өсөн ҡотҡара алманым?

Мин хәрби табип булып хеҙмәт итеп йөрөгән гарнизондан бер саҡырым тирәһендәге ауыл ситендә Фазанка тип аталған бер күл бар ине. Йәйге эҫелә уның буйы һыу инеүсе бала-сағa менән тула. Ял көндәре ололар ҙа унда килеүсән. Шулай бер ял көндө, ике улымды эйәртеп, мин дә килдем. Сисенеп, башҡаларҙан ситтәрәк, аулағыраҡ урын табып, беҙ ҙә һыуға төштөк.

Күпмелер ваҡыттан, халыҡтың иң күп йыйылған урынында балалар ҙа, ололар ҙа ни өсөндөр мыжғып алып киткәндәй тойолдо. Ололар йөҙөү, сумыу буйынса ярышалар ине, буғай. Уларға әллә ни иғтибар ҙа итмәй, улдарым менән мин, ярыша-ярыша йөҙөп, уйнауыбыҙҙы дауам иттек. Тағы бер ун минут тирәһенән, әлеге халыҡ йыйылған урынға яҡынараҡ барып килгән өлкән улым Салауат: "Атай, бер бала батҡан, буғай, шуны эҙләйҙәр икән баянан бирле", - тине. Һыуҙа мыжғып, селбәрәләр һымаҡ сумып, йөҙөп йөрөгән балаларҙың кемеһе сумып, кемеһе кире сыҡҡанын абайламай ҡалғандар, күрәһең. Мин дә улар янына барып, һыу төбөнә сумып, эҙләнеп йөрөгән ололарға ҡушылдым. Күл һыуы буръяҡ булғанға күрә, күҙҙе асмай сумабыҙ, әлбиттә. Тағы биш-ун минут үткәс, сираттағы сумыуымда, һыу төбөндә бер баланың аяғынан тотоп алдым. Тәрәнлеге ике-өс метр самаһы булған был һыу төбөнә сумып еткәнсе, үпкәмдәге тыным бөткәйне. Өҫкә йөҙөп сыҡтым да, ныҡ ҡына тын алып, ҡабаттан сумдым. Бала сағымдан һыуға сумып, оҫта ғына йөҙөп өйрәнгән булыуым бында ярҙам итте. Һул ҡулым менән малайҙың бер аяғынан тотоп, икенсе ҡулым менән ишеп, ҡабат өҫкә ҡалҡып сығыуыма йәнә тыным бөттө. "Бына, таптым, алығыҙ", тип кенә ҡысҡыра алдым яҡындағы кешеләргә. Ике ир, малайҙы тотоп алып, ярға ҡарай йөҙөп китте. Улар артынан мин дә эйәрҙем.

Ярға алып сыҡҡас та, табип кеше булараҡ, был үҫмергә, һис кисекмәҫтән, беренсе ярҙам күрһәтергә тотондом (батҡанына кәмендә ун биш минут үткән булыуына ҡарамаҫтан). Ҡарамаҡҡа 11-12 йәшлек ине был үҫмер. Муйынындағы барлау тамырына баҫып, йөрәге туҡтағанын раҫланым, был хаҡта тирә яғымда торған тиҫтәләгән шаһиттарға ла әйттем... Тубығыма йөҙтүбән һалып, үпкәһендәге ҡыуын ҡоҫторҙом, унан салҡан әйләндереп, ергә һалдым да, ауыҙына өрөп, яһалма тын алдыра, йөрәгенә массаж яһарға тотондом. Шул арала госпиталдән ашығыс ярҙам машинаһы ла килеп етте. Фельдшерҙан оҙон энәле шприц менән адреналин һорап алып, йөрәгенә укол да ҡаҙаным, әммә баланың йөрәген эшләтеп ебәреп булманы. Үлем осрағын раҫлау хаҡындағы акт төҙөгәндән һуң, фельдшер уны "санитарка" машинаһына һалып, алып китте. Ошоноң менән эш тамам булһа, бәлки, был хаҡта яҙып та тормаған булыр инем...

Малайҙы ҡотҡарып булмаҫын алдан белеп тә, ни өсөн бына ошо эштәрҙе башҡарған тип уйлайһығыҙ, хөрмәтле дуҫтар? Эйе, табип бурысын атҡарыуым ине быныһы. Әгәр ҙә һыуҙан сығарғас та "Ярҙам күрһәтеүҙән бер ниндәй ҙә файҙа булмаясаҡ, малай үлгән бит инде" тип, ҡул һелтәп китеп барған хәлдә, һуңынан минең үҙем менән ни булыр ине тип уйлайһығыҙ? Дөп-дөрөҫ! Ошо хәлдән һуң ике-өс аҙна үткәс, минең ҡабул итеү бүлмәмә бер ҡатын килеп инде. Һаулыҡ һорашҡас, үҙен таныштырҙы. Әлеге күл буйындағы ауылдың кешеһе - батып үлгән малайҙың әсәһе икән.

- Доктор, минең улыма һыу буйында һеҙ беренсе ярҙам күрһәтеп маташҡанһығыҙ тип ишеткәйнем...

- Эйе, тыңлайым һеҙҙе. Ярҙам күрһәтеп маташыу ғына ла түгел, улығыҙҙың кәүҙәһен һыу төбөнән табып, һөйрәп сығарыусы ла мин инем...

- Улымды һыуҙан сығарғанда уның беләгендә пульсы булған икән тип ишеттем...

Бына эш ниҙә! Әлеге ваҡиғаны тағы иҫләнем. Малайҙың йөрәгенә мин массаж яһаған саҡта бер ҡатын килеп, уның беләгенән тотҡолап: "Пульсы бар, ахырыһы..." тип һөйләнә ине шул. "Малайҙың батып үлгәненә ун биш минуттай ваҡыт үткән, йөрәге лә эшләмәй, ниндәй пульс тураһында һүҙ алып бараһығыҙ! - тигәйнем уға етди ғына. - Һеҙ үҙегеҙҙең бармаҡ осондағы пульсығыҙҙы тояһығыҙ!.." Фельдшер менән үлем осрағын аныҡлау акты төҙөгән арала әлеге ҡатындың "Мин - экстрасенс, хәҙер йөрәген эшләтеп ебәрәм" тип, мәйет янында ҡулдары менән сәйер хәрәкәттәр яһауына әллә ни иғтибар ҙа итмәгәйнем... Ошо хаҡта әлеге малайҙың әсәһенә бик ентекләп һөйләп бирҙем.

- Һыу аҫтында тын алмай биш-алты минуттан артыҡ ятҡан кешенең баш мейеһендә кире ҡайтарып булмаҫлыҡ (необратимый) процестар башлана, унан бер кем дә тере ҡалмай. Ә һеҙҙең улығыҙ бик оҙаҡ ваҡыт булған бит күл төбөндә. Экстрасенстарҙы күберәк тыңлаһағыҙ, улар тағы әллә ниҙәр һөйләр һеҙгә!

- Шунан тағы, госпиталдән "скорый" һуңлап килгән, тип тә әйтәләр... - тине әсә кеше, тауышы бер аҙ ҡалтыранғандай тойолдо.

- Әйткәндәй, госпиталдән "ашығыс ярҙам" бик тиҙ килеп етте, - тинем уға мөмкин тиклем тынысыраҡ итеп, - тик, әлеге әйтмешләй, малай үлгән ине. Улығыҙҙың кәүҙәһен һыу төбөнән сығарған мәлдә "скорый" ярҙа көтөп торған хәлдә лә хатта, минең урында берәй күренекле медицина профессоры булһа ла, уны бер кем дә ҡотҡара алмаҫ ине. Оло ҡайғығыҙҙы уртаҡлашам. Үҙегеҙҙең һәм башҡаларҙың нервыһын бөтөрөп, ундабында йөрөмәҫкә кәңәш итәм.

Минең мөмкин тиклем асыҡлап, тыныс итеп аңлатыуым әсә кешенең күңеленә барып етте булһа кәрәк - башҡаса килеп бимазалап йөрөмәне. Ә шулай ҙа... күңелдә ниндәйҙер күңелһеҙ тойғо ҡалды. Минең урында, бәлки, кемдер берәү: "Нишләп балағыҙҙы һыу буйына ҡарауһыҙ ебәргәнһегеҙ, фәлән дә төгән..." - тип, был ҡатынды ҡыҙҙырып та сығарыр ине. Әммә мин әсә кешенең ауыр хәлен аңлап, сабырлыҡ күрһәтергә тырыштым да инде...

Тағы бер шундай сетерекле хәл. Күлдә генә түгел, хатта бассейнда ла бер ҡыҙ бала батып үлгән ваҡиға хәтеремдә. Шул уҡ беҙҙең гарнизонда. Быға мин шаһит булманым, әммә баланы ерләгәндә ата-әсәһенең ҡайғыһын уртаҡлашыуҙа ҡатнаштым. Һыуҙың тап-таҙа, үтә күренмәле булыуына ла ҡарамаҫтан, ете-һигеҙ йәшлек ҡыҙҙың һыу төбөнә киткәнен был юлы ла абайламай ҡалғандар. Әлеге әйтмешләй, сумып йөрөймө ул, батып барамы, күп балалар араһында иғтибар итмәгәндәрҙер, күрәһең. Унда беҙҙең госпиталдең хирургия бүлеге мөдире подполковник Болтыков Владимир Анатольевич та һыу инеп йөрөгән булған. Һыу аҫты күҙлеге кейеп, бассейн трассаһы буйлап, ундабында тиҙлеккә йөҙөп йөрөгән был табип әлеге ҡыҙҙың һыу төбөндә хәрәкәтһеҙ ятҡанын шәйләп алған. Сумып, уны һөйрәп алып сыҡҡан. Был ҡыҙҙың да йөрәге туҡтаған булған. Күпме ятҡаны билдәһеҙ, әммә, массаж яһап, ауыҙына өрөп тын алдыра башлағас, ҡыҙҙың йөрәге эшләп киткән, үҙаллы тын да ала башлаған. Тик, әлеге әйтмешләй, баш мейеһе "үлеп" өлгөргән булған. Госпиталгә алып килгәс, яһалма тын алдырыусы аппарат ярҙамында өс-дүрт көн ятҡандан һуң, баланың йөрәге ҡабаттан туҡтаған... Һуңынан докторҙың прокуратураға саҡыртылып, аңлатмалар яҙып, көйөп йөрөгәне хәтеремдә. Был осраҡта баланың ата-әсәһе, бассейнда "терелтелгән" ҡыҙҙары госпиталдә дөрөҫ дауаламау сәбәпле үлгән, тип ялыу яҙғандар. Бер ниндәй ҙә ғәйепһеҙ әлеге табип барыбер үҙенең "дөйә түгеллеген" иҫбатларға мәжбүр булған...

Һүҙ аҙағында. Был табиптар ҡалай булдыҡһыҙ, ике кешенең ғүмерен ҡотҡарып ала алмаған, тип, әлеге ата-әсә һымағыраҡ фекер йөрөтөүселәр ҙә табылыуы ихтимал. Моғайын, уҡыусыларым мине дөрөҫ аңлағандыр тип ышанам. Бөгөнгө һүҙемдең маҡсаты - тап ана шул ҡайғылы осраҡтарҙы миҫал итеп килтереп, ата-әсәне һәм балаларҙы иҫкәртеү булды. Әлбиттә, һыуға батыусыны ҡотҡарған осраҡтар ҙа күп кенә, әммә бөгөн һүҙем улар хаҡында түгел. Әле интернет селтәрен ҡарап, уҡый башлаһаң, сәстәрең үрә торорлоҡ бит! Быйыл йәй генә Башҡортостанда әллә нисә тиҫтә кеше һыуға батып үлгән. Улар араһында балалар ҙа бар. Балаларығыҙҙы ҡарауһыҙ һыу буйына ебәрмәгеҙ, тип әйтеүем.

Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,
отставкалағы хәрби табип.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

30

Ғаиләм-ҡәлғәм

24-30 ИЮЛЬ (майай)
2026 йыл
№29 (1224)

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

ИР-ЕГЕТ ҮСЕКСӘНГӘ ӘЙЛӘНДЕ

Беҙ үпкәләүҙең бала йәки ҡатын-ҡыҙға ғына хас хис-тойғо булыуына күнеккәнбеҙ. Әммә һуңғы йылдарҙа ир-егеттең һүҙгә, шаяртыуға, иҫкәрмәләргә йәки уларҙың фекере менән һинеке тап килмәгән күренештәргә кире реакцияһы көсәйҙе. Йәғни, улар ҙа үсексәнгә әйләнде.

Бөгөнгө йәмғиәт көслөрәк булырға саҡырған дәүерҙә улар, киреһенсә, йомшаҡайға, наҙлыҡайға әүерелә түгелме? Миҫалға бер ағайҙы килтермәксебеҙ. Күптән түгел редакцияға килгәйне. Гәзиткә яҙылырға килгәндер тип ҡыуанғайныҡ, киреһенсә булып сыҡты. Үҙенең үсегеүен әйтергә ингән икән. "Гәзитегеҙгә яҙылмайым, мин яратмаған кеше тураһында мәҡәлә баҫҡанһығыҙ", - тине ул. Бынағайыш... Психологияла "урта йәш, оло йәш кризисы" тигән термин бар. Ысынлап та, көрсөккә килеп терәлгәнме был аҡһаҡал? Көнләшәме тиһәң, инде хәҙер көнләшеп, көнәркәләшеп, ярышып, уҙышып йәшәр йәштән уҙған.

Ошо ваҡиға уйға һалды. Ысынлап та, беҙ, ҡатын-ҡыҙ, көслө зат тип күрергә теләгән кешеләр бер көндө килеп ниңә көсһөҙлөк күрһәтә икән? Әллә "һаҡлаусы кейемен", йәғни ирлеген, көрлөгөн, физик көсөн юғалтыу уларҙың холҡона шулай тәьҫир итәме? Мәҫәлән, ҡасандыр был ағай үҙен бөтә проблемаларҙы хәл итеүсе итеп таныҡҡан. Башҡалар менән етәкселек иткән. Аҡыл кәрәк булған ерҙә - аҡыл, көс кәрәк булғанда - көс, тауыш кәрәк булғанда тауыш ҡулланған. Ә хәҙер мөҙҙәтле ялда, кәре лә, көсө лә ҡарттарса. Ғаиләһендә лә күптән "баш булыу" статусынан мәхрүм. Ошо күренештәргә протест белдереүе генә булмаһа әлеге уның үсегеүе.

Элегерәк өҫтәлгә һуғып булһа ла үҙенең хаҡлығын, өҫтөнлөгөн өҫкә сығарһа, бөгөн бының өсөн штраф сәпәүҙәре йәки социаль селтәрҙә тәнҡиткә эләгеү хәүефе үсегеү тойғоһона әйләнгәнме икән ирҙәрҙең? Һуғыша, һүгенә алмағас, әрләй алмағас, агрессияһын сығара алмай, күңел түрендә үпкә булып оялайҙыр, моғайын. Үсегеү - баҫтырылған, бикләнгән асыу бит ул.

Бында тәрбиәнең дә роле барҙыр. Малайҙар һәм ҡыҙҙар бергә уҡығас, айырым тәрбиә биреп булмай. Ата-әсә лә еңелергә, тәнҡит ҡабул итергә һәм сиктәрҙе һаҡларға өйрәтмәй. Һөҙөмтәлә өлкәнәйгәс тә ир-егет үҙен көсһөҙ тип күрһәткән кешеләрҙе кисерә алмай һәм уға ҡарата үпкә тойғоһо барлыҡҡа килә. Һәр уңышһыҙлығын һәләкәт тип ҡабул итә һәм ғәйеплеләрҙе эҙләй, сөнки уның психикаһы еңеп сығыу өсөн күнекмәгән, тип кенә аҡламаһаҡ уларҙы.

Ә, бәлки, ирҙәр үпкәләмәйҙер, тик беҙ, ҡатын-ҡыҙ, уларҙың үсегә белеүен яңы ғына күргәнбеҙҙер, тип тә уйлап ҡуяһың.

Шулай ҙа, үрҙә әйтеп китеүебеҙсә, бөгөн дә йәмғиәт элекке кеүек ир-егеттең көслө, әммә агрессив түгел, һиҙгер, әммә ваҡсыл түгел, уңышлы, әммә тыйнаҡ булыуын теләй.

Лена АБДРАХМАНОВА.

УЙЛЫҒА - УЙ

ӘСӘ ҺӨТӨ МЕНӘН ИНМӘҺӘ...

"Әсә һөтө менән инмәгән, кәзә һөтө менән инмәй" ти башҡорт халыҡ мәҡәле. Бында һүҙ кешегә әсә һөтө менән генә тапшырыла торған ҡиммәттәр һәм төшөнсәләр хаҡында бара. Урынлы һорау тыуа: сит әсәнең күкрәк һөтө менән балаға уның да күркәм сифаттары күсәме икән? Был һорауға яуап бирер өсөн бер фәһемле ваҡиғаның юҫығына күҙ йүгертәйек.

Бер ҡалала етем генә малай йәшәгән. Аслы-туҡлы көн итеүенә ҡарамаҫтан, уның уҡырға, белем алырға ынтылышы көслө булған. Хатта уҡыу өсөн түләргә аҡса эшләү маҡсатында ваҡ-төйәк әйберҙәр һатып, өйҙән-өйгә ҡырҡтартмасы булып йөрөгән. Шулай сираттағы сауҙа эшендә йөрөгәндә ул үҙенең ныҡ ҡына асығыуын тойған. Малай, хәле бөтә башлағас, бер йорттоң тупһаһына килеп йығылған. Шунда ятып, бер аҙ хәл алғас, йорттоң ишеген туҡылдатып, ярҙам һорарға, саҡ ҡына, үлмәҫлек кенә булһа ла тәғәмләнергә уйлаған. Ишекте мөләйем йөҙлө бер ҡатын асҡан һәм, малайҙың хәле мөшкөл икәнлеген аңлап, уға бер стакан һөт эсергән.

- Кеҫәмдә бер тин генә аҡсам бар, һеҙгә һөт өсөн күпме түләргә һуң? - тип һораған һөттө бер тынала күтәреп эсеп, һөйләшерлек хәлгә килгән малай ҡыуанып.

- Бер тин дә кәрәкмәй, мин бит был һөттө һиңә хәлең әҙ генә булһа ла еңеләйһен өсөн ысын күңелдән эсерҙем. Башҡа ризығым да юҡ, - тигән ҡатын.

Атҡа атланғандай ҡыуанған малай ҡатынға ысын күңелдән рәхмәт әйтеп, изге кешене юлына сығарған өсөн Хоҙайға рәхмәт әйтеп, доғалар бағышлап китеп барған. Был ваҡиға малайға шундай рухи һәм физик көс биргән. Ул донъяла изге кешеләр барлығына ҡыуанып, тағы ла тырышыбыраҡ уҡып, мәктәпте яҡшы тамамлап, тағы ла шундай уҡ тырышлыҡ менән медицина институтында белем алып, доктор булып киткән.

Йылдар үткән. Малай күптән инде урта йәштәрҙәге кешегә әүерелеп, бәхетле ғаилә ҡороп, һөнәре буйынса абруйлы дәрәжәләр яулап, ҙур ҡала дауаханаһында эшләп йөрөгәнендә уның клиникаһына сит ҡаланан ауыр хәлдәге ҡатынды килтерәләр. Доктор пациентының документтарындағы адреста үҙенең тыуған ҡалаһы атамаһын уҡыған. Шунан ул ауырыуҙың хәле менән яҡындан танышыу маҡсатында палатаға ингән һәм ҡасандыр үҙен ҡотҡарыусы теге ҡатынды таныған. Ҡатындың хәле, ысынлап та, үҙе көткәндән дә аянысыраҡ булған. Әммә доктор үҙенең бар тәжрибәһен һәм иғтибарын шул ҡатынды аяҡҡа баҫтырыуға һалған. Ситтән тәжрибәле табиптар саҡырып, консилиумдар үткәреп, ҡатынды һауыҡтырыуҙың һөҙөмтәле юлдарын, ысулдарын эҙләгән. Уның тырышлығы бушҡа китмәгән. Сир сигенгән. Ҡатын аяҡҡа баҫҡан. Тик доктор ҡатынға үҙенең кемлеген әйтмәгән. Ҡатын тулыһынса һауығып, өйөнә ҡайтып китер алдынан клиниканың бухгалтеры докторҙың кабинетына ауырыуҙы хеҙмәтләндереү өсөн түләнергә тейешле квитанцияны тотоп ингән. Доктор квитанцияға ҡултамғаһын ҡуя һәм ниндәйҙер һүҙҙәр өҫтәп яҙа...

Ҡатын үҙен ҡотҡарыусы докторға һәм башҡа клиника хеҙмәткәрҙәренә рәхмәттәр әйтеп, улар менән хушлашҡандан һуң, өр-яңынан тыуғандай, ҡыуанып-шатланып вокзалға йүгергән. Уның яңы тормош башлауынан тыуған шатлығы шул тиклем көслө булғандыр, ул фәҡәт үҙе йәшәгән ҡалаға ҡайтып етеп, фатирына ингәс кенә квитанцияны иҫенә төшөргән. ***Ҡатын ҡағыҙҙы асып ҡараған һәм ундағы яҙылған һүҙҙәрҙе уҡып, ҡолап китә яҙған: "Ауырыуға күрһәтелгән хеҙмәт бер стакан һөт менән тулыһынса түләнде", - тип яҙылған булған унда.*** Ҡатындың шатлыҡ йәштәре йылға булып аҡҡан. Сөнки квитанцияны асып ҡарар алдынан уны икенсе бер борсолоу ҙа солғап алған булған. Уның яҡынса иҫәпләүҙәре буйынса ҡатынға бөтөн ҡалған ғүмере буйына пенсияһынан өҙөп-йолҡоп доктор күрһәткән хеҙмәт өсөн түләргә тура килер ине. Икенсенән, ҡатын бынан күп йылдар элек бер етем малайға ярҙам итеп ебәреүен иҫенә төшөргән һәм шунда уҡ Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт һүҙҙәрен яуҙырырға тотонған. Иң мөһиме, ҡасандыр йорт ишеген ҡаҡҡан арыҡ малайға ҡатын үҙенең күкрәк һөтөн эсергән икән...

Бында, әлбиттә, барыһынан бигерәк күкрәк һөтөнөң ниндәй илаһи ҡөҙрәткә эйә булыуы хаҡында һүҙ алып барырға мөмкин булыр ине. Ғалимдар донъяға тыуып, тәне, килбәте, булмышы формалашыуҙа сабыйға күкрәк һөтөнөң ни тиклем кәрәк һәм мөһим булыуы хаҡында ҡалын-ҡалын китаптар ижад иткән. "Күкрәк һөтө имеп үҫкән баланың иммунитеты ныҡ була, ул бер ниндәй ҙә ауырыуҙарға бирешмәй. Күкрәк һөтө сабыйҙы бигерәк тә инфекцияларҙан, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарынан, шәкәр диабетынан һаҡлай. Ундай бала һау-сәләмәт була, күкрәк һөтөндә кальций, лактоз, таурин, липид, иммуноглобулин, лактоферрин кеүек башҡа бик күп элементтар, ферменттар һәм витаминдар күп булғанлыҡтан, күкрәк һөтө үҙе генә лә тотош медицина пакетын алмаштыра ала... " тигәнде генә әйтеп китеү ҙә күпкә ишара.

Ҡыҫҡаһы, күкрәк һөтөнөң әһәмиәте бәхәсһеҙ, был - аксиома. Шуға күрә мин бында медицинаны саҡ ҡына ситкәрәк ҡуйып, әсә һөтө төшөнсәһенең икенсе бер аспекты хаҡында һүҙ алып барыуҙы урынлы һанар инем. Ул, әлбиттә, тәрбиә нигеҙе булған ғаиләнең, әсәй наҙының, атай хәстәрлегенең рухи аспекты. Миңә ҡалһа, әйтемдәге төп фекер һәлмәклеге тап ошо рухи тәрбиәгә ҡайтып ҡала ла инде.

Бер генә миҫал. Һуңғы йылдарҙа - ул элегерәк тә шулай ине - ата-әсәләрҙең ҡайҙалыр хеҙмәт итеүен сәбәп итеп килтереп, иң төп тәрбиә бурысын мәктәпкә һәм мәктәпкәсә учреждениеларға ҡайтарып ҡалдырабыҙ. Әммә тормош һәм ваҡыт бының киреһен дә раҫлай килә. ***Ни өсөн тигәндә, әгәр ҙә балаға тәрбиә нигеҙе тыуғанға тиклем һәм тыуғастуҡ ғаиләлә һалынмаһа, булмаған нигеҙгә мәктәп нимә ултырта ала тиһегеҙ?*** Ярай, әйтәйек, алдынғы ҡарашлы уҡытыусы тырышып-тырмашып, бар күңелен һәм ваҡытын биреп, балаға мәктәптә ниндәйҙер белем һәм тәрбиә бирҙе, ти. Әммә был белем һәм тәрбиә ата-әсәнең интеллектуаль һәм рухи кимәле менән нығытылмаһа, мәктәптә тырышып уҡып, ҙур өмөттәр менән үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫҡан бала тормошҡа әҙер булмай сығыуы ла бар бит.

Туған телгә, мәҙәниәткә, сәнғәткә мөнәсәбәт йәһәтенән дә мәсьәлә шулай уҡ тора. Был тормоштоң кешелек яратылғандан алып һаҡланып килгән тәртибе, дөрөҫөрәге, тәртипһеҙлеге: "Әсә һөтө менән инмәгән, кәзә һөтө менән инмәй..."

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.

✓ *Ата-әсә һәр буш ваҡытты балалары менән бергә үткәрергә тейеш. Бала ғаиләлә йәшәп, йолаларҙы һәм ғәҙәттәрҙе ҡабул итә, үҙләштерә, үҫтерә. Тик ул ғына балаға тулы тәрбиә бирә ала, уның рухи тормошонда ҙур роль уйнай.*

ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ

Йөрәгеңдә ил ҡотондай - һүнмәгән ут,
Ата-баба аманаты - үлмәгән рух.
Һаҡлаңыҙ оло, Уралтауҙай дәрәжәле,
Аҡ намыҫтан айырыла күрмәгән ул,
Бар халҡыңдан айырылыу белмәгән ул!

"Ҡарында ятҡан баланың - хан булаһын, биләүҙә ятҡан баланың бей булаһын кем белгән?" тигән әйтем бар халыҡта. Ҡарында йәки биләүҙә ятҡан баланың киләсәктә кем булырын белмәйә лә, үҙе уҡытҡан, үҙе тәрбиәләгән баланың киләсәктә ҡайһы йүнәлештә, ниндәй һуҡмаҡтан китерен уҡытыусы һиҙә, белә һәм күрә йөрөй. Йылы тупраҡта тамыр йәйҙереп, ҡарап, тәрбиәләп торһаң, тәҙрә төптәрендәге гөлдәр ҙә шиңмәй, һулымай, ҡышҡы сатлама һыуыҡтарға ҡарамай, йәшел килеш һаҡлана. Белем биреү һәм үҫтереү - мәктәптең төп бурысы булһа, дөрөҫ тәрбиә биреү - һәр беребеҙгә ҡағылған эш.

Ата-әсәң кем?

Балаларҙа иң изге сифаттар тәрбиәләүҙе ата-әсәләрһеҙ күҙ алдына килтереп тә булмай. Шуның өсөн уҡытыусыларға ата-әсәләр менән тығыҙ бәйләнештә эшләү шарт. Күпме ғаилә бар - шул тиклем яҙмыш. Улар бер-береһенә оҡшамаған. Шулай ҙа һәр бер ғаилә өсөн төп шарттарҙы халыҡ билдәләгән: халыҡ аҡылына ҡолаҡ һалған кеше үҙ тормошонда ҙур хаталарға юл ҡуймай.

Ә хәҙер барығыҙ ҙа йәш саҡтарығыҙға кире ҡайтығыҙ һәм үҙегеҙҙең әле яңы ғына атай, әсәй булған мәлегеҙҙе күҙ алдына килтерегеҙ. Кемдәр инде был яуаплы ла, бәхетле лә мәлдәрҙе әлегә кисереп өлгөрмәгән, туғандарығыҙҙың сабый сағын иҫләгеҙ.

Сәңгелдәктә йәш әсәнең тәжрибәһеҙ ҡулдары менән йүргәккә төрөлгән сабый ята. Тәүге ауаҙын ишеттереп, тағы ла бер тынғыһыҙ йән эйәһе донъяға килгән. Ғаләм буйлап уны тормош менән тоташтырыусы, йәшәтеүсе тылсымлы нур һуҙылған. Ул нур сабыйға бәхет, матур тормош вәғәҙә иткәндәй, сағыу йондоҙға әүерелгән. Ошо нурҙың сағылышын һаҡлау, баланы бәхетле, тәүфиҡлы итеп үҫтереү өсөн ата-әсәнән дә, уҡытыусынан да ҙур көс талап ителә. Ә тәүфиҡлы булыу - кешегә иң кәрәкле сифат. Тәүфиҡлы кешенең йөҙөнән нур балҡып тора. Тәрбиә эшендә атабабалар тәжрибәһенә - халыҡ педагогикаһына мөрәжәғәт итмәйенсә, ниндәйҙер һөҙөмтәләргә ирешеп булалыр, тип күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел.

"Исемеңде ташҡа яҙма, ил йөрәгенә яҙ!" тигән аҡыллы ҡарттар. Ил йөрәге беҙҙең балаларҙан башлана ла инде. Әйтер һүҙебеҙҙе үҙ балаларыбыҙҙан, үҙебеҙ тәрбиәләгән уҡыусыларҙан башлаһаҡ, башҡалар һүҙ аҡылы ғына түгел, эш аҡылы ла алыр. Шуның өсөн, теге йәки был баланы артабан шәхес итеп үҫтерер алдынан уның ниндәй мөхиттә, кем ҡулында, ниндәйерәк шарттарҙа тәрбиәләнеүен дә күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк.

Һәр кемдең изге уй-теләктәре ғаиләһе менән бәйле. Ғаиләлә ата-әсәнең йөрәк йылыһын тойоп, олатай-өләсәйҙәренең аҡылын зиһененә һеңдереп үҫкән кеше йәмғиәттә үҙ урынын таба, башҡаларға ҡарата ла мәрхәмәтлерәк була. Ғаилә - бөтә нигеҙҙәрҙең нигеҙе. Беҙ барыбыҙ ҙа унда ҡанат нығытабыҙ, осорға өйрәнәбеҙ. Тыуған йорт, ғаилә йылыһы беҙҙе ғүмер буйы оҙатып йөрөй. Кешегә, бигерәк тә балаға был йылылыҡ һәр саҡ кәрәк. Ғаилә йылыһы бер-береңде яратып, хөрмәт итеп, ҙурлап, ҡайғыртып йәшәүҙә тыуа. Ғаилә бәхете - ил бәхете. Уны ир менән ҡатын тыуҙыра. Ул - уртаҡ бәхет. Ғаилә - кешенең бишеге, тыуған йорто, йәшәү мәғәнәһе, кешелектең башланғысы.

Ҡош - осор өсөн, кеше бәхет өсөн яратылған. Бәхетле булыу өсөн бик күп нәмә: тамаҡ туҡ, өҫ бөтөн, көнкүреш уңайлыҡтары, һине ярата торған кеше, йәнең теләгән эш, тыуаһы көнгә ышаныс булыу, бигерәк тә эргәңдәге кешеләрҙең һине ихтирам итеүе кәрәк. Мөһәбәт буй-һын, матур төҫ-баш, ныҡлы сәләмәтлек, зирәк аҡыл да артыҡ түгел.

Ата-әсә һөйөүе, саф дуҫлыҡ, ягымлылыҡ, асыҡлыҡ, дөрөҫлөк, ҡыйыулыҡ һәм күңел байлығы уратмаһында үҫкән бала нисек итеп үҙен бәхетһеҙ тойһон, ти!

Ата-әсә һәр буш ваҡытты балалары менән бергә үткәрергә тейеш. Бала ғаиләлә йәшәп, иң яҡшы традицияларҙы, йолаларҙы һәм ғәҙәттәрҙе ҡабул итә, үҙләштерә, үҫтерә. Тик ул ғына балаға тулы тәрбиә бирә ала, уның рухи тормошонда ҙур роль уйнай. Ғаилә бала шәхесен формалаштырыуҙа иң мөһим көс булып сығыш яһай. Әгәр ғаилә балаға вайымһыҙ ҡарай икән, бер ниндәй мәктәп тә, тәрбиәсе лә был бушлыҡты тултыра алмай. Шуға күрә ғаилә мәктәп менән тығыҙ бәйләнештә, бер маҡсатта эш алып барырға бурыслы. Минең балам эш боҙмаҫ, ул ундай түгел, тип ҡул ҡаушырып, тынысланып ултырырға ярамай. Өйөндә тыныс бала мәктәптә бөтөнләй киреһенсә булырға ла мөмкин. Бала яҡшыны - ямандан, һәйбәтте насарҙан айыра белеп үҫергә тейеш.

Баланың һәр ҡылған ҡылығы иғтибарҙан ситтә ҡалмаһын!

Мәктәп ғаилә менән бергә яңы быуынды тыуҙыра, тәрбиәләй, ҡурсалай, әҙәм итә.

Ауырлыҡтарға ҡарамай, халҡыбыҙ, телебеҙ, рухыбыҙ, башҡортлоғобоҙ бөгөн бар икән, быныҡ өсөн беҙ тик башҡорт ғаиләһенә, ғаилә нығлығы булған атай кешегә, ғаилә тотҡаһы булған башҡорт әсәһенә бурыслыбыҙ.

Йорт һалғанда ағастың үҙәге серек түгелен һайлайҙар, арбаға күсәрҙе имәндән эшләйҙәр, көбән өйгәндә үҙәген нығыта баралар. Кешенең дә үҙәге, рухы ныҡлы булырға тейеш. Бала рухи яҡтан ныҡ, сәләмәт булып үҫһен. Рухһыҙ бала халҡын көсһөҙләндерә. Рухи яҡтан тарҡала барыуыбыҙ нәфсе юлына, ҡан ҡойошҡа этәрә. Рухы һыңған халыҡ һаңғыраулана, һуҡырая. Зәғифтәр батшалығына әйләнә барыуыбыҙҙы үҙебеҙ ҙә һиҙмәйбеҙ.

Шәйләр инек - күҙебеҙҙе ялтырйолтор сағылдыра, ишетер инек - бокал сыңдарынан ҡолаҡ тонған.

Һәр халыҡтың үҙ яҙмышы, шул яҙмыштың иң мөһим ваҡиғаларын теркәп барған үҙ тарихы бар. Халыҡ данлы үткәнен, быуаттар буйына йыйылған рухи хазинаһын үҙ күңелендә туплап килгән. Шул рухи байлыҡты барлай башлаһаң - алмас таш кеүек ялтырап торған оло хазина - халыҡ педагогикаһы иғтибарҙы йәлеп итә. Халыҡ тәрбиәһе илаһи көскә эйә.

Халыҡ педагогикаһында ата-әсәләрҙең балаларға рухи ҡиммәттәрҙе тапшырыуының тиҫтәләгән юлдары бар: баланы әсә ҡарынында уҡ тәрбиәләй башлау менән бер рәттән, бишек йырҙары, баланың исеме, халыҡ ижады ынйылары, ғаилә намыҫы төшөнсәһе, туғанлыҡ тойғолары, ата-әсәнең роле, дуҫтарҙың, урамдың йоғонтоһо, милли колорит һәм башҡа ҡиммәттәргә ҡайтып ҡала.

Бала тәрбиәләү - ғаилә ҡороу кеүек үк, үтә ҡатмарлы һәм үҙенсәлекле хеҙмәт. Тәрбиә эшендә, ата менән әсәнән тыш, бик күп башҡа факторҙар йоғонто яһай: туғандар, мөхит, йәмғиәт, дуҫтар, китап, кино, телевидение, мәктәп, урам, баланың ҡанына һеңгән холҡо, зауыҡы, хыялындағы "мине", һәм, хәҙер килеп, телефондар, планшеттар...

Тәрбиә - ҡарында уҡ

Халҡымда "Күлдең йәме - ҡама менән, өйҙөң йәме - бала менән", "Бала шатлығы - тотош туғанырыу шатлығы" тигән мәҡәлдәр бар. Ошондай изге теләктәр менән көтөп алынғандар баланы. Бала ҡарында уҡ быны һиҙә, үҙенең бәхет булып тыуырын тойоп шатлана. Көтөп алынған һәм ошо рухта тәрбиәләнгән бала тормошта үҙен ышанысла тоя. Тимәк, бала тәрбиәһе ул тыуғанға тиклем башлана. Ә бала тыуҙыраһы әсәне нисек кенә ҡурсаламағандар, һаҡламағандар. "Йөклө ҡатын - фәрештә. Уны һис рәнйетергә ярамай. Рәнйетһәң, түбәнә ҡарғыш төшә, рәнйеү баҫа", - тигәндәр. Йәш балалы ҡатындың да рәнйеүе оҙон, әлләҡайҙан етеп ала. Йөклө ҡатындың ире йән алмаҫҡа: мал һуймаҫҡа, һунарҙа кейек алмаҫҡа, ағас йыҡмаҫҡа тейеш, тип иҫәпләгәндәр. Былар барыһы ла һаусәләмәт, бәхетле бала тыуыуға һис шикһеҙ булышлыҡ иткән.

Балаға исем ҡушыу

Исем ниндәй булырға тейеш? Исем ҡушҡанда борон бик ныҡ иғтибарлы булғандар. Исем шатлыҡ, бәхет килтерерлек булырға тейеш, тип иҫәпләгәндәр. "Исеме есеменә тап килһен!" - тип теләк теләгәндәр. Исем ҡушҡанда уның балаға иш булырлығын, төҫ бирерлеген, үҫеп еткәс, күңеленә хуш килерлеген һайлау - ата-әсәнең оло бер хәстәрлеге һәм бурысы. Исем ғүмерлек, булмаһын әҙәм көлөрлөк, тип иҫәпләгәндәр. Кеше бөтә ғүмерен шул исем менән йәшәй. Ҡыҙ бала исемендә - йондоҙ балҡышы, сәскә нәфислеге, ир-ат исемендә ҡылыс сыңы һәм китап аҡылы сағылған. Исем ҡушҡанда баланың йә аҡыллы, йә матур, йә шәжәрәһе буйынса абруйлы, батыр кешегә оҡшауын күҙ алдына килтергәндәр.

Сәңгелдәк йырҙары

Рухи сәләмәтлек тәрбиәләүҙең иң төп шарттарының береһе - матур уй-теләктәрҙе моңға төрөп, көйләп-һамаҡлап бала күңеленә һала барыу. Әсәйҙәребеҙ шул маҡсаттан сығып бик күп һамаҡлаузар - сәңгелдәк йырҙары ижад иткән. Әсә йыры - донъялағы иң бөйөк, иң саф йыр ул. Ҡалған бөтә йырҙар ҙа шунан башлана. Сәңгелдәк йыры булмаһа, башҡа йырҙар ҙа булмаҫ та, тыумаҫ та ине. Ә ниндәй матур теләктәр һамаҡлағандар. Күңеленә туған моң һалынған баланы тәрбиәләү күпкә еңелерәк. Көйгә һалынған теләк баланың аңына һеңеп ҡала. Талғын ғына көйгә һалынып, наҙлы ғына һүҙҙәрҙән торған сәңгелдәк йыры ниндәй ҙур әһәмиәткә, тылсым көсөнә эйә булған! Халыҡ һүҙҙәрҙең тәьҫирен генә түгел, уның ҡасан нисек әйтелер рәтен дә, самаһын да белгән. Әсә туған телдә балаһына тик бәхетле, изгелекле, яҡшы кеше булып үҫеүе тураһында ғына һөйләй һәм көйләй. Был йыр халыҡҡа, Тыуған илгә, телгә һөйөү йыры булып һәр беребеҙҙең күңелендә ғүмер буйы һаҡланһын ине. "Ағасты йәштән бөк!" - ти башҡорт халыҡ мәҡәле. Тыуған илгә, телгә һөйөү, хөрмәт бәләкәйҙән башлана.

Милли кейемдәргә ҡараш

Халҡыбыҙҙың милли кейеменә иғтибар итһәк, улар араһында тәндә ҡыҫып, ҡымтып торғаны юк. Иркен кейем - һаулыҡ сығанағы, тән кейем эсендә тын алырға тейеш, ә ҡыҫып торған кейем ирҙәрҙе лә, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла түлһеҙлеккә алып килә тигәндәр. Төҫөнә лә иғтибар иткәндәр. Ҡара, ҡыҙыл төҫлө кейемдәр һаулыҡ өсөн зарарлы. Ә зәңгәр, йәшел, һары төҫтәр үҙҙәренә ыңғай энергия туплай.

Ҡатын-ҡыҙ, әгәр ҡара төҫтәге күлдәк, костюм кейгән икән, муйын тирәһендә аҡ төҫтәге әйбер, шарф, яулыҡ, биҙәнеү әйбереме, аҡ блузкамы булырға тейеш. Күп әйбер ҡатын-ҡыҙ өсөн матурлыҡ сығанағы ғына булып тормай, ә уны күҙ тейеүҙән дә һаҡлай, тиҙәр. Мәҫәлән, ҡашмау баш кейеме ролен дә үтәй, шул уҡ ваҡытта күҙ тейеүҙән дә һаҡлай. Сәсмәүер ҙә шулай.

Йолаларға бәйле

Иғтибар биреберәк ҡараһаң, күп йолалар сәләмәтлекте нығытыуға, тән гигиенаһына ҡайтып ҡала. Ата-бабаларыбыҙ таҙалыҡ нигеҙендә ныҡлы нәҫел тәрбиәләү хәстәрен күргән. Мәҫәлән, ҡулды йыумайынса, йәш баланы ҡулға алмау, өҫтәл янына килмәү, оҙон тырнаҡтар йөрөтмәү, тәһәрәт алыу, ҡомған тотоу, эсмәү-тартмау, үбешмәү.

1985 йылда Литвала һуғыш ветерандары осраша: ҡосаҡлашалар, үбешәләр. Бер литва ҡатыны:

- Күҙәтеп торам-торам да, һорайым әле. Һеҙ ниңә бер ҙә үбешмәйһегеҙ? - ти Башҡортостандан барған ветеранға.

- Беҙҙең йола ҡушмай. Беҙ бөтә күңел йылыһын, ихласлыҡты күрешеп, ҡул биреп белдерәбеҙ. Үбешеү - гигиенаһыҙлыҡ, - ти башҡорт кешеһе.

- Ә бит дөрөҫ. Ниндәй таҙа халыҡ. Бына шәп йола, - тип хайран ҡала баяғы ҡатын.

Бына изге көн - йома көндө алайыҡ. Һәр мосолман шул көндө 5 изгелек ҡылырға тейеш. Өлгөрмәһә, аҙнаға ҡала. Йоланы һәр төрлө боҙоу ҙур борсолоу

✓ Иҫерек атай, өйгә ҡайтып, юҡ-барға бәйләнә, бер кемгә лә йән тыныслығы бирмәй. Кейергә кейем, ашарға ризыҡ булмаған ҡотһоҙ өйҙәрҙәге балалар, атайҙың әҙәпһеҙлеген күреп, нисек үҫен бәхетле итеп хис итә алһын инде.

менән һәр яҡлап тикшерелгән. Намыҫһыҙ эш ҡылған кеше менән иҫәнләшмәҫ һәм аралашмаҫ булғандар."Намыҫың ҡушҡанса эшлә, йәки намыҫһыҙлығыңды күрһәттең", - тип әйтер булғандар. Кешенең икенсе кеше бәҫен ихтирам итеүенә нигеҙләнгән әхлаҡи тәртибе тураһында төшөнсә формалаштырылған. Балаларҙа кесе йәштән үк үҙ бәҫе, оят һәм выждан тойғолары тәрбиәләп, әҙәпле тота алыуға өлгәшкәндәр.

Тимәк, йолалар - милләттең меңдәрсә йыллыҡ күҙәтеүҙәре яткан күңел хазинаһы. Кисен йоҡлап китер алдынан һәр кем: бала кешеме, өлкәнме, яҡшылыҡ, яманлыҡ ҡылғанын барларға өйрәнһен ине.

Ғаиләлә әсәнең роле

Әсә - бөйөк шәхес, ә ҡатын-ҡыҙ - гаилә тотҡаһы. Һәм ул бары тик үҙ ғаиләһендә генә бәхетле. Матур-матур балалар үҫтереп, йылы ғаилә усағы ҡабыҙып йәшәүгә ни етә. Һәр ғаилә әсәйҙән башлана. Бөтә уңайлыҡтар ҙа, изгелектәр ҙә әсә һөтөнән. Әсә ергә яңы тормош алып килә, кешелек утын һүндермәй тота, бывара, уҡытыусыларҙың да күпселеге - ҡатын-ҡыҙ.

Ир баланы тормошҡа, өй эштәренә өйрәтеүҙә атайҙың үрнәге ҙур роль уйнай. Бала ниндәй генә эште эшләүенә ҡарамаҫтан, атайҙың ярҙамын, теләктәшлеген тойһон, сөнки атайҙан күргән үк юныр...

Бөгөн беҙ бала тип ҡараған малай һәм ҡыҙҙар киләсәктә үҙҙәре ата-әсә була торған кешеләр. Атай үҙен дә, ғаилә намыҫын да яҡлай. Ысын атай эш урынында - тир түгеп эшләүсе, өйҙә - балаһын ҡосаҡлап һөйөүсе, ҡатынына - ягымлы, ата-әсәһенә иғтибарлы ҡарашлы, өйгә араҡы, хәсрәт түгел, шатлыҡ алып ҡайтыусы, һөйөү һәм хәстәрлек күрһәтеүсе булырға тейеш.

Бала атаһы менән ғорурланһын, саф дуҫлыҡ, ягымлылыҡ, асыҡлыҡ, дөрөҫлөк, ҡыйыулыҡ, күңел байлығы уратмаһында үҫһен. Эскелектән йыраҡ торһон атай булған кеше. Борон бит ҡымыҙ ғына эскәндәр. Ир кеше хатта туйҙа ла иҫерәп, абруйын юғалтыуҙан, бөтә кеше теленә эләгеүҙән ҡурҡҡан. Иҫерек атай, өйгә ҡайтып, ғауға ҡуптара, юҡ-барға бәйләнә, бер кемгә лә йән кәндәр. Һәр осраған малайҙан кәрәк кешене саҡырыуын, берәй әйберҙе илтеп биреүен, атынды бәйләүен, алып килеүен һорарға мөмкин булған. Уларҙың береһе лә өлкән кеше йомошон үтәмәүҙе башына ла килтермәгән. Балалар ололар йыйылған ерҙә уйнарға, шауларға ярамағанлығын белгәндәр. Улар эргәһендә тәмәке тартырға, рөхсәтһеҙ һөйләшергә ярамаған. Уларҙың һөйләгәнен кире ҡаҡмай һәм булдермәй тыңларға кәрәк булған. Ололар урыны табын түрендә булған, улар менән кәңәшләшкәндәр.

Шулай итеп, бала ололар һүҙенә ҡолаҡ һалырға, рухи тамырҙарын юллай белергә, уйлана, эҙләнә, милли аңын үҫтерә, ырыуҙарының символдарын, халыҡтың тарихын өйрәнергә, шәжәрәһен төҙөй белергә тейеш.

Шәжәрә

Элек-электән ырыу, нәҫеләнде белеү - әхлаҡи йөкләмә билдәләү, тигән мотив йәшәй. Әле лә ҡарттар: "Эй, бабаңды белмәгәс, донъяны ҡайҙан белерһең һуң?", йәки "Был әҙәм төпһөҙ, арҡаһыҙ атын-затын, шәжәрәһен белмәй", - тип ҡуялар.

сәп, бер ҡат киҫер булған. Бәхетләләр 7 йәннәт ишеген асып ингән. Мөхәббәтләләр төнөнә 7 уянған. Шанлыларҙың даны 7 илгә еткән. Еңелгәнде 7-гә бөкләп һалғандар. Кешелә 7 һиҙемләү һәләте бар.

7 быуын ата-бабаңы белеү фарыз һаналған тинек. Ни өсөн? Гендар сафлығы мөһим мәсьәлә булған. Яҡын ҡан-ҡәрҙәштәр араһында никах ҡәтғи тыйылған, сөнки ҡәрҙәштәр араһындағы никахтан ауырыу, зәғиф балалар тыуғанын белгәндәр. Уландарына кәләш һайлағанда ла ололар яҡын-тирәнән килен алмаған. Ҡан яңыртырға тырышҡандар. Был да - гендар сафлығына килтереүсе иңғай күренеш.

Туғанлыҡ терминдары

Ағастың тамыры ерҙә, кешенең тамыры туған-ырыуҙа. Ата-әсәгә изгелек ҡылыу агастың тамыры булһа, туғандар менән аралашыу ағастың ботағы була. Ата-әсәһенә изгелек итмәгән кеше агасты тамырынан серетер, туғаны менән араһын өҙгәне - уны ботағынан һындырыр. Ул ағастың япрағы ла, емеше лә булмаҫ, тиелә хәҙистәрҙә.

БАЛА МЕНӘН

уындарҙы быуындарға тоташтыра.

Ҡатын-ҡыҙға тәбиғәт тарафынан иҫ киткес яуаплы бурыс йөкмәтелгән. Ул нәҫелде дауам иттереүсе. Бер ғаилә булып ҡушылған ике яҡтың да иң изге сифаттарын туплаған балалар тыуҙырыу, тәрбиәләп үҫтереү кеүек ҙур эш башҡара.

Баланың аллаһы булған ҡайһы бер әсәләрҙең бөгөнгө көндә үҙ йөҙөн юғалтыуы, эскелеккә һалышыуы аяныслы. Эскән ҡатын-ҡыҙҙы бисура, шайтан менән сағыштыралар. Ғаиләлә атай әсәһе бер бәлә, әсәй эсһә - мең бәлә. Эскән ҡатындың донъяһы ҡотһоҙ була, йортонан бәрәкәт ҡаса. "Йөшел йылан"ға әүрәп, иң мөҡәддәс бурысын - балалар бағыуҙы, донъя көтөүҙе онотҡан меңге иҫерек әсәйҙәр асыуҙы ҡабарта, нәфрәт уята. Сөнки былай ҙа самалы ҡалған рухи ҡиммәттәрҙең юғала барыуына иҫерек әсәй ифрат та ғәйепле. Әхлаҡ тарҡалыуҙа, имانһыҙлыҡ, енәйәтселек артыуҙа нәҡ эскесе әсәләрҙең өлөшө тосораҡ. Иҫерек әсәй янында туңып, асығып ултырған сабыйҙар йөрәкте әрнетә. Сөнки бәхетһеҙ ғаиләлә үҫкән балалар башҡаларҙан үҙҙәрен кәм тоя. Ундай балалар бәлиғ булғас та бахырлыҡ хисенән арына алмай. Эштән ҡайтыуына ҡотһоҙ өй, һыуыҡ мейес, иҫерек бисә ҡаршылаған ир-атҡа ла Хоҙай сабырлыҡтар бирһен...

Ғаиләлә атайҙың роле

"Атаһы болан алмағандың балаһы ҡолан алмаҫ", ти халыҡ мәҡәле. Йөҙ һәйбәт уҡытыусы ла атайҙы алмаштыра алмай.

Хәҙер үҫмерҙәргә бигерәк тә ир-ат йоғонтоһо етмәй. Эргәтирәбеҙҙә атайһыҙ ғаиләләр арта тыныслығы бирмәй. Кейергә кейем, ашарға ризыҡ булмаған ҡотһоҙ өйҙәрҙәге балалар, атайҙың әҙәпһеҙлеген күреп, әсәләре менән ыҙғышҡанын ишетеп, нисек үҫен бәхетле итеп хис итә алһын инде. Нисек итеп кеше, иң аңлы йән эйәһе, үҙ балаһына, ҡансыҙ өҙөлөп һөйөп ҡауышҡан йәренә ҡайғы-хәсрәт, күңел газаптары алып килерлек эштәр эшләй ала икән?

Өләсәй, ҡартатай тәрбиәһе

Өләсәй, ҡартатай мәктәбен үткән бала һығылмалы аҡылға, һоҡланғыс тәртипкә, тәүфиҡҡа эйә. Элек-электән атай-әсәй, олатай-өләсәй, апай-ағайҙар, бер ғаилә булып, бергә йәшәгәндәр. Бала уларҙың йоғонтоһонда халыҡ йолаларын үҙ зиһененә һеңдереп үҫкән. Йәш быуынды тәрбиәләүҙә шулай уҡ бөтә ауыл, яҡын-ара ҡатнашҡан. Өлкән быуындың абруйы ҙур роль уйнаған. Ата-әсәне, өлкәндәрҙе хөрмәтләү - төп әхлаҡ васыяттарҙың береһе булған.

Өлкәндәр алдында йәштәр үҙара мөнәсәбәттәрен асыҡларға, характер күрһәтергә баҙнат итмәгән. Өлкән быуындың яҙмышында йәштәр үҙенең киләсәген дә күргән. Кеше ата-әсәһен нисек ҡараһа, уны үҙ балалары ла шулай ҡараясағын аңлаған.

Өлкәндәрҙе "Аҡһаҡал" тип йөрөткәндәр. Ауыр хеҙмәт башҡара алмаһа ла, улар ғаиләлә терәк булып һаналған.

Башҡорттоң аралашыу ҡағиҙәләре нигеҙендә һәр ваҡыт өлкәндә ихтирам итеү принцибы ята. Ул оло кешене сәләмләүҙә, уға юл һәм урын биреүҙә генә сағылып ҡалмай. Балаларҙы өлкәндә ихтирам итергә һәм улар ҡушҡан йомошто үтәргә өйрәт-

Бәхет ҡапҡаһын үрелеп асыр өсөн иң тәүҙә бала ололар, аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр, сәсәндәр һүҙенә ҡолаҡ һалырға өйрәнһен. "Оло һүҙен тыңлаған, ҡырын ятып йырлаған, ти боронғолар. Оло һүҙен тыңламаған - оролған да бәрелгән".

Ысынлап та, ололар бушҡа әйтмәй. Шул уҡ шәжәрәне генә алайыҡ. Менәр йылдар буйына тармаҡлана килгән шәжәрә ағасыбыҙҙың быуаттар ҡатламдарындағы тамырҙары ла, күпме ел-дауылдарҙа сыныҡҡан олоно ла, ниндәй генә ҡара көстәр ҡайырырға, ботарларға тырышҡанда ла һаман өҫкә үрләүҙән туктамаған. Халҡыбыҙ рухи берҙәмлеге, йәшәүгә ихтыяр көсө менән тере ҡалған, халыҡтар араһында башҡорт милләтенең үҙ-үҙен этнос булараҡ та, ил-йорт булараҡ та яҡлау һәм раҫлау һәләте менән тере ҡалған. Башҡортмон тиғән рухлы башҡорт балаһы үҙенең ете быуын ата-бабаһын белергә тейеш. Ғөмүмән, башҡортта ете һанына бәйле бик күп нәмә бар. Әҙәмдә лә шул етелек уратып тора кеүек.

Өҫтә 7 ҡат күк, аҫта 7 ҡат ер, күктә 7 йондоҙ, ерҙә 7 мәғдән, аҙнала 7 көн, йәйғор 7 төҫлө, моңдоҡ 7 өнө, 7 мөғжизә. Ожмах 7 ҡатлы, тамуғы ла. Ҡурайҙа 7 таж. 7 ҡыҙ бейеүе. Әҙәмдә ҡотҡармаҡ булып, 7 ясин сығалар, үлгәс, 7-һен уҡылар. Етегәнгә табынғандар, Етегән шишмәне маҡтағандар. Әкиәт батырҙары 7 юл сатында 7 башлы аждаһаны еңгән, 7 төн уртаһында ен-пәрейҙәрҙе ҡыйраткан. Сер булһа, уны 7 йоҙаҡ менән бикләгәндәр, хазинаны 7 ҡат һандыҡ эсендә һаҡлағандар. 7 ятты ятҡа иҫәпләгәндәр. Иң ҡаты яза итеп 7 ҡат тиреһен тунағандар. Зирәктәр 7 ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен ишеткәндәр. Теүәлдәр 7 ҡат үл-

Кеше ғүмере бәхет менән үлсәнә тиҙәр. Ә нимә ул бәхет? Берәүҙәр уны байлыҡта, икенселәр эштәге уңышта, өсөнсөләр берәрһен һөйөүҙә, тип иҫбатлай. Бәлки, бәхет уларҙың өсөһө бергә килеүҙәлер. Ата-әсәләр менән мөнәсәбәт - ошо ағастың тамырҙары, яҡшы мөнәсәбәт - йәшәүгә яраҡлы, ныҡ тамырҙар, ҡеүәтле тамырҙар тармағы. Туғандарҙың аралашыуы - был ағастың йәш, яңы тамырҙары. Туғандар мөнәсәбәтен Мөхәммәт Бәйғәмбәр ағастың ботаҡтары һәм япраҡтары менән сағыштырған. Туғандар менән яҡшы мөнәсәбәт киләсәктең нигеҙ ташы булып тора. "Көтөүҙән айырылған ҡуйҙы бүре ашар", ти башҡорт мәҡәле. Яуыз яҙмыштың ҡорбаны булмаҫ өсөн, бер ҡасан да, ниндәй генә хәлдәр тыуһа ла, үҙ тамырыңды, ботаҡтарыңды ҡырҡмаҫҡа кәрәк. Бәхетле яҙмыш - туғандарың, яҡындарың ихтирамында, улар менән яҡшы мөнәсәбәлә булыуҙа, уларҙың кәңәшенә ҡолаҡ һала белеүҙә, кешесә йәшәүҙә.

Тарихи шәхестәр өлгөһө

Тыуған еребеҙҙең саф һауаһын һулап, теште ҡамаштырырлыҡ һалҡын һыулы, йүгерек шишмәйылғаларҙың таҙа һыуын эсеп үҫкәнгә батыр ҙа, гүзәл дә ул халыҡ. Элек-электән башҡорттоң фәһем, өлгө алырлыҡ арҙаҡлы шәхестәре булған. Салауаты, Рәмие, Вәлидиһе булған халыҡ - үлемһеҙ ул. Халҡым, тип янып йәшәгән бөйөк кешеләребеҙ, тарихи шәхестәребеҙ исемлеген әллә күпме дауам итергә булыр ине. Балаларыбыҙ яҙмышы, уларҙың киләсәге, халҡыбыҙҙың данлы үткәне, бөйөк шәхестәре хаҡында һөйләшеү алып барған-

да, беҙгә бала яҙмышы менән бергә халҡыбыҙҙың үткәнен дә, бөгөнгөһөн дә, киләсәген дә күҙ уңында тоторға кәрәк.

Урам йоғонтоһо

Үҫмер балалар ваҡыттың күп өлөшөн ғаиләнән, ата-әсә йортонан ситтә үткәрә. Лев Толстой: "Бөтә бәхетле ғаиләләр бер-береһенә оҡшаш, ә бәхетһеҙҙәре - һәр береһе үҙенсә бәхетһеҙ", - тигән. Хәҙерге заман шауҡымы ла балаға ныҡ йоғонто яһай. Бала яҡшы ғәҙәткә ҡарағанда насарҙарын тиҙерәк отоп ала. Матур ғаиләлә үҫкән бала ла енәйәт юлына баҫырға, тормоштоң ҡәҙерен белмәй, ата-әсәһен, ғаиләһен рәнйетеп, кешелектән сығырға мөмкин.

Оҙаҡ ғүмер, киләсәк...

Кешелек ғүмер буйы йәшәү һәм үлем хаҡында уйланған һәм уйлана. Кеше ғүмере йылдар иҫәбе менән түгел, ә ер йөҙөндә, кешеләр күңелендә ҡалдырған игелек, яҡшы эштәре менән үлсәнә. "Ғүмер нисек кенә йәшәһәң дә үтә лә китә", - тиҙәр. Был донъяла йәшәү мәғәнәһе, оҙаҡ ғүмер мақсаты - ул яҡшылыҡ ҡалдырыу. Оҙаҡ ғүмер тиккә генә елеп үткән ат образында һүрәтләнмәй...

Ауыл яғынан елдәй елеп алмаҫыуар бер ат үтеп китә. "Ни эшләп беҙҙе урап үтте икән был юртаҡ, ни өсөн бер йортҡа ла инмәне?" - тип аптырай икән халыҡ.

Бер егет уның артынан сабып китә. Бик оҙаҡ юғалып торғандан һуң егет кире ҡайта һәм былай ти: "Бер нимә лә һораша алманым. Күҙ асып йомғансы юҡ булды ла ҡуйҙы".

"Эй, улым, - тиҙәр ҡарттар. - Толпарҙы ата-бабаларыбыҙ ҙа ҡыуып тота алманы. Үткән ғүмергә етеп булмай ул."

Бар яҡлап уйландырырлыҡ, ҡатмарлы һәм бөйөк быуат башына килеп еттек. Мәңгелек ваҡыт бәйләнеше кешенең яҙвый ғына ғүмере һәм йөрәгә аша үтә. Ә замандың яҙмышы, киләсәк яҙмышы беҙҙең ҡулда, ҡәҙерле дуҫтар, балаларыбыҙ ҡулында, изгелек орлоғон ниндәй кимәлдә сәсеүҙә.

Нимә ул наҙ?

Наҙ балаларға һулар һауа шикелле кәрәк! Бәләкәй бала бәләккә ауыр, ҙурайғас йөрәккә ауыр, тиҙәр. Баланы күтәреп йөрөтөү үҙе бер ваҡыт ҡына. Ғүмере буйы күтәртмәй ул. Әсә-ата ҡулдарының йылыһын тойоп ҡалыуы насар түгел. Күңел йылылығының, наҙҙың әһәмиәтен кеше аҙаҡ ҡына аңлай. Шуға күрә бәләккә ауырлыҡ ваҡытлыса ғына икәнлеген иҫтә тотоп, ғүмерлеккә йөрәккә ауырлыҡ алыуҙан һаҡ булырға кәрәк. Бала ғүмере буйы әсә наҙы, атай хәстәре тойһа, байтаҡ ситкә тайпылыштарҙан үҙен һаҡлап алып ҡалыр. Үҙе лә киләсәктә балаларын наҙлап тәрбиәләп үҫтерер.

Инкубатор себештәре - тауыҡтары үҙҙәре йомортҡа баҫып себеш сығара алмай, себеш үҙе сыҡҡанда йылылыҡ бирелгән, ә наҙ юҡ. Беҙ ҙә, баланы мондан, наҙҙан мәхрүм итеп, әллә ниндәй һәләттәрен юҡҡа сығарабыҙҙыр.

(Дауамы 10-сы биттә).

✓ *Бала үҙ милләтенең рухи ҡиммәттәрен: милли аш төрҙәрен дә, музыка ҡоралдарын да, кейемен дә, батырҙарын да белеп, танып үҫһен. Халҡының күркәле бер вәкиле итеп тойһон үҙен.*

(Башы 8-9-сы һандарҙа).

ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ БАЛА МЕНӘН

Алғыш һәм ҡарғыш

Борон ата-бабалар ауыҙҙан сыҡҡан яҡшы һүҙҙең дә, яман һүҙҙең дә, ғаләм гиҙеп, йәнә әйләнеп ҡайтыуына ышанған. Ни сәсһәң, шуны урырһың, тигән. Ысынлап та, халыҡ аҡылы яңылышмаған, һүҙҙән, телдән дә көслө нәмә юҡ. Тел йыуата ла, илата ла, күлдәрҙә, көйҙәрҙә лә, хатта үлтерә лә. Кешенән ишеткән яҡшы теләктән күңелгә ял була, донъя йәмләнә, йәшәү матурлана. Бер-беребеҙгә йәмһеҙ һүҙҙәр түгел, ә матур алғыштар (теләктәр) әйтһәк, йәшәүе лә еңелерәк булыр. Алғыш әйтеү - башҡаларҙың күңелен күтәреү, изге теләк теләү ул.

Ә ҡарғау ярҙамында кешене байлығынан, тоҡомонан, вазифаһынан, хатта ғүмеренән мәхрүм итергә мөмкин, тип иҫәпләй халыҡ. Ҡарғыштың көсө уның йөкмәткеһендә генә түгел, ә тәрән тойғоларҙа, рәнйеүҙә. Башҡорттарҙа әсә кешенең, бигерәк тә атаның үҙ балаһын ҡарғауы ҙур көскә эйә, тип иҫәпләнә. Әсә кеше балаһын ҡарғаһа ла, ул атаныҡынан барыбер ҡайтышыраҡ була, сөнки бала әсәнең күкрәк һөтөн имеп үҫә. Ошо һөт әсә ҡарғышын барыбер йомшарта. Ә ата менән уның балалары араһында бындай изге нәмә юҡ. Шуға күрә лә ата ҡарғышы ныҡ һәм мул төшә тип аңлатҡан боронғолар.

Дуҫтар, һеҙгә кәңәшем: бер ҡасан да, бер ниндәй шарттарҙа ла асыуығыҙҙы, насар көйләфегеҙҙе балаға төшөрмәгеҙ. Зирәк аҡыл менән тәрбиәләргә тырышығыҙ.

Үҙ-үҙебеҙҙе тота алмай, беҙ балаға, уның эскәрһеҙ саф күңеленә күпме зыян килтерәбеҙ. Халыҡ дөрөҫ әйтә: кешене "суҫка" тип күберәк ата - тиҙән ул хорхолдай башлар.

Яҡшы теләктәр генә теләйек. Теләк теләү, доға - көслө тылсым-һүҙ тылсымына бәйле. Изге теләк күңелде, зиһенде таҙарта.

Тыйыу, ҡурҡытыу

Донъяның ғүмере бик ҡыҫҡа, шул ҡыҫҡа ғүмерҙә матур итеп йәшәргә, ваҡытты бушҡа үткәрмәҫкә, һөнәргә, эшкә өйрәтергә кәрәк баланы. Бала өлкәндәр тарафынан тыйылған эштәрҙе, ҡылыҡтарҙы башҡарырға тейеш түгел. Тыйыу ҙа - тәрбиә сараһы. Тыйыу, ҡурҡытыу аша кешене тәрбиәләгәндәр ҙә, ҡурҡыныстан да ҡурсалағандар. Мәҫәлән, Бөтә кеше лә бер заман, тормош йомғағын йомарлап, мәңгелек йортона - зиратҡа китә. Зират - халыҡ өсөн иң изге урын, сөнки унда иң ҡәҙерле кешеләр, яҡындарың ята. Зиратты тапарға, унда үҫкән тереклекте һындырырға, ватырға, елек-емешен өҙөргә ярамай. Унда сабылған бесәнде лә малға ашатырға ярамай. Сөнки мәйет тарҡалһа, унан канцероген матдә тарала. Сылбыр хасил була. Үләнде мал ашай, уның һөтөн эсәләр, итен ашайҙар. Зиратты кеше йәшәгән ерҙән алыҫыраҡ, һыу, тау аръяғындараҡ булырға тейеш.

Изгеләштереү, тыйыу ысулы менән тәбиғәт тә һаҡланған.

Аҡҡошто атырға ярамай, иптәшенән айырһаң, ул ҡарғай - затырыуың ҡороп.

Күгәрсенде, сыйырсыҡты, кәкүкте үлтерһәң - зыян күрәһең. Бөркөт менән шоңҡар ҙа - изге ҡоштар.

Һыуҙы һаҡсыл тоторға кәрәк, уның ғонаһы күп, ҡиәмәт көнөндә артыҡ тотонған һыуыңды үҙеңә эсерәләр, тип тә тыйғандар, ҡурҡытҡандар. Ҡоҙоҡ, шишмә таҙартҡан кеше иң тәрбиәле кеше иҫәпләнгән.

Торна изге ҡош. Сыңрау торналар яу ваҡытында халыҡты үлемдән алып ҡалған, уны йәберләргә ярамай.

Иман

Иман - ул кешенең намыҫы, ғорурлығы, шатлығы, ҡыуанысы, бәхете, ныҡлығы ла. Ул булмаһа, кеше боҙоклоҡ һаҙлығына кереп батыр ине. Шунлыҡтан һәр кем иманлы булырға хаҡлы һәм иман килтерергә бурыслы.

Аллаға, дингә ышаныу кешегә бер ваҡытта ла зыян килтермәгән.

Дин ул бер-берең ярҙам итеп торорға, иғтибарлы булырға, насарлыҡ ҡылмаҫҡа, балаларҙы дөрөҫ тәрбиәләргә, иманлы булырға өйрәтә.

Иманлы булайыҡ. Балаларыбыҙ өлкәндәрҙең оло хазинаһы - хәйер-фатихаһын, доғаһын алырлыҡ миһырбанлы кешеләр булып үҫһен.

Иманы көслө милләт тарҡалмаҫ. Имандан айырылмаһаҡ ине. Иманлы булһаҡ, ҡаты йөрәк ирер, сафланыр, иман ҡайтыр. Ышанып йәштәргә өйрәнәйек.

Бөйөк немец фәлсәфәсе Иммануил Кант үҙенең бер әҫәрен ошондайыраҡ юлдар менән тамамлай: "Ике нәмә күңелдә һәр ваҡыт яңы һәм торған һайын көслөрәк ғәжәпләнеү һәм тәрән ихтирам уята - баш осондағы йондоҙло күк һәм үҙемдәге иман, әхлаҡ ҡанундары".

Ысынлап та, имандың, әхлаҡтың тормош, йәшәү өсөн әһәмиәте әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур, сөнки улар - кешене кеше иткән, уны хайуандар донъяһынан айырып торған төп сифаттарҙың береһе. Был донъяға кеше ошо әхлаҡи ҡанундарҙы үҙләштереү һәм уны ғүмер буйы камиллаштырыу өсөн килә тиһәк тә, һис яңылышмабыҙ.

Статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, һуңғы йылдарҙа бәлиғ булмағандар тарафынан эшләнгән ауыр енәйәттәр һанының арта барыуы хәүефкә һала. Урлашыу, талау, юл баҫыу кеүек һәм сексуаль ерлектә ҡылынған енәйәттәрҙә лә күп осраҡта үҫмерҙәрҙең ҡатнашыуы осраҡлы хәлме? Беҙҙең киләсәгебеҙгә ни булды? Был хәлдән нисек сығырға?

Башҡорт халҡының рухи донъяһы - бик киң мәғәнәле төшөнсә. Уның үҙ тарихы һәм традициялары бар.

Халыҡтың рухи йөҙөн уның мәҙәни байлығы, төрлөлөгө һәм күркәмлеге билдәләй. Уның тарихы, әҙәбиәте, мәҙәниәте, мәғрифәте, сәнғәте, ауыҙ-тел ижады, гөрөф-ғәҙәттәре, ыҙан-йолалары ниндәй, милләттең һиммәте лә шундай.

Башҡорт халҡының, әлегә мәғлүм тарихи сығанаҡтарҙан белгәнебеҙсә, мең-мең ярым йыллыҡ рухи тарихы асыҡлана бара.

Кешелә патриотизм, интернационализм тойғолары фәҡәт туған телдән, милли ғорурлыҡтан, халыҡ ижадына, педагогикаһына таянып эшләүҙән, тәрбиәләнеүҙән башлана ла инде.

Халыҡ ижадының роле

Халҡыбыҙҙың меңәрләгән йылдар буйы күңел емеше булған ҡобайырҙар, әйтем-йомаҡтар, мәҡәлдәр, моңло йырҙар, туған тел байлығы ғына түгел, улар донъяның матурлығын, гүзәллеген таныу сараһы булып та хеҙмәт итә. Был мәңгелек хазина халыҡтың әхлаҡ кодексе, йәшәү нормаһы, күрәш сығанағы булып хеҙмәт итә, халыҡтың үҙен дә, бигерәк тә йәш быуынды яҡшы рухта, кешелеклелек рухында тәрбиәләү ҡоралы булып хеҙмәт итә. Халыҡ ижады һуты менән һуғарылып үҫкән бала ғына киләсәктә рухи яҡтан бай, физик яҡтан көслө була. Тимәк, илһам шишмәһенең башы, рухи ниғмәттәр сығанағы булып халыҡ ижады тора. Халыҡ ижадында бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлыҡ йәшеренеп ята.

Туған телде, халыҡ традицияларын, гөрөф-ғәҙәттәрен, үҙ этносыңды, халҡыңдың тамырҙарын өйрәнеү - хәҙерге заман йәштәренә патриотик һәм интернациональ тәрбиә биреүҙең кәрәкле өлөшө. Үҙ тамырҙарыбыҙҙы онотоп, беҙ замандар һәм быуындар бәйләнешен өҙәбеҙ. "Үткән замандың иҫтәлегенән башҡа, үҙенең донъялағы урынын ер-яңынан билдәләү кәрәклеге алдына ҡуйылған кеше, үҙ халҡының һәм башҡа халыҡтарҙың тарихи тәжрибәһенән мәхрүм ителгән кеше тарихи перспективанан ситтә һәм бөгөнгө көн менән генә йәшәргә һәләтле булып сыға", - тип раҫлай Айытматов.

Тормош ритмының боҙолоуы, ата-әсәләрҙең йәмғиәттәге һәм ғаиләләге роле ҡырҡа үҙгәреүе, тыуған йорт балалар һәм ата-әсәләр өсөн ҡунур урынға ғына әйләнеп, балалар баҡсаһында, мәктәптә, тирә-яҡ мөхиттә ғаиләнән тыш йоғонтоноң көсәйеүе, бер балалы ғаиләләр һаны артып, өлкән быуындар менән бәйләнеш өҙөлөү йәш ғаиләләрҙе быуаса күрелмәгән ҡатмарлы шарттарға ҡуя.

Унан сығыу юлы берәү генә. Ул да булһа, дөйөм кешелек ҡиммәттәренә, шәхескә ҡарата әүәлге мөнәсәбәтте ҡайтарыу, халыҡ педагогикаһы идеалдарын тергеҙеү.

Халыҡ педагогикаһының нигеҙ ташын ғаилә тәрбиәһе тәшкил итә.

Ғаиләләге гөрөф-ғәҙәттәр һәм йолалар системаһына ылыҡтырылған балалар, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, тәбиғи һәм еңел генә тәрбиә ала. Улар өлкәндәрҙең тәртибендәге һәм үҙ-ара мөнәсәбәтендәге өлгөнө күреп, үҙҙәре лә улар менән төрлө мөнәсәбәткә инә.

Ҡағиҙә булараҡ, ғаилә ата-әсәләрҙе һәм балаларҙы берләштерә. Күп быуынлы ғаилә ағзалары төрлө квартираларҙа һәм хатта төрлө ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа йәшәргә мөмкин. Әммә уларҙың бөтәһе лә ғаилә тормошондағы иң мөһим мәсьәләләр буйынса дөйөм маҡсаттарҙы һәм йолаларҙы һанлап, үҙ-ара ҡатнашлыҡтары булыуын, бер-береһенә ярҙам итергә әҙер торғанлыҡтарын, тыуғандарының һәр береһенең яҙмышы өсөн яуаплылыҡтарын тойоп йәшәйҙәр. Ул көндәлек һөйләшеүҙәрҙә генә түгел, ә хатта телефон аша хәл белешеүҙә лә сағылырға мөмкин. Иң мөһиме - шатлығыңды ла, ҡайғыңды ла уртаҡлашырҙай, ауырлыҡ килгәндә терәк булырҙай яҡын кешең барлығын тойоп йәшәү. Быларҙың бөтәһе ғәмәлгә ашһын өсөн һәр ғаиләнең үҙ традициялары, ныҡлы нигеҙе һәм принциптары булырға тейеш.

Дөйөмләп...

Бала тәрбиәләү - рух тәрбиәләү... Беҙ, өлкәндәр, тәрбиә эшендә, ысын башҡорт рухын тәрбиәләүҙә бөтә башланғыстарҙың да башы ғаиләлә икәнен онотмаһаҡ ине.

Үҙ телен һәм милләтен һанға һуҡмаған бер нисә быуын үҫтереп сығарып, ҙур хата яһаубыҙ. Беҙ ваҡытында күреп төҙәтә алыуыбыҙ бөгөн ҡыуанослы.

Илдә ааяуһыҙ һуғыш бара. Йәштәребеҙ, ҙур ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, илде һаҡлап, тыныслыҡты яҡлап, күпләп баш һала.

Бөгөнгө ысынбарлыҡ аяуһыҙ. Халыҡ байлығына ҡандала һымаҡ ҡаҙалған бурҙар, иманһыҙҙар самаһыҙ ҡотора. Илде ярышып талайҙар. Эскелек, наркомания тиғән бәлә өҫтәлде. Һыуға ҡарағанда, араҡыға ныҡыраҡ, күберәк батып үлгән кешеләр һаны арта бара.

Ата-бабаларҙы наҙанлыҡта ғәйепләйбеҙ. Ләкин бер ниндәй уҡыу йорттарының ишеген асып та ҡарамаған ата-әсәләр хәҙерге ҡайһы бер ата-әсәләрҙән әхлаҡ тәрбиәһе биреү яғынан күпкә өҫтөн булғандар. Сөнки шул уҡ эскелек, тәмәке тартыу, наркотиктар ҡулланыу башҡорттар өсөн бөтөнләй ят шөғөл булған. Бөгөн көндән-көн сәскә атҡан, тамырҙарын киңерәк таратҡан эскелекте, фәхишәлекте беҙ, тәрбиә эшен, ҡулға-ҡул тотоношоп, кәңәшләшеп башҡарғанда ғына юҡҡа сығара алабыҙ.

Бөгөнгө шарттарҙа кәрәкле рух ныҡлығы, алдына ҡуйған маҡсатҡа ирешеү өсөн тырышлыҡ, героик үткәндәр һәм заман бәйләнеше булдырыу - мөһим мәсьәләләрҙең береһе. Һәр төрлө ауырлыҡты еңеп сығыу өсөн, бала бөтә яҡлап та әҙерлекле булырға тейеш.

Халыҡтың рухи мирасына ныҡлы таянып, сәсән, илһөйәр, телһөйәр булып тәрбиәләнергә тейеш бала. Үҙ милләтен бейеклектәргә күтәрерҙәй, ауыҙ тултырып: "Мин-башҡорт балаһы, бөркөттәр оя ташламаҫ сал Уралдың үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге", - тип әйтә, уның һәр ташын, ерен-һыуын ҡурсый алырлыҡ оло шәхес булып үҫергә тейеш ул. Милли үҙаңы үҫешкән, үҙ аллы фекер йөрөтә алған, ижади һәләтле лә булып үҫһен кеше.

Балаларҙы кеше зарына ҡолаҡ һалырға, тирә-йүндәгеләргә иғтибарлы булырға өйрәтәйек. Яҡшылыҡ ерҙә ятып ҡалмаҫ. Башҡаларға кәрәк булыуға, ярҙам итә алыуға һөйөнөп йәшәргә өйрәнһендәр.

Бала үҙ милләтенең рухи ҡиммәттәрен: милли аш төрҙәрен дә, музыка ҡоралдарын да, кейемен дә, батырҙарын да белеп, танып үҫһен. Халҡының күркәле бер вәкиле итеп тойһон үҙен.

Яҡшылыҡтың ҡәҙерен белеп, бер изгелеккә унлата изгелек менән яуап ҡайтарырға тырышһындар, гүзәл булһындар. Был бөйөк ҡиммәттәрҙән тыш донъя күптән дөм ҡараға әйләнер ине.

Донъяларҙан ваз кисерлек наҡаҡтар ишетһәң дә, ҡот осорлоҡ хәлдәргә тарыһаң да, үсләшеп йөрөмәй, йәнде яралаған зәһәрҙе үткәрә алырлыҡ булып үҫһендәр.

Ата улды, инә ҡыҙҙы белмәгән заман килгәндә лә, изгелеклелек, миһырбанлыҡ тигән төшөнсәне юғалтмаһындар ине. Булдыҡлы, энергиялы, намыҫлы булһындар, халыҡ мәнфәғәтен яҡлап, халыҡ булып һаҡланып ҡала алһындар.

Рухи ныҡлыҡ бәхетле минуттарҙа ла, ҡайғы килгәндә лә һынала. Бәхетле мәлдә рухы ныҡ кеше шашып китмәй, донъяның ҡуласа икәнлеген аңлай.

Хөрмәтле дуҫтар! Кешелек донъяһы ер тетрәүҙәрҙән, туфан һыуы ҡалҡыуҙан, йыһан бәләҡазаларынан, хатта атом һуғышынан да түгел, ә араҡынан, наркотиктарҙан, әҙәм балаларының рухи тарҡалыуынан һәләк булыуы ихтимал. Шуға күрә бөгөн аҡылыбыҙға килергә ваҡыт.

Ҡотло, милли рухи донъяһын һындырмаған, иман утын һүндермәгән, беҙҙән белемлерәк икәнен белдермәгән ҡанбабалар аманатына тоғро булайыҡ, ата-әсәләребеҙҙе, әбей-бабайҙарыбыҙҙы тыңлап ҡалайыҡ, аҡыл төйнәп, әйтмәгәнен оһолап, ут алып ҡалайыҡ, шул осҡондо балаларыбыҙ күңеленә һалайыҡ.

Тереләйек, терелтәйек илебеҙҙе. Күңелдәге изге теләктәрҙе доға итеп әйтәйек, аҡылыбыҙға киләйек, тәүфиҡтан айырылмайыҡ. Беҙ иманлы булһаҡ, балаларыбыҙ ҙа иманлы булыр. Ул саҡта бер генә мөртәт тә беҙгә милләт булараҡ үлем юрай алмаҫ. Бөйөк Шағирҙың һүҙҙәрен, бер аҙ ғына үҙгәртеп, былай тип әйткем килә:

Хәсрәт түгел,
хәстәр йыйһын беҙҙе,
Берҙәмлекте кәрәк
яңыртыуҙар,
Һүрелмәһен әмәт,
һүнмәһен рух
Һүнеп ҡалғанда ла
янар тауҙар.

Рузидә ҮТӘШЕВА - КӘРИМОВА,
Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.
Сибай ҡалаһы.

Кис буйы барыбыҙҙы һоҡландырып, хисләндереп йырланы ла йырланы, аҙаҡтан бер аҙ бәүелеңкерәп бейергә төшөп китте. Табынды ойоштороусы еңгәләр кәләште йәшереп аҙапланманылар, ул күптән йәшерелеүҙән уҙғайны.

Хәйҙәр ТАПАҠОВ

ОҘАТА КИЛ...

Хикәйә

Йоманан һуң, Хәлфетдиндең "Беларусь"ына тағылған бәләкәй тимер арбаға һалам түшәп һалып, көҙҙөң ҡарһыҙ һуңғы айы ныҡ ҡына һыуытып торғанға, толоптар кейеп алып, күрше ауылға ҡарай юлландыҡ. Беҙҙән башҡа Мәҙинә апайҙың бер туған ҡустыһы менән килене лә бар. Мәҙинә апайҙың йоҡа ирендәре асылмаç өсөн береккәндәр, ҡымтылғандар һымаҡ, йөҙө ҡара көйгән, дебет шәл ураған башын тотошлай толоп яғаһына йәшереп, юл буйы ауыҙ асып бер һүҙ өндәшмәне, кәләш әйттерергә түгел, тамуҡ кисәүендәй һерәйешеп, ойоп, кемделер ерләргә китеп барғандайбыҙ.

Байғужа ауылына ҡараңғы төшмәç элек үк барып индек. Хәлфетдин шәхси тантанаһына йәм өçтәргә теләгәнгәмелер, ауылға килеп ингәс тә тракторын оҙон итеп һуҙып пипелдәтеп ебәргән булды, ә ул яңғыҙ, аҙашып ҡалған ҡоштоң асырғанып ҡысҡырыуын хәтерләтте. Төп ҡоҙа-ҡоҙағый булаһы кешеләр яҡындары менән ҡапҡа ауыҙына уҡ сығып, шау-гөр килеп, шаяртып, мәрәкә һүҙҙәр әйтеп, буяғы, биҙәге һыҙырылып бөткән арзанлы батмусҡа ҡырҡылған ҡыяр, ҡатыңҡыраған икмәк ҡайырылары, шыйыҡ айранды хәтерләткән бер шешә буҙ көмөшкә ҡуйып ҡаршы алһалар ҙа, ҡунаҡтар алдына ҡуйыр йүнле табын әҙерләнмәгәйне, ҡотһоҙ өй эсендә лә күҙгә эләгер ҡаралты-маҙар күренмәй. Яғылмаған мейес, һалҡын өй эсе ҡотһоҙлоҡто, шыҡһыҙлыҡты бермә-бер арттырып ебәрә.

Барған ыңғайы ҡоро-һары, ҡаралай булһа ла сәй эсереп алған булдылар, шунан мөштөрҙәп, ығышып йөрөп, күршеләре тотоп ингән ризыҡтарҙы турпышаға оҡшаш балаç менән ябыулы урындыҡҡа теҙеп, киске табын хәстәрләргә керешеп киттеләр. Беҙҙән ике класс түбәндә уҡыған, оңҡот фиғелле, бер аҙ аңрараҡ, әле ауылдарында мулла хөкөмөндә йөрөгән Хәйретдин аяҡтарын бөкләп урындыҡ түренә ултырып, килешһеҙ генә итеп сүрәләрҙе бутап, бата уҡығас, Мәҙинә апай йолаға ярашлы һонолған теге батмусҡа егерме биш һумлыҡ аҡса ырғытты, шунан табындағыларға таçтамалдар, яулыҡтар таратты, төп ҡоҙа менән ҡоҙағыйға күлдәк кейҙерҙе. Никах йолаһын мөмкинлегенән сығып, хәленән килгәнсе этеп-төртөп атҡарған мулла ҡуштан тауыҡтай һылашып барған тыңҡыш кәүҙәле ҡатынын эйәртеп ҡайтып киткәс, теге буҙ көмөшкәнең әшнәләре теҙеп ҡуйылған эскеселәр мәжлесе башланды. Ҡоҙағыйҙың тауышы Сажидәнеке һымаҡ моңло, яғымлы ғына икән. Ул беҙҙе башта моңло халыҡ көйҙәре менән кинәндерһә, тора-бара, эселгән эсемлек шауҡымынан уның һөйләшеүе тоҙһоҙға, йүнһеҙгә әүерелде, ә йырланған йырҙар инде йышылып бөтөп танһыҡты ҡандырған ауыл таҡмаҡтарына барып ялғанды:

Эс тә ҡуй, эс тә ҡуй,
Нужа күрмә никакуй,
Тәҙрәңдән елдәр иçһә,
Куфайкыңды тыҡ та ҡуй!

Биттәрен шырт һаҡал-мыйыҡ баçҡан, шыбаҡшып таралған етек, сал сәсле, эскенән таушалған йөҙлө ҡоҙа ҡыштыҡлы бармаҡтарына ҡыçтырған тоҙло помидор киçәген, ә инде апаруҡ бәлйерәй төшкән сырыш маңлайлы, урттары эскә тартылған ҡоҙағый ҡырлы, бер сите кителгән рюмканы икәүһе бер юлы төп ҡунаҡтың танау тапҡырына килтереп терәнеләр.

Мәҙинә апайҙың йөҙө асыуҙан ҡыҙарып бүрткән, ул быны-бына шартлап һытылыр хәлдә, шулай булһа ла ауырлыҡ менән тыйылып, беҙгә сығыу яғына ҡарай эйәген ҡаҡты. Беҙ инде уның өнһөҙ бойороғон үтәп, шыпырт ҡына кейендек тә, айырылып, йәштәр өсөн ойошторолған икенсе урынға киттек. Тик шуныһы кәйефте ныҡ ҡырҙы, кәләш булаһы кеше баштараҡ беленмәһә лә, һалҡынға сығып ингәс, һиҙелеп иçерә төшкәне асыҡланды. Кис буйы барыбыҙҙы һоҡландырып, хисләндереп йырланы ла йырланы, аҙаҡтан бер аҙ бәүелеңкерәп бейергә төшөп китте. Табынды ойоштороусы еңгәләр кәләште йәшереп аҙапланманылар, ул күптән йәшерелеүҙән уҙғайны.

Ауыл ерендә төп ҡоҙа менән ҡоҙағыйҙың батаны ташлап ҡайтыуы ғәрлекле-оят иçәпләнә, мәсхәрәләп, ҡыҙ ҡапҡаһын дегеткә буяуға тиң, иртән иртәнсәк шуныһы асыҡланды, Мәҙинә апай ҡустыһын, киленен эйәртеп, ҡара таң менән осраҡлы ылауға һағып, беҙҙе ҡалдырып ҡайтып киткәйне...

* * *

Стәрлетамаҡ институтының тел һәм әҙәбиәт факультетында биш йыл дауамында уҡып, уны уңышлы тамамлағас, ауылға ҡайтып, мәктәптә бер аҙ эшләгәндән һуң ғаиләм менән район үҙәгенә күстек, шунан тағы ла ике йылдан Сибай ҡалаһына барып төпләндек. Шулай итеп, өйләнгәненән алып урыҡ-һурыҡ аралашҡан Хәлфетдин менән юлдарыбыҙ тамам айырылды, әммә ауылдаштар менән осрашҡанда ситтән генә булһа ла уның нисегерәк йәшәүен һораша, белешә инем. Әммә теге икәүҙең тормошкөнкүреше артыҡ шәптән түгел ине шикелле, сөнки һораған береһе, "Йәшәйҙәр инде шунда, иçәпкә бар, һанға юҡ булып..." тип ҡул һелтәп ҡуйыу менән генә сикләнделәр.

Бер ҡайтҡанымда ауыл осондағы кәртәләнмәгән ҡуңалтаҡ йортҡа, Хәлфетдиндәргә боролоп индем; ишек алдында һул ҡулда утынлыҡ, ундағы юнылған, апаруҡ ултырышлы ҡайын түмәргә һабының муйыны ашалып бөткән балта сабылған. Бер яҡ ситтәрәк иçке шифер менән ябылған соланһыҙ ҡара мунса, йоҡа трансанан ҡоршалған ҡыйыҡһыҙ келәт, арыраҡ өçтән тартылған һайғау менән кәртәләп алынған мал аҙбары артында картуф баҡсаһы күренә. Трактор менән һөйрәп, ишек алдына уҡ индерелгән, юл мәтеһе һылашҡан ике буй ҡайын ағас бер нисә түмәр бысып-ярылған, улар ян-тирәгә тәртипһеҙ рәүештә сәсрәп-туҙыраған. Шунда уҡ оҙон ҡул бысҡыһы, аҙбарға һөйәлер көрәк-һәнәк ята, мунса ишегенең ҡаршыһына ике бағана ҡаҙып ултыртылып, сүс еп тартылған, унда инде нисек етте шулай, бысраҡ итеп йыуылған кер эленгән. Бөтә урында ла дөйөм тәртипһеҙлек, илке-һалҡылыҡ, әрпешлек, көн итеүгә ҡул һелтәп ҡарау күҙгә ташлана. Инер ишектең бер яҡ ҡырында ике тәгәрмәсе, оҙон тотҡалы ҡул арбаһы, төбөнә йомшаҡ күпмә һалынған, ҡолағына оҙон тимер сым тағылған ҙур ғына тимер кәритә күренә. Ҡулланылыштарын, тәғәйенләнештәрен белмәгәнгә, был шыҡһыҙ ҡулайламалар миндә сәйерһенеү тойғоһон уятты.

Ишек шаҡыуға яуап биреүсе булмаһа ла, алама, йыртыҡ балаç менән көпләүле, ҡайыш тотҡалы ишекте тартып асып, өй эсенә индем. Хәлфетдин яңғыҙы ине, өç кейемен дә һалып өлгөрмәгәйне, тик был юлы мазутлы түгел, брезент салбар, үтә ныҡ тотонолған пинжәк, шалбайған яғалы бумазый күлдәк кейеп алған. Мине күргәс, тоҡанып ҡыуанып китте, бер һүҙ ҙә өндәшмәйенсә, ынтылып ҡосаҡлап уҡ алды, яçы усы менән туҙан баçҡан артһыҙ ултырғысты һөртөштөрөп, эргәмә шылдырып, ултырырға урын тәҡдим итте.

Бүленмәгән, бер генә яҡлы өй эсе бола, йыйыштырылмаған, өçтәл өçтө тулы йыуылмаған ҡашығаяҡ. Ағас рамлы, ҙур булмаған тәҙрәләрҙә ҡорған әçәре күренмәй, эс яҡтан һылаулы стеналар аша-төшә буҙартып аҡланған, тәҙрә эргәһендәге иçке, күптән ҡулланылыштан сыҡҡан пружиналы карауатта йоҡлап йөрөгән түшәктәре - простыняһыҙ матрас кер-ҡыштыҡтан йылтырап ҡатҡан, ҡолаҡсын ҙурлыҡ тышһыҙ мендәр бер яҡ ситтә ята; мамығы һиҙерәп күренгән юрған һепереү күрмәгән һоро буяулы иҙәнгә яртылаш һалынған, мөйөшкә ҡуйылған, сеүәтәләй экранын туҙан баçҡан телевизор, өрлөк уртаһына беркетелгән, әле яҡты уҡ булһа ла тоҡандырылған түбән вольтлы лампа торлаҡҡа ҡайһылыр кимәлдә йәм, яҡтылыҡ өçтәй. Тыштағы ытырғандырғыс, күңелһеҙ көнитмеш, эскә ингәс, бермә-бер көсәйә төштө. Үҙемде көтмәгәндә-уйламағанда мал аҙбарына барып юлыҡҡандай итеп хис иттем.

- Яңы торлаҡ ҡотло булһын, тик мин, белекһеҙ, бүләкһеҙ килдем бит әле, - тигән булдым ризаһыҙлыҡтан йыйырылыулы танауымды, сирылған маңлайымды усым менән йәшереп.

- Мында күсенгәнгә күп йылдар үтте, шуға быныһы артыҡ. Өйҙө, башҡаһын, үҙ ҡулдарым менән, оçталығым самаһында эш араһында әтмәләштерҙем шунда, ауыл ерендә ҡыйыҡһыҙ, хужалыҡһыҙ көн итеп бумай бит. Өй эсе тулайым ҡатын-ҡыҙҙыҡы буһа, ишек алды, кәртә тирәһе - ирҙеке. Ундағы болалыҡҡа иғтибар итмә, көн оҙоно эш, ыуаҡтөйәк менән буғас, ҡул теймәй.

"Өйөгөҙҙөң эске яғы ла, тышы ла бер сама инде", - тип уйлап ҡуйһам да телем икенсене һораны:

- Нисек йәшәп ятаһығыҙ әле, дуç!

- Арыу, - булды яуап. - Йә алдан хәбәр ебәрмәгәнһең, һинең килереңде белһәк, аш һалып, өçтәл әҙерләп ҡуйыр инек. - Ингәс тә уң ҡулдағы, ишек төбөндәге яғылмаған, ауыҙын ҡором баçҡан мейес яғына, шунан таҙартыуҙың ни икәнлеген белмәгән, ҡаҡашып ҡатҡан газ плитәһенә ҡарап алды. - Ауыҙы һалыулы ҡунаҡҡа ризыҡ тигәнең һәр ваҡыт табыла инде у...

- Рәхмәт, һыйлы табындан килдем әле. Ҡатыным шунда ҡалды, ә мин аулаҡлап ултырып алайыҡ, тип, һеҙҙең яҡҡа ыңғайланым.

- Яңғыҙың килеп, һәйбәт иткәнһең, тәртип, бөхтәлек яратҡан ҡатын-ҡыҙға мындай торлаҡты күрһәтеү уңайһыҙ нисектер, тағы икәүҙән-икәү генә һөйләшеп алыу ҙа күпкә еңелерәк.

- Тормошоғоҙ нисек?

- Арыу, тинем дә баһа! - Ҡойто өй эсен өмөтһөҙ һирпелеүе менән теүәлләгәс, дауам итте. - Йәшәлә инде, үлмәйем дә, ҡалмайым тип, башҡаларға эйәреп, таң ата ла кис була, көн артынан көн үтә... Мин ни, билемә балтамды ҡыçтырып, оçталыҡ мәшәҡәте менән шөғөлләнгән булам шунда; өй, аҙбар, мунса бурайым, тәҙрә урындары уям, ҡыйыҡ ябам, иҙән-түбәлекте бөтөрәм, бер һүҙ менән әйткәндә - өйрәнелгән, күнегелгән шабашка. Үҙебеҙгә лә, күрше-тирә ауылдарға ла саҡыралар. Аҡмаһа ла аҙлап тама, аҡса шунан килеп тора.

- Сажидә эштәме әллә?

- Какуй һиңә эш, беҙҙәге мал фермаһының күптән ябылғанын беләһең дә баһа, һауын һыйырҙарын дүрт-биш йыл түләнмәгән эш хаҡы иçәбенә халыҡҡа таратып бирҙеләр, беҙгә лә еленле тана эләккәйне, быҙауланы, хәҙер ике баш, ваҡ мал, ҡош-ҡорт бар, башҡаларҙан ҡалышҡан юҡ. Сажидә ни, йүгермәләйҙер ауыл ҡыҙырып, әйенселәп, тиҙҙән ҡайтыр.

-Мәҙинә апайҙың вафатын ишеттек, ауыр тупрағы еңел булһын, игелекле кеше ине.

- Ерләнек уны ла арыулап, атай мәрхүмдең эргәһенә, йәнәшәләтеп, әҙәмсә итеп.

Әсәй мәрхүмәнең ҡырыç, тәкәббер, үҙһүҙле, еңмеш холҡон беләһең, киленен баштан уҡ өнәп еткермәне, һүҙҙәре, кәңәштәре берекмәне, күҙҙәрен мәңгегә йоморҙан алда беҙгә фатихаһын бирмәй китте бит, шуныһы йәл, ә бит атай-әсәйҙән ризалыҡ алмау - гөнаһҡа тиң.

- Уныһы шулай.

- Төтәтеп алайыҡмы әллә?

- Тартмағанымды беләһең.

- Улайһа мин үҙем. - Салбар кеçәһенән арзанлы папирос ҡабын сығарҙы. Өй эсендәге араҡы көйөгөнә, танауҙы ярған һыҡрağа ҡырҡыу тәмәке еçе өçтәлде. - Тормоштоң ҡото бала бит, ә беҙ шулай, бил быуарҙан бысылған түңгәктәй һерәйеп, икәүҙән-икәү генә суҡаябыҙ. Сажидәнең хәле барыһына ла билдәле, һин ситтә ятһаң да кеше аша ишетәһеңдер әле, ә ул араҡыға ағыуланған зәғиф бала тапҡым килмәй, тип баштан уҡ баш тартты, бер нисә тапҡыр аборт яһатты, ә хәҙер һуң инде...

(Дауамы. Башы 28-се һанда).

✓ Илде етәкләгән, тик уны ғына бөйөк дәүләттең етәксеһе итеп белгән һәм башҡаның ул тиклем дә юғары вазифаны биләй алыуына шикләнгән шундай даһи, берҙән-бер кешенең табутын ҡәбергә таһырлатып ташланылар ҙа ҡуйҙылар.

ИНТЕРНЕТТАН

КАКАО ЛА ФАЙҘАЛЫ ИКӘН

■ Какаоның файҙаһы тураһында һуңғы ваҡытта күп ишетәһегеҙҙер. Диабетты булдырмауысы үҙенсәлеген дә беләһегеҙҙер. Какаола инсулин бүленеп сығыуға ярҙам итеүсе берләшмәләр бар. Яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, какао - D2 витамины сығанағы. Белгестәр төрлө какао продукттарын анализлаған. D2 витамины бигерәк тә какао майында һәм ҡара шоколадта күп икән. Әммә организмды был витамин менән байытыу өсөн шоколадты күп итеп ашарға кәрәк. Шоколад, билдәле булыуынса, ныҡ майлы һәм шәкәрле продукт. Шуға ла белгестәр какаонан организмда шәкәр кимәлен күтәрмәй торған ризыҡ әҙерләп булмаймы икәнен өйрәнә.

■ Йәшелсә, емеш-еләк, сәтләүек һәм балыҡтан торған урта диңгеҙ диетаһы депрессияны булдырмай. Ғалимдар 41 ғилми хеҙмәтте тикшереп, туҡланыу менән психик сәләмәтлек араһында бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Урта диңгеҙ диетаһын тотҡанда депрессия хәүефен 33 процентҡа түбәнәйтергә була. Ғалимдар быны шулай аңлата: күптәрҙең рационында шешеүгә килтереүсе матдәләр бар. Мәҫәлән, эшкәртелгән ит ризыҡтарында, транс-майҙарҙа, алкоголдә. Тап улар депрессияға килтереүе бар. Шешеү - ул патоген ҡуҙғытҡысҡа организмдың һаҡланыу-яраҡлашыу реакцияһы. Ә ул диета аша дауалана.

■ Ашҡаҙан-эсәк тракты баш мейеһе менән бәйле, ти ғалимдар. Ашҡаҙан-эсәк трактында нервы күҙәнәктәренең һаны 100 миллионға етә. Уларҙың ҡайһы берҙәре баш мейеһе менән туранан-тура бәйләнештә. Элек ашҡаҙан үҙенең туйыуы тураһындағы сигналды баш мейеһенә 10 минут эсендә "ебәрә" тигән фекер йәшәй ине. Хәҙер был бәйләнеш һанаулы ғына секундтар эсендә барлыҡҡа килә, тип иҫәпләргә нигеҙ бар. Ошо уҡ тундырма ашағанда кешенең кәйефе шунда уҡ күтәрелеүенең сәбәбен дә аңлата. Был тура бәйләнеш организмдағы токсиндарҙы таныуға ла булышлыҡ итә.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, кеше дөрөҫ туҡлана икән, ҡайһы берҙә татлы эсемлектәр эсеү һәм тәм-том ашау уның сәләмәтлеген ҡаҡшата алмай. Әйткәндәй, шәкәр яман шеш күҙәнәктәрен уята һәм шештәрҙе агрессивҡа әйләндерә. Яман шеш күҙәнәктәре шәкәрҙе тарҡата һәм лактата матдәһен барлыҡҡа килтерә, был шеште үҫтерә. Сәләмәт күҙәнәктәргә ҡарағанда, зарарланған күҙәнәктәр шәкәрҙе күберәк тарҡата. Фән был метаболик аномалияны Варбург тәьҫире тип атай. Яман шеш күҙәнәктәренең шәкәрҙе күпләп "ашауы" шеште аҙҙыра һәм даими туҡландыра. Быны раҫлау өсөн белгестәр бәшмәктәрҙә һынауҙар үткәрә. Бәшмәк күҙәнәктәрендә яман шештәге кеүек үк аҡһымдар бар, бары тик улар мутация һөҙөмтәһендә формаһын үҙгәрткән. Етмәһә, бәшмәктәр ҙә шәкәр ярата.

ӘРМЕНЕ ХӘТЕРЛӘП...

Быйыл декабрҙә Советтар Союзының тарҡалыуына 35 йыл тула. Бөгөнгө заман бөтә донъя тарихына ғәйәт ҙур йоғонто яһаған был глобаль сәйәси ваҡиғаны төрлөсә баһалап була, әлбиттә. Империялар ҡасандыр барыбер емерелә, тип фәлсәфәүи һығымта менән сикләнергә һәм үҙенде тынысландырырға, йә иһә Бөйөк Державаның юҡҡа сығыуын, милли катастрофа, тип баһаларға мөмкин. Нисек кенә булғанда ла, ваҡытты кирегә бороу мөмкин түгел.

АЛМА-АТА - АЛМАТЫ

Дәүләт бөтөнлөгө тотҡаларының береһе - армия ул. Совет Армияһы ҡеүәте менән донъяла тиңе булмаған көс ине, ә ике йыл хеҙмәттә булып ҡайтыу егеттәр өсөн мәртәбә һаналды. Мин үҙем 1980 - 1982 йылдарҙа сик буйы ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иттем. Шуның ярты йылы Ҡаҙағстандың ул саҡтағы баш ҡалаһы Алма-Атала үтте.

Егеттәр, хәрби хеҙмәткә алынып, ил гиҙеп, ер-һыу күреп ҡайтты. Беҙҙең быуын йәштәре өсөн күп осраҡта был берҙән-бер оло сәфәр, ғүмерҙәренең иң ҙур, иң сағыу ваҡиғаһы булды. Хәҙер генә йәше лә ҡарты ла, эш, еңел тормош эҙләп, ил буйлап һибелде, ҡайҙа ғына барып сыҡмайҙар улар - Чукотканан Калининград өлкәһенә тиклем. Элек эш ауылдың үҙендә ине, бик һирәктәр тыуған төйәгенән айырылды, ситтә төпләнде. Сит илдәрҙә лә башҡорт байтаҡ бөгөн. Элек егеттәр Варшава договорына ингән социалистик илдәрҙә урынлашҡан хәрби частарҙа хеҙмәттә булып ҡына башҡа дәүләттәрҙәге йәшәйеште күрҙе.

Хеҙмәткә 1980 йылдың апрелендә Силәбе өлкәһенән алындым. Өлкәнең саҡырылыш пункты Копейск ҡалаһында урынлашҡайны ул ваҡытта. Моғайын, хәҙер ҙә шулайҙыр. Беҙҙе махсус состав менән Алма-Атаға пограничниктарҙың сержанттар мәктәбенә алып киттеләр. Ул заманда Алма-Ата Ҡаҙағстан ССР-ның баш ҡалаһы ине, әле уның исеме лә башҡаса яңғырай - Алматы. Юлда дүрт көн самаһы булдыҡ, ҡаҙаҡ далаһын төньяҡтан көньяҡҡа буйынан-буйына үттек. Иҫтә ике нәмә уйылып ҡалған: дала ләләләре (тюльпандары) һәм Балхаш күле.

Яҙ - даланың тура мәғәнәһендә сәскә атҡан мәле. Состав мул йәшеллек һәм иҫ китмәле алһыу тюльпандар яланы аша барҙы. Урыны менән офоҡҡа тиклем күҙ күреме ер ут ялҡынындай алһыуланып ята ине. Ҡырағай ләлә сәскәһенең ошо рәүешле үҫеүе, уның иҫ китмәле күплеге минең өсөн асыш булды. Беҙҙә, Көньяҡ Уралда, яҙҙы умырзая биҙәһә, ҡаҙаҡ далаларында - алһыу тюльпандар.

Ҙур ҡалаларҙы төнөн генә үттек, ахыры, сөнки күҙгә тик ауылдар ғына ташланды. Киң далала улар етемһерәп кенә, күрмәлекһеҙ булып, йонсоу ҡиәфәттә ултыра. Балхаш күле тирәләп поезд көнө буйы барҙы. Күлдең йөҙө ҙур тулҡындар менән йыйырсыҡланғайны, һыуҙың төҫө йәшкелт күренде, нишләптер. Ярҙары яланғас, ағасһыҙ. Бер ауыл тапҡырында состав бик оҙаҡ туҡтап торҙо. Өйҙәр тимер юлынан биш йөҙ метр тирәһе алыҫлыҡта урынлашҡайны. Самандан һуғылған ине улар, күрәһең. Ҡыйыҡланмағандар, тәҙрәләре бәләкәй. Эргә-тирәләрендә баҡса, ағас маҙар күҙгә ташланмай. Балыҡсылар ауылы тип фаразланым. Сөнки туҡтаған поезды балыҡ бәйләмдәре тотҡан ҡаҙаҡ ҡатын-ҡыҙҙары һырып алды. Ҡулдарында ҡаҡланған, ыҫланған төрлө балыҡ, кем уҙарҙан тауарҙарын маҡтайҙар. Инде өсөнсө тәүлек вагондарҙа бикле барып йонсоған призывниктарға тамаша бик ярап ҡалды. Тышҡа сығармайҙар, шуға сауҙа вагондың асыҡ тәҙрәләре аша бара. Аҡсалы ҡала егеттәре ҡаҙаҡ ҡатындары ҡулынан балыҡты шунда уҡ һыпырып алып бөттө. Кәсептәренең шулай уң китеүенә дәртләнгән ҡатындар яңы партия тауарға өйҙәренә ҡарай йүгерҙе. Ҡарап ултырабыҙ: өй башына менеп китәләр ҙә, махсус урҙаларға ҡаҡларға теҙеп эленгән балыҡты һыпырып алып, кире поезға уҡталалар. Шулай бер нисә тапҡыр урап әйләнде улар. Вагон ыҫланған балыҡ еҫе менән тулды.

Алма-Атаға таңда барып төштөк. Беҙҙе көплө һалдат машиналары көтә ине. Ҡаҙағстандың ул саҡтағы баш ҡалаһын мин аяҙ күк йөҙлө, тымыҡ һауалы, йәшеллеккә сумған, һил һәм бөхтә мөхитле итеп иҫләйем. Ул Иле Алатауы (Заилийский Алатау) тауы итәгендә диңгеҙ кимәленән 700 - 900 метр бейеклектә урынлашҡан, алыҫта ҡарлы аҡ түбәләр ослайып күккә олғашҡан. Климаты сағыштырмаса йомшаҡ.

Сик буйы ғәскәрҙәре өсөн сержанттар әҙерләү мәктәбе, йәғни 9792-се часть, Алама-Атаның көньяҡ биҫтәһендә урынлашҡайны. Интернеттан эҙләй торғас, картала уны саҡ таптым. Спутниктан төшөрөлгән часть биләмәһе фотоһүрәтенә бағып, тулҡынланыу ҙа кисереп ҡуйҙым. Биш ҡатлы казарма, уға уртатоштан ҡушарлаған уҡыу корпусы, һул ҡабырғаһынан төкәтелгән ашхана, стройҙа йөрөгән плацтың аҡ шаҡмаҡтары, физик күнекмәләр үткән стадион, парлы ике ҡоралай йөрөгән йәшел газондар һәм ағас ышыҡтары, генерал йорто - барыһы ла шул көйө һаҡланған. Ҡырҡ алты йыл ваҡыт үткән, шулай булһа ла гүзәл йәшлек мәлен үҙ эсенә алған ярты йыл тормошом ваҡиғалары хәтергә ныҡ уйылған.

Мин, ун һигеҙ йәшлек егет, ғүмеремдә тәүге тапҡыр тыуған төйәгемдән шул тиклем алыҫҡа киттем. Уҡыу мөҙҙәтемде тултырғас, икенсе тарафтарға алып китерҙәр, бында ғүмеремдә башҡа булмаҫмын, эҙҙәрем дә ҡалмаҫ, булыу-булмауымды үҙемдән башҡа бер кем белмәҫ, иҫләмәҫ, тигән уй Ғәләмдең сикһеҙ киңлеген, донъялыҡтың фанилығын, яҙмыштың ғәжәп боролоштарға һәм алдан фараз ҡылыу мөмкин булмаған ваҡиғаларға байлығын, ваҡыттың үҙен тоттормаҫ шыйғалаҡ шамбы кеүек йылғырлығын аңғартып, ошоларҙың барыһын да үҙ эсенә алған Ғәләмдә кешенең бер саң бөртөгө генә икәнен йәш күңелемә һеңдерҙе.

Алма-Ата совет заманында тауҙа урынлашҡан (1691 метр бейеклектә) "Медео" халыҡ-ара кимәлендәге боҙ шыуыу спорт комплексы менән данлыҡлы ине. Ул 1972 йылда төҙөлгән. Төрлө йылдарҙа боҙ комплексында Европа һәм Донъя чемпионаттары үткәрелә. Тау шишмәләре һыуын файҙаланып тундырылған боҙ донъяла иң сифатлыларҙан һанала. Медеола барлығы 200-ҙән ашыу донъя рекорды ҡуйылған.

Ҡаланың исеме юҡҡа ғына "алма" һүҙенән алынмаған. Иле Алатау итәгендә алма баҡсалары йәйрәп ята. Алманың, грушаның, сливаның, өрөктөң ниндәйе генә үҫмәй унда. Беҙҙе бер нисә тапҡыр уңыш йыйырға алып барҙылар. Иң сифатлы юғары сортлы алманы, ике бармаҡ менән суҡ йөйҙәренән тотоп ҡына өҙөп, ағас юнышҡыһы һалынған ҡумталарға һала барҙыҡ. Емеш йыйыуҙың был аяулы технологияһы уның тауар йөҙөн боҙмаҫ, бармаҡ эҙҙәре аҙаҡтан ҡарайып ҡалмаһын өсөн ҡулланыла икән. Көнө буйы алма ашап йөрөйбөҙ, үҙебеҙ менән вещмешоктарға, аҙыҡ-түлек ҡумталарына тултырып, алма-грушаны казармаға алып ҡайтабыҙ һәм тағы ашайбыҙ. Шул тиклем татлы, ашап туйғыһыҙ ине ул емештәр. Ике-өс тапҡыр булдыҡ емеш совхоздарында.

Алыҫтан булһа ла ул замандағы Совет иле етәксеһен дә Алма-Атала күрҙем. Л.И. Брежнев 1980 йылдың август айы тирәләрендә эш сәфәре менән Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Алма-Атаға килде. Ил именлеге комитеты составына ингән сик буйы ғәскәрҙәре булараҡ, сержанттар мәктәбе курсанттарын, юғары ҡунаҡтың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатында, аэропортты ҡамауға алған хәрбиҙәрҙең икенсе ҡуласаһына ҡуйҙылар. Алда КГБ хеҙмәткәрҙәре үҙҙәре торҙо. Шунда Брежневты күреп ҡалдым.

Ике йылдан һуң ул мәрхүм булды. Ноябрь айы, Мейәстә уҡыуымды дауам итеп йөрөгән саҡ ине. Мин иҫ белгәндә илде етәкләгән, тик уны ғына бөйөк дәүләттең етәксеһе итеп белгән һәм башҡаның ул тиклем дә юғары вазифаны биләй алыуына шикләнгән шундай даһи, берҙән-бер кешенең табутын ҡәбергә таһырлатып ташланылар ҙа ҡуйҙылар. Матәм процессияһынан тура трансляция алып барылды һәм табуттың ҡәбергә таштай төшөп китеүен бар ғәләм ишетте. Брежнев эпохаһы шулай күңелһеҙ тамамланды. Эйе, донъялыҡтағы сәйәхәттең ҡасан да ахыры була. Тик тиҙерәк ҡотолорға теләгәндәй, табутыңды таш шикелле атып бәрмәһәндәр ине, берүк. Бөтә нәмәнең самаһы була, властың да. Хәҙер ҙә бигерәк әрһеҙләшеп власҡа йәбешәләр ҙә ҡуялар, аҙағы нисек бөтөрөн уйламайҙар...

Гүзәл Алма-Ата ҡалаһына даими янап торған ҡурҡыныс та бар, ул - шыуғын, йәғни эҫе йәйҙәрҙә тауҙағы мәңгелек ҡарҙың күпләп иреүе һөҙөмтәһендә тау араларындағы уйпаттарҙа күлдәр хасил була, һыу күбәйә бара һәм бер мәл ул йырылып китә, таш һәм һыу аҫҡа уҡтала, үҙ юлында осраған барлыҡ нәмәне йыуып алып китә. Алма-Ата иң ҡурҡыныс шыуғынды (сель) 1921, 1963, 1973 һәм 1977 йылдарҙа кисерә. 1921 йылда ҡаланың күп өлөшөн таш һәм мәте баҫып китә, йорт-биналар емерелә, 500-ҙән ашыу кеше һәләк була. 1963 йылда сель Иссыҡ күлен баҫа һәм юҡ итә. Уның ярында ял иткән йөҙ илленән ашыу кеше һәләк була. 1973 йылда шыуғын ял итеүселәре менән бергә "Горельник" турбазаһын йыуып алып китә.

Үткән быуаттың алтмышынсы йылдарында шыуғынға ҡаршы ҡоролған плотиналар хәҙер Алма-Атаны (1993 йылдан Алматы исемен йөрөтә) тәбиғәттең был емергес күренешенән һаҡлап тора. Шулай ҙа ҙур булмаған шыуғындар әле лә күҙәтелә. Уларҙың һуңғылары 2015 йылда була. Үрҙә һанап үтелгән тәбиғәт һәләкәттәре фәҡәт июль айына тура килә.

1991 йылдың 16 декабрендә Ҡаҙағстан Республикаһы дәүләт бойондороҡһоҙлоғо тураһында закон ҡабул итә.

Ҡаҙағстандың Рәсәй империяһына инеүе 1731 йылда Ҡаҙаҡ ханлығы Кесе йөҙөнөң беренсе ханы Әбелхәйерҙең Рәсәй подданныйлығын ҡабул итеүе һөҙөмтәһендә башлана. 1740 йылда Урта йөҙ ханы Әбелмәмбәт уға эйәрә. Ҡаҙаҡ халҡының тулыһынса Рәсәйгә ҡушылыуы 1824 йылда тамамлана.

Ошо ике быуаттан ашыу дөйөм тарихҡа ҡағылған бер мәлдә хеҙмәт итергә тура килде миңә Алма-Атала (Алматыла). Хәҙер инде Ҡаҙағстан - айырым дәүләт. Уның, СССР-ҙың элекке ун биш союздаш республикаһы кеүек үк, үҙ ҡанундары, йәмғиәт ҡоролошо, үҫеш юлы. Йәш быуын өсөн - ул сит ил, башҡа донъя...

Рәсүл БАЙГИЛДИН.

ИРӘНДЕК ҮҪЕМЛЕКТӘРЕ

АЙЫУ БАЛАНЫ

Айыу баланы (жимолость татарская - Lonicera tatarica L.) - ошо уҡ исемдәге ғаиләгә ҡараған ҡыуаҡ ағас. Ул тау битләүҙәрендә, урман ситтәрендә үҫә. Аҡ йәки алһыу сәскәле был ҡыуаҡ күптәргә таныш. Ботаҡтары hарғылт hоро төҫтә, бейеклеге 1 - 3 метрға етә. Япраҡтары йомортҡа йәки эллиптик формала, телгеләнмәгән. Май-июнь айҙарында сәскә ата. Емештәре - ҡыҙғылт hары, балан ҙурлығында, ағыулы. Беҙҙең республиканың Ейәнсура, Мәләүез, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Балаҡатай райондарында күпләп үҫә. Был үҫемлек - беҙҙең урмандарыбыҙҙың, туғайҙарыбыҙҙың ғәжәп матур биҙәктәренең береhе. Шуға күрә уны декоратив ағас сифатында ҡала баҡсаларын биҙәү өсөн дә ултырталар, ул яңы ерҙә бик тиҙ үҫеп китә. Баш ҡалабыҙ Өфөлә уның майҙаны йөҙәр гектарға етә. Умартасыларға был үҫемлектең бик hәйбәт бал биреү үҙенсәлеге күптән билдәле. Унан алынған бал үтә күренмәле таҙа hәм хуш еҫле була.

Бынан тыш, алтай айыу баланы (жимолость алтайская) бар. Беҙҙең тәбиғәт шарттарында ул таулы hәм ылыҫлы урмандарҙа үҫә. Яңауыл, Бөрйән, Белорет райондарын, Ирәмәл тауҙарын үҙ итә. Июнь айҙарында hары төҫтәге сәскә ата. Емештәре hары йәки күк төҫтә. Уның бер аҙ әскелтем еләктәрен ашарға ярай, унан ҡайнатма әҙерләйҙәр. Алтай айыу баланында С витамины 60-66 мг тәшкил итә. Ботаҡтарының ҡайырыhы Тибет медицинаhында ҡулланыла. Алтай айыу баланы декоратив үҫемлек булараҡ ҡалаларҙы, баҡсаларҙы йәшелләндереүҙә лә киң файҙаланыла.

Айыу баланы емештәрен ағас төйгөс менән талҡан булғансы төйәләр. 1 кг емешкә 1,5 - 2 кг иҫәбенән, тигеҙ рәүештә шәкәр hибәләр. Шәкәр иреп бөткәнсе бутайhың да быяла банкаларға hалып hыуыҡҡыста hаҡлайhың. Ҡайнатма итеп йә кеҫәлгә ҡушып ҡулланаhың.

ҠАҘАЯҠТАР

Ҡаҙаяҡтар (щитовник мужской - Dryopteris filix - mas L.) - беҙҙең планетаның боронғо үҫемлектәренең береhе. Ҡасандыр Ер йөҙөн күбеhенсә улар ғына биләп алған булған. Хәҙер ҙә ҡайhы бер тропик илдәрҙә ҙур-ҙур майҙандарҙа гигант ҡаҙаяҡтар үҫә. Улар унда мәңге йәшел үҫемлектәр hанала. Африканың Рувензори тау hырттарында 65 километрға hуҙылған Семлики йылғаhы аға. Уның үҙәнендә hауа ағымы үҙгәрмәй, hәр саҡ тын тора, hәм бына ошондай шарттарҙа үҙенә күрә бер микроклимат барлыҡҡа килгән. Ерҙән hәр ваҡыт томан күтәрелә, ул бер аҙ ваҡыттан hыуынып, ямғыр булып кире төшә. Һауа, тупраҡ, үҫемлектәр - бөтәhе лә йылы hыу парҙары менән туйынған… Бына ошондай тәбиғәт шарттарында бейеклеге 9 метрға тиклем еткән ағас кеүек бейек ҡаҙаяҡтар менән бергә бәләкәй ҡаҙаяҡтарҙың да hанhыҙ күп төрҙәре үҫә. Ярым ҡараңғылыҡ, дымдың, йылылыҡтың етерлек булыуы, тупраҡтың уңайлы төрҙәре - былар бөтәhе лә ҡаҙаяҡтар үҫер өсөн hәйбәт шарттар тыуҙыра. Ер йөҙө күп миллион йылдар элек нисек булhа, хәҙер ҙә шул көйө, үҙгәрмәгән кеүек…

Ә беҙҙең hауа шарттарында үҫкән ҡаҙаяҡтар эволюция hөҙөмтәhендә күп hанлы үҙгәрештәр кисергән. Улар дымлы ерҙәрҙә лә, ҡоро урында ла, хатта тау-таш араhында ла үҫергә күнеккәндәр (мәҫәлән, ҡырғаяҡ йәки татлы ҡаҙаяҡ). Беҙ күреп өйрәнгән ҡаҙаяҡ, ғәҙәттә, еүеш урындарҙа, ҡараңғы ҡуйы урмандарҙа үҫә. Шыршы, аҡ шыршы үҫкән урманда уны күпләп осратырға була. Шулай уҡ ҡайын, йүкә, уҫаҡ ағастары үҫкән урманда ла осрай. Ҡарағай урмандарында уны hирәк осратырға мөмкин, сөнки унда яҡтылыҡ күп төшә hәм тупраҡтың еүешлеге ҡырҡа кәмей. Ҡаҙаяҡтар урыны-урыны менән ҡуйы ғына булып үҫә. Бындай осраҡта 1 квадрат метр майҙанға 2- 3 үҫемлек тура килә. Бейеклеге 50 сантиметрға етhә, ҡыуаҡ әйләнәhе 130 сантиметр була.

Аптекаға тапшырыу өсөн уның тамырын файҙаланалар. Тамырҙы көҙ көнө йәки иртә яҙ ҡаҙып алалар. Уны, тупраҡтан таҙартҡандан hуң, ваҡ ҡына итеп турайҙар hәм күләгәлә киптерәләр. Мейестә киптергәндә эҫелеге 40 градустан артмаҫҡа тейеш.

Тамырҙың химик составына килгәндә инде, унда филикс кислотаhы, фильмарон, эфир майҙары, аспидинол, флораспин бар. Хәҙерге заман медицинаhы уны бабасыр ҡыуыу сараhы булараҡ hәм, бынан тыш, ревматизм, төрлө йәрәхәттәр hәм мускулдар көҙән йыйырып тартышҡан осраҡта ванналар алыу өсөн файҙаланырға тәҡдим итә. Фәнни медицинала ҡаҙаяҡтың ҡуйы экстракты таҫма hымаҡ бабасырҙарға ҡаршы ҡулланыла. Ҡаҙаяҡтың hабаҡ-тамыры ағыулы hәм бөтә булған hауыҡтырыу саралары врач күҙәтеүе аҫтында үткәрелергә тейеш.

Яҙ көнө ҡаҙаяҡтың үҫеп китеүен күҙәткәнегеҙ бармы? Үҫемлектең hабағы, ерҙе тишеп сығып, юғарыға үрләгән hайын, йомолған йоҙроҡҡа оҡшап йыйылған япраҡтар йомғағы яйлап тағатыла, ҙурая hәм асыла башлай. Яңы ғына асылған япраҡтар асыҡ йәшел төҫтә була. Бына ошо ваҡытта уның үренделәрен, ашар өсөн, йәки дарыуға йыялар. Дөйөм алғанда ҡаҙаяҡ ағыулы үҫемлек булып иҫәпләнhә лә, ул ашарға яраҡлы. Ҡаҙаяҡтың үрендеhен әле асылып етмәгән япраҡтарынан әрсеп ҡайнаталар hәм ике тапҡыр hыу менән сайҡатҡандан hуң, салат hәм аш өсөн майҙа ҡыҙҙырып алалар. Йәш ҡаҙаяҡты киптереп йәки тоҙлап, ҡышҡылыҡҡа әҙерләп ҡуйырға ла мөмкин.

Был үҫемлеккә hуңғы йылдарҙа hорау ифрат күбәйҙе. Алыҫ Көнсығыштан алып Себергә тиклем уны әҙерләү шул тиклем артты, хатта был үҫемлек тәбиғәттән юғала барыу дәрәжәhенә етте, тиhәк, бер ҙә генә арттырыу булмаҫ. Тоҙланған йәш ҡаҙаяҡтарҙы сит ил алыпhатарҙары бик ихлас hатып алып, башҡа ерҙәргә оҙата. Йәш ҡаҙаяҡ үренделәренән әҙерләнгән аҙыҡ Японияла, Ҡытайҙа, Кореяла бик ҙур hорау менән файҙалана. Баҡhаң, ул организмдағы радиоактив нурҙарҙы сығарыуға булышлыҡ итә икән.

Ҡаҙаяҡтан төнәтмә. 500 г ҡаҙаяҡ япрағын 10 л hыуға hалып, 2 тәүлеккә төнәтергә ҡуялар. Бүлмә гөлдәренә (цикламен) тәүлегенә 1 стакан иҫәбенә hипкәндә, ул тиҙерәк үҫә hәм нематодтарҙан зарар күрмәй.

Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН,
биология фәндәре докторы, профессор.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...

КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

Ҡоролдай

(Ремез)

Турғайҙар ғаиләhенә ҡараған тағы бер төркөм - сәпсектәр. Ҡоролдай уларҙың араhында иң вағы, кәүҙәhе ябай турғайҙан күпкә бәләкәй икәне әллә ҡайҙан күренеп тора. Кәүҙәhенең оҙонлоғо 12 сантиметрға ла етмәй. Арҡа өлөшө hоро, түше - ерәнhыу-аҡ. Башы аҡ, күҙҙәре аша киң генә ҡара hыҙат үтә, ҡайhы бер ҡоролдайҙарҙың тамағы ҡара була. Тауышы нескә, "тсии" тип hыҙғыра.

Япраҡлы урмандарҙың ҡамыш йә тал баҫҡан өлөштәрендә көн итә. Ағастың олононда hикергеләп йөрөй. Тиктормаҫ ҡош, уны акробат тип тә атайҙар. Бөжәк тотоу маҡсаты менән ботаҡта баштүбән эленеп тә тора ала.

Ояhы - йоморо муҡса, өҫкө өлөшөндә инеп-сығып йөрөү өсөн ҡыҫҡа ғына "торба"hы бар. Ояны үләндән, үҫемлек мамығынан (тал, тирәк, ҡылған) үрә. Ҡапыл ҡарағанда ул йомшаҡ ҡына бейәләйҙе лә хәтерләтеп ҡуя. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, оя ныҡлы hәм йылы, бәпкәләргә унда бер тәбиғәт ғәрәсәте лә ҡурҡыныс түгел. Уны ағастарҙың аҫҡа hалынып торған ботаҡтарына элеп ҡуя. Оя эргәhендә йыйылып ятҡан hыу күләүектәре лә мотлаҡ була. Инә ҡош 5-10 йомортҡа hала. Ҡыҙығы шул, инә ҡош үҙенә оя hайлап, йомортҡа hалғас та, ата ҡош башҡа инә ҡошҡа оя яhарға тотона. Ә бына бәпкәләрҙе ҡайhы саҡта икегә бүлеп "тәрбиәләйҙәр".

Ҡоролдайҙың Урал алдында оя ҡороп йәшәүе хаҡында мәғлүмәттәр юҡ тиерлек. Тимәк, унда ул йәшәмәй. Ә бына Урал аръяғында Уй йылғаhы үрендә ҡоролай ояhы теркәлгән (Эверсманн, 1866). Н.А. Зарудный (1897) уны Яйыҡ hәм Һаҡмар йылғалары аҡҡан бар ерҙә лә оялап йәшәүен яҙып ҡалдырған. С.И. Снигиревский 1927 йылдың июль аҙағында Яйыҡ йылғаhының үрендә ҡанаттары нығынып, яҡшы ғына осҡан ҡоролдай бәпкәләренә тап була.

Беҙ иhә ҡоролдайҙың ояhын Ҡырмыҫҡалы районындағы Талпаҡ күлендәге утраусыҡта (1989 й.), Өфө-Аэропорт юлы буйына ултыртылған тирәк ағастарында (2005 й.) күрҙек. Шулай уҡ 2001 йылда Бәләбәй ҡалҡыулығында Сәрмәсән ауылы эргәhендәге бик көслө аҡҡан шишмә буйында, 2002 йылда 6 бәпкәhе булған ғаиләне Федоровка районының "Балыҡ" хужалығы быуалары тирәләй үҫкән ҡуйы үләндә тап итергә мөмкинселек булды.

М. Баянов, Ә. Мәмәтов,
"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.
(Дауамы бар).

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

ҮПКӘСЕЛДӘРГӘ КӘҢӘШ

Бер ваҡыт Бәйғәмбәрҙән: "Кешеләрҙең иң яҡшыhы кем?" - тип hорағандар. Бәйғәмбәр: "Дөрөҫ була белгән hәр кем hәм "мәхмүм" йөрәкле кеше", - тип әйткән. Сәхәбәләр тағы: "Беҙ дөрөҫ була белеү тураhында беләбеҙ, ә бына "мәхмүм" нимә була?" - тип hораған. Мөхәммәт салаллаhу ғәләйhи вә сәлләм шулай тип яуап биргән: "Был Раббыhынан ҡурҡҡан таҙа йөрәк. Ундай йөрәктә гонаh, яуызлыҡ, күралмаусанлыҡ hәм көнләшеү эҙҙәре юҡ!"

Бәйғәмбәр йыш ҡына шундай доға уҡыған: "Эй, Аллаhым минең! Мине хәҡиҡәт юлына баҫтыр, минең телмәремде хаҡ ит hәм минең күңелемдән хәйләкәрлекте hәм үс алыу тойғоhон алып ташла!" Аллаh илсеhе мосолмандарға үсегеүҙе hәм бер-береhенән көнләшеүҙе тыйған. Шулай ҙа кешенең йөрәген4дә насар уйҙар тыуған икән, Бәйғәмбәр йөрәктән күралмаусанлыҡты юйып ташлау өсөн бүләктәр бирешергә ҡушҡан. Ул: "Бүләктәр бирешегеҙ, сөнки бүләктәр йөрәктән күралмаусылыҡты юйып ташлай", - тип әйткән. Ул тағы ла шундай аҡыл еткергән: "Бүләктәр менән алмашығыҙ, сөнки был йөрәктән күралмаусанлыҡты hәм дошманлыҡты юя. Бер ҡатын да күршеhенең бүләген, хатта ул ҙур булмаған ит киҫәге булhа ла, әhәмиәтhеҙ тип hанамаhын"; "Арағыҙҙа ҡәрҙәшлек ептәре нығынhын өсөн, бер-берегеҙгә бүләктәр бирешегеҙ"; "Аллаhы Тәғәлә ҡолдарына мәрхәмәтле. Кешеләрҙең тормошон еңеләйтергә уйлаусылар менән Аллаh ҡәнәғәт. Ә кем ауырайтырға теләй, Аллаh уларҙың булған бөтә яҡшы нәмәhен ала hәм еңеләйтеүселәргә бирә".

27 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Шулер". [16+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.00 Специальный репортаж. [12+]
12.15 Навигатор истории. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 "Асыш". Дети. [6+]
16.00 Башҡорттар. [6+]
16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
16.45 "Криминальный спектр". [16+]
17.00 Формула здоровья. [12+]
17.15 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
18.00 "Тайные механизмы природы".
19.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 Д/с "Разноцветная планета". [12+]
21.00 Специальный репортаж. [16+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Ете егет. [12+]
23.45 Автограф. [12+]
0.15 Х/ф "В Крыму не всегда лето". [16+]
2.30 Спектакль "Неотосланные письма". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]

28 ИЮЛЯ ВТОРНИК БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Шулер". [16+]
11.00 "Дорога к храму". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
16.00 Золотой фонд башкирского ТВ.
16.45 Республика LIVE. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
18.00 "Тайные механизмы природы". [12+]
19.00, 3.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]
21.00 Креативный код. [12+]
22.00 Подкаст. Интонации. [12+]
23.00 Ете егет. [12+]
23.45 На своей земле. [12+]
0.00 Х/ф "Бальное платье". [16+]
1.30 Спектакль "Древо жизни". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]

29 ИЮЛЯ СРЕДА БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Шулер". [16+]
11.00 Специальный репортаж. [16+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]
12.15 "Криминальный спектр". [16+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 "Экологично". [6+]
16.00 Автограф. [12+]
16.45, 21.00 Материнство и детство. [12+]
17.00 Навигатор истории. [12+]
17.15 Полезные новости. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
18.00 Дуҫтар. [16+]
19.00, 3.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Д/с "Разноцветная планета". [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Ете егет. [12+]
23.45 Х/ф "Координаты неизвестны". [16+]
1.15 Спектакль "Крах и отчаяние". [12+]
2.45 На своей земле. [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]

30 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Алмазы Цирцеи". [16+]
11.00 Моя планета - Башҡортостан. [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]
12.15 Дознание. [16+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 "Сулпылар". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Навигатор истории. [12+]
16.15 Полезные новости. [12+]
16.45 "Криминальный спектр". [16+]
17.00 "Тайные механизмы природы". [12+]
17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]
18.00 "Йома". [6+]
19.00 Телецентр.
19.45 "Мама". [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Материнство и детство. [12+]
20.30 Формула здоровья. [12+]
20.45 Башкирские каникулы. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "Грэйс и Джо. История любви". [12+]
2.00 Спектакль "Земляки". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

31 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Алмазы Цирцеи". [16+]
11.00 "Йома". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 17.45, 21.15, 22.15 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]
12.15 "Криминальный спектр". [16+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.30 Детей много не бывает. [6+]
16.00 Аль-Фатиха. [12+]
16.45 Дознание. [16+]
17.00 Республика LIVE. [12+]
18.00, 3.30 Башҡортостан#вместе. [12+]
19.00 Честно говоря. [12+]
19.45 На своей земле. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 "Башҡорт йыры-2026". [12+]
22.00 СВОих не бросаем. [12+]
23.00 Дуҫтар. [16+]
23.30 Х/ф "Кон-Тики". [12+]
1.30 Спектакль "Вознесись мой, Тулпар!" [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

1 АВГУСТА СУББОТА БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз). [12+]
7.45 Автограф. [12+]
8.30 На своей земле. [12+]
8.45 Аль-Фатиха. [12+]
9.15 Сәләм представляет... [12+]
9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
9.45 СВОих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.45 МузКәрәҙ. [6+]
11.15 "Ҡурсаҡ". [6+]
11.30 Атайсал. [6+]
12.00 "Елкән". [6+]
12.30 Навигатор истории. [12+]
12.45, 23.30 Ете егет. [12+]
13.30 Башҡорттар. [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Башкирские каникулы. [12+]
17.45 25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Материнство и детство. [12+]
19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 "Байыҡ-2026". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Новости недели (на баш. яз).
0.15 М/ф "Отель "Онегин". [12+]
2.00 Спектакль "Под знаком Марса". [12+]
4.00 Телецентр.
5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]

2 АВГУСТА ВОСКРЕСЕНЬЕ БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз). [12+]
7.45 Золотой фонд ТВ. [12+]
8.30 "Ҡурай даны". [12+]
8.45 Күстәнәс. [12+]
9.15 "Мама". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз).
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.45 Тирмәкәй. [6+]
11.00 "Городок АЮЯ". [6+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 Сулпылар. [6+]
12.00 "Ат уйнатып". [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз).
13.15 Башҡортостан#вместе. [12+]
13.45 Полезные новости. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.00, 4.00 Дорога к храму. [6+]
15.30 Честно говоря. [12+]
16.30 "Здоровый смысл". [16+]
17.00 Республика LIVE. [12+]
17.45 25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ. [12+]
18.45 Все песни о прекрасном... [12+]
19.45 Әлләсе. [12+]
20.30 Автограф. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30 Новости недели (на рус.яз.).
22.15 Подтекст: инструкции к себе.[12+]
23.00 Ете егет. [12+]
23.45 Х/ф "Кто вызвал аниматора?" 16+
1.15 Спектакль "Мона". [12+]
4.30 Телецентр.
5.30 Дуҫтар. [16+]
6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1448 һижри йыл.

Июль - Август (Сәфәр)	Иртәнге намаҙ	Ҡояш ҡалҡа	Өйлә намаҙы	Икенде намаҙы	Аҡшам намаҙы	Йәстү намаҙы
27 (13) дүшәмбе	3:48	5:16	13:30	18:50	21:28	22:58
28 (14) шишәмбе	3:50	5:18	13:30	18:49	21:26	22:56
29 (15) шаршамбы	3:51	5:20	13:30	18:48	21:24	22:54
30 (16) кесе йома	3:53	5:21	13:30	18:47	21:23	22:53
31 (17) йома	3:55	5:23	13:30	18:46	21:21	22:51
1 (18) шәмбе	3:56	5:24	13:30	18:45	21:19	22:50
2 (19) йәкшәмбе	3:57	5:26	13:30	18:44	21:17	22:48

БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.

УВЕДОМЛЕНИЕ
об условиях предоставления печатной площади и эфирного времени для проведения предвыборной агитации при проведении выборов депутатов Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан шестого созыва

В соответствии с пунктом 6 статьи 50 Федерального закона "Об основных гарантиях избирательных прав и права на участие в референдуме граждан Российской Федерации" Муниципальное бюджетное учреждение "Медиадом "Вся Уфа" городского округа город Уфа Республики Башкортостан уведомляет о готовности предоставления печатной площади, услуг по размещению предвыборных агитационных материалов при проведении выборов депутатов Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан шестого созыва в общественно-политических газетах: "Вечерняя Уфа" (регистрационный номер и дата принятия решения о регистрации: серия ПИ №ТУ02-01638 от 19 июля 2018 г.), "Уфимские ведомости" (регистрационный номер и дата принятия решения о регистрации: серия ПИ № ТУ02-01636 от 05 июля 2018г.) и в газете "Киске Өфө" (регистрационный номер и дата принятия решения о регистрации: серия ПИ № ТУ02-01885 от 30 июля 2025 г.).

Печатная площадь на бесплатной основе зарегистрированным кандидатам для проведения предвыборной агитации общим объемом 10% от номеров, которые должны выйти в период предвыборной агитации составляет:

газета "Вечерняя Уфа" - 6949 кв.см (2316 кв.см/нед.)
(объем печатной площади одной полосы составляет 965,12 кв.см)
газета "Уфимские ведомости" - 9484,8 кв.см (2371,2 кв.см/нед.)
(объем печатной площади одной полосы составляет 988 кв.см.)
газета "Киске Өфө" 4492,8 кв.см (1497,6 кв.см/нед.)
(объем печатной площади одной полосы составляет 936 кв.см.)

Печатная площадь на платной основе зарегистрированным кандидатам для проведения предвыборной агитации общим объемом 20% от номеров, которые должны выйти в период предвыборной агитации составляет:

газета "Вечерняя Уфа" - 13898 кв.см.
газета "Уфимские ведомости" - 18969,6 кв.см.
газета "Киске Өфө" - 8985,6 кв.см.

В соответствии с пунктом 3 статьи 51 Федерального закона "Об основных гарантиях избирательных прав и права на участие в референдуме граждан Российской Федерации" МБУ "Медиадом "Вся Уфа" уведомляет о готовности предоставления эфирного времени, услуг по размещению предвыборных агитационных материалов при проведении выборов депутатов Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан шестого созыва на муниципальном телеканале "Вся Уфа" общим объёмом бесплатного эфирного времени, зарезервированного для предвыборной агитации, составляющим 30 минут.

Для заключения договоров на бесплатной и платной основе обращаться по адресу: г. Уфа, ул. Авроры, 25 в рабочие дни с 9.30 до 18.30 ч., тел. для связи 8(347)255-90-31, 216-32-15, email: info@allufa.ru, id_ufa@mail.ru.

МБУ "Медиадом "Вся Уфа" объявляет сведения о размере и условиях оплаты, а также иных условиях размещения предвыборной агитации в период с 22 августа 2026 г. до 23.59 часов 17 сентября 2026 г. (включительно) по выборам депутатов Государственной Думы Федерального Собрания Российской Федерации девятого созыва, дополнительным выборам депутата Государственного Собрания - Курултая Республики Башкортостан по Кизильскому одномандатному избирательному округу № 28, выборам депутатов Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан шестого созыва, назначенных на 20 сентября 2026 года в эфире муниципального телеканала "ВСЯ УФА", сетевых изданиях: "ALLUFA.RU", "PRESSAUFA.RU", "ufaved.info" и в редакциях общественно-политических газет: "Вечерняя Уфа", "Уфимские ведомости" и "Киске Өфө"

Стоимость размещения печатного материала в редакциях общественно-политических газет: "Вечерняя Уфа", "Уфимские ведомости" и "Киске Өфө" - 60 рублей/кв.см (без учета НДС 22%);

в сетевых изданиях - 15 000 рублей (за одну готовую публикацию до 2500 знаков).

Стоимость предоставления платного эфирного времени для размещения агитационных материалов на телевизионном канале "Вся Уфа":

Позиция	Время выходов	Стоимость/ хронометраж
Размещение готовых агитационных материалов	06:00 - 12:00	18 000 руб./1 мин.
Размещение готовых агитационных материалов	12:00 - 18:00	15 000 руб./1 мин.
Размещение готовых агитационных материалов	18:00 - 24:00	32 400 руб./1 мин.
Изготовление роликов		15 000 руб./10 сек.
Изготовление роликов		25 000 руб./10-30 сек
Изготовление роликов		40 000 руб./30-60 сек.
Новостной сюжет (изготовление и размещение)	19:00, 21:00, 23:00, 02:00, 06:00, 13:00.	50 000 руб./1 мин. 70 00 руб./2 мин.
Программа "Говорит и показывает "Вся Уфа".	19:30 прямой эфир + 9 повторов	26 минут - 60 000руб. 52 минуты - 120 000 руб.
Гость в программе "Интервью"	18:00 оригинал 06:15 повтор 12:30 повтор	40 000 руб. /13 мин

Вышеприведенные цены указаны в рублях РФ с учетом налога на добавленную стоимость 22%.

Цена для материалов иной продолжительности рассчитывается пропорционально с учетом нижеизложенных правил.

К размещению принимаются предвыборные агитационные материалы хронометражем, кратным 5 секундам, но не менее 5 секунд, отвечающие следующим техническим требованиям:

mp4 h.264, Full HD 1920x1080, битрейт 15-20 Мбит/с.
Аудио: AAC 48 000Гц. Стерео, битрейт 320 Кбит/сек.
Носители: компакт-диски DVD-R или USB-флеш-накопитель.

Технические параметры и качество видеозаписи материалов должны отвечать требованиям ОСТ - 58-10-87; ПТЭ - 2001, утвержденным Приказом Министерства Российской Федерации по делам печати, телерадиовещания и средств массовых коммуникаций от 12 июля 2002 года № 134; а также иным условиям договора о предоставлении эфирного времени.

Предоплата должна быть произведена в полном размере не позднее, чем за три рабочих дня до первого дня размещения предвыборных агитационных материалов. В случае если первый день размещения предвыборных агитационных материалов приходится на период с 22 по 26 августа 2026 года, предоплата должна быть произведена в полном размере не позднее, чем за два дня до первого дня размещения предвыборных агитационных материалов в эфире либо в редакции.

Заключение договоров на оказание платных услуг по размещению предвыборной агитации осуществляет МБУ "Медиадом "Вся Уфа" по месту фактического нахождения по адресу: г. Уфа, ул. Авроры, 25 в рабочие дни с 9.30 до 18.30 ч., тел.для связи 8(347)255-90-31, 216-32-15, email: info@allufa.ru, id_ufa@mail.ru.

РЕКЛАМА

БАШ ЭШЛӘТМӘК

БЕҘ ҮҘЕБЕҘ БАШҠОРТТАР



Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

28-се һандағы сканворд яуаптары.

Горизонталь буйынса: Аҡҡош. Аксаков. Алебарда. Пушкин. Лиана. Даль. Ләйсән. Бата. Йәмәғәт. Уран. Рәт. Нужа. Афарин. Нуҡта. Бүгән. Хата. Ағай. Аҡбуҙ. Аҡын. Аран.

Вертикаль буйынса: Лепехин. Асағойроҡ. Альманах. Ат. Аманат. Анд. Ҡусҡар. Абаға. БТР. Ҡына. Альфа. Герб. Шкода. Урҙа. Паллас. Андыҙ. Ураҙа. Курс. Наян. Нәнәй.

ХОККЕЙ

МИҘГЕЛ ҠАСАН БАШЛАНА?

Өфө клубының матбуғат хеҙмәте миҙгелгә әҙерлек планы менән таныштырҙы. Уға ярашлы, уйынсылар 30-31 июлдә медицина тикшереүе үтәсәк һәм 1 августа баш ҡала боҙына сығасаҡ.

Күнекмәләр 16 августҡа тиклем дауам итәсәк, 17-20 августа Өфөлә Башҡортостан Республикаһы кубогы үтәсәк. "Башинформ" агентлығына "Салауат Юлаев"тың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, турнирҙа Өфө хоккейсыларынан тыш, Хабаровскиҙан "Амур", Астананан "Барыҫ", Тольяттиҙан "Лада" командалары ҡатнаша.

Өс көнлөк күнекмәләрҙән һуң юлаевсылар йәнә бер турнирға, Магнитогорскиҙағы Ромазан мемориалына юллана. Быйыл унда "Амур", "Трактор", "Лада" командалары һәм турнир хужалары - "Металлург" хоккейсылары осрашасаҡ. Был ярыштар, һис шикһеҙ, ныҡлыҡҡа һәм берҙәмлеккә һынау буласаҡ.

"Салауат Юлаев" уҙған миҙгел тамамланыу менән иң көслө һәм мөһим уйынсыларын һаҡлап ҡалды һәм бер нисә яңы килешеү төҙөнө. Мәҫәлән, команданың лидеры Шелдон Ремпал менән килешеүҙе оҙайттылар. Клубтың иң яҡшы уйынсыһы менән килешеү бер миҙгелгә иҫәпләнгән. Шулай уҡ "Салауат Юлаев" былтырғы миҙгелдең иң яҡшы снайперы Джек Родуолдты һаҡлап ҡалды. Ә тәжрибәле һөжүмсе һәм КХЛ-да иң күп шайба индереүсе Вадим Шипачев команданан киткән Евгений Кузнецовты алмаштырасаҡ. НХЛ-дың элекке уйынсыһы Александр Алексеев Өфө командаһының оборонаһын нығытты. "Салауат Юлаев"тың хәҙерге составы түбәндәгесә:

Һөжүмселәр: Броссо - Родуолд - Ремпал, Сучков - Шипачев - Жаровский, Алалыкин - Ефремов - Кузнецов, Горшков - Фәизов - Кузьмин.

Һаҡсылар: Алексеев - Стюарт, Зоркин - Панин, Цулыгин - Варлов, Ғәзимов - Кулик.

Ҡапҡасылар: Вязовой, Коновалов.

Инсаф Хужабирганов

БАҠСА

ҠОРОТҠОСТАРҒА ҠАРШЫ...

Яҡшы уңыш алыр өсөн һәүәҫкәр баҡсасылар нимә генә уйлап тапмай. Ағыулы матдәләр түгел, ә тоҙ, ойоған һөт, сода, йод кеүек һәм башҡа ҡул осонда булған әйберҙәр ниндәй осраҡта ярҙам итә?

Тоҙ. Япраҡ ярғансы емеш ағасына тоҙло һыу һипһәгеҙ, бәшмәк ауырыуҙарына бирешмәҫ, һуғанығыҙ себенләмәҫ. Сөгөлдөр ҙә тоҙ ярата: 4-5 япрағы сыҡҡас һәм ҡаҙып алырға бер ай самаһы ҡалғас, 10 литр һыуға 100 грамм тоҙ һалып түтәлгә һибегеҙ.

Сода. Аш содаһы баҡсала бөтә йәһәттән файҙалы. Виноград бешә башлау менән 10 литр һыуға 75 грамм тоҙ һалып, ботаҡтарҙы ҡойондороғоҙ. Был процедура сереүҙән һаҡлай, емештең шәкәрен арттыра. Ошондай уҡ иретмә менән бөтә емеш ағасын эшкәртһәгеҙ, уларҙы япраҡ ашаусы ҡарышлауыҡтарҙан һаҡларһығыҙ. Сода - онло ысыҡ тип аталған үҫемлек ауырыуынан да яҡшы сара. Бер балғалаҡ соданы 1 литр һыуҙа иретеп, ҡыяр түтәленә һипһәгеҙ, япрағы иртә һарғаймаҫ. 1 ҡалаҡ сода, 1 таблетка аспирин, 1 балғалаҡ һауыт-һаба йыуа торған шыйыҡса йәки шыйыҡ һабын, 1 ҡалаҡ үҫемлек майын 4,5 литр һыуға һалып һипһәгеҙ, ҡарағат, крыжовникты зыян итеүселәрҙән һаҡларһығыҙ. Шулай уҡ содалы һыу кәбеҫтә ҡарышлауығын иҫкәртә. Сәсер алдынан орлоҡто сода һалынған төнәтмәлә эшкәртеп алһағыҙ, тағы ла яҡшы булыр.

Гәрсис. Ҡоротҡостарҙың күбеһе гәрсис яратмай. Төрлө пестицидтарға ҡаршы булһағыҙ, уны һәр ваҡыт ҡул аҫтында тотоғоҙ. Кәбеҫтә, боросоғоҙҙо лайлалы ҡусҡарҙан һаҡлау өсөн улар араһына һибеп сығығыҙ. Гәрсисле төнәтмә кебләне, төрлө ҡарышлауыҡтарҙы ла иҫкәртә. Уны эшләү өсөн 10 литр һыуға 100 грамм гәрсис һалып, ике көн төнәтегеҙ ҙә, һөҙөп, 50:50 нисбәтендә һыу өҫтәп, һәр күнәккә 40 грамм һабын һалығыҙ һәм алма ағасы сәскә атып, 15-20 көн үткәс, ә еләк ҡыуаҡтарына йәй башында һибегеҙ.

Кефир йәки эркет һыуы. Әсе һөт продукттары бактериялары үҫемлеккә зыян итмәй генә бәшмәк ауырыуҙарын юҡ итә. Ҡыяр япрағы иртә һарғаймаһын өсөн бер күнәк һыуға ике литр кефир һалып һибегеҙ. Ошондай уҡ һыу менән крыжовниктағы ысыҡ онон бөтөрөргә мөмкин. Фитофторҙы иҫкәртеү өсөн 10 литр һыуға ярты литр кефир, 1 стакан пепси йәки кока-кола ҡушып, помидорға һибегеҙ. Бер күнәк һыуға 1 литр кефир һалып ҡойоу ҙа яҡшы ашлама була. Кефир урынына эркет тә ярай.

Сүпрә. Сүпрә үҫемлектәрҙең үҫешен яҡшырта. Ул туҡлыҡлы матдәләргә бай, тупраҡтың микрофлораһын яҡшырта, сир барлыҡҡа килтергән микроорганизмдарҙы юҡ итә. Ул - бөтә культура өсөн дә яҡшы ашлама. Уны түбәндәгесә әҙерләргә: 1 килограмм пресланған сүпрәне 5 литр һыуҙа ебетергә лә һибер алдынан 1 литр әсеткене 10 литр һыуға ҡушып, түтәлгә һибергә. Ашламаны ҡоро сүпрәнән дә эшләргә мөмкин: 10 литр һыуға 10 грамм сүпрә, 2 ҡалаҡ шәкәр һалып, ике сәғәткә ултыртығыҙ. Аҙаҡ уны 1:5 нисбәтендә һыу һалып ҡойоғоҙ. Картуф, помидор, баклажан, бороҫҡа ла әсетке бик һәйбәт тәьҫир итә. Үрсетмә өсөн дә сүпрәнең файҙаһы ҙур: буйға үҫмәй, ергә ултыртҡанда тамыры ныҡ була. Сәскә атыр алдынан еләккә 10 литр һыуға 100 грамм сүпрә һалынған иретмә һипһәң, еләк серемәй. Помидорҙы ла фитофторҙан һаҡлай. Сүпрә калийҙы "йота", шуға күрә тупраҡҡа көл индерергә онотмағыҙ.

Һөт. Ҡыярҙағы онло ысыҡты түбәндәгесә юҡ итергә мөмкин: 9 литр һыуға 1 литр майһыҙ һөт, 10-12 тамсы йод һалып һибегеҙ. 10 литр һыуға 20 грамм кер һабыны, 1 литр һөт, 30 тамсы йод һалынған иретмәне ҡойоп, ҡыяр япрағын алдан һарғайыуҙан һаҡларға була. Ойоған һөт үрҙә атап кителгән рецептарҙа кефир йәки эркетте алмаштыра.

Кока-кола йәки пепси. Пепси йәки кока-кола һәм кефир ҡушылған һыу помидор үрсетмәһе өсөн яҡшы. Уны ҙур булмаған һауытҡа ҡойоп, баҡсаға ултыртһағыҙ, лайлалы ҡусҡар өсөн һәйбәт алдатҡыс булыр. Кеблә һәм бетте бөтөрөү өсөн дә ҡулланығыҙ.

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

МӘМЕРЙӘ МУЗЕЙЫ БАЙРАМЫ

25 июлдә "Шүлгәнташ" тарихи-мәҙәни музей комплексында тағы ла "Шүлгәнташ" фестивале ойошторола.

Ҡунаҡтарҙы уҡтан атыу, милли көрәш буйынса турнир, һөнәрселек йәрминкәләре һәм оҫталыҡ дәрестәре көтә, унда һәр кем боронғо рәссамдар кеүек охранан буяу эшләй ала. Байрам республика артистары Рәсүл Ҡарабулатов, Заһир Иҫәнсурин, Нәркәс Сиражетдинова, Нәжип Юлдашбаев, DJ Хан һәм "Дәрүишхан" төркөмө ҡатнашлығындағы концерт менән тамамлана.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Шүлгәнташ" музей комплексы 2022 йылдың 9 июлендә үҙ ишектәрен асты. Музей асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Рәсәй, Беларусь, Башҡортостан, Монголия ғалимдары ҡатнашты. "Беҙ был музейҙы ата-бабаларҙың тарихи һәм мәҙәни мираҫы менән һәр кем таныша алһын, тигән теләк менән оҙаҡ һәм күп тырышлыҡ һалып төҙөнөк. Шүлгәнташ мәмерйәһе - кешелек цивилизацияһының барлыҡҡа килеү үҙәге ул. Уның менән "Аҡбуҙат", "Урал батыр" һәм башҡа боронғо риүәйәттәр бәйле. Ул - республикабыҙҙың ҙур йөрәге һәм күңеле", - тигәйне ул саҡта Радий Хәбиров.

ТАҒЫ БЕРЕНСЕ УРЫН!

"AY YOLA "Урал батыр" эпосы эҙҙәре буйлап" фильмы "Асыштар ере" геобренды фестивалендә "Тарихи мираҫ, милли ғөрөф-ғәҙәттәр" номинацияһында беренсе урынды яуланы.

Был номинацияла Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән 26 эш тәҡдим ителгәйне, тиелә AY YOLA төркөмөнөң "Бәйләнештә"ге берләшмәһендә. Сергей Бакликов менән берлектә төшөрөлгән картина "Посмотри, какая страна!" федераль платформаһына урынлаштырыласаҡ һәм Рәсәй төбәктәренең мәҙәни мираҫы тарихының бер өлөшө буласаҡ.

"Бер юлы ике ҙур еңеү: "AY YOLA "Урал батыр" эпосы эҙҙәре буйлап" фильмы иң яҡшыһы тип танылды, ә Башҡортостан "Асыштар ере" фестиваленең 10 геобрендың иҫәбенә инде (һүҙ Һамарҙа "Асыштар ере" геобрендтар фестивале хаҡында бара. **-Ред.**) Беҙҙең өсөн был наградa - тәү сиратта "Урал батыр" эпосы тарихының Башҡортостандан ситтә лә йәшәүен һәм кешеләрҙең иғтибарын йәлеп итеүен таныу ул", - ти һөйләне AY YOLA музыканттары. Фильмды AY YOLA төркөмөнөң "Бәйләнештә"ге берләшмәһендә ҡарарға мөмкин.

Был көндәрҙә AY YOLA төркөмө Андрей Малаховтың "Күңелдән сыҡҡан йырҙар" программаһында ла ҡатнашты. Төркөмдөң музыканттары үҙҙәре тураһында бер нисә ҡыҙыҡлы мәғлүмәт менән дә бүлеште. Алып барыусы төркөмдөң солисына ни өсөн тап Адель тип исем ҡушыуҙары менән ҡыҙыҡһынды. "Әсәһенең исеме Людмила, ә минеке - Руслан. Туйыбыҙ Пушкиндың тыуыуына 200 йыл тулған йылда үтте. Беҙ Руслан менән Людмила булғас, ҡыҙыбыҙға Адель тип ҡушырға уйланыҡ, Пушкиндың шундай шиғыры бар", - тип ғаилә серен асты төркөм музыканты Руслан Шәйхетдинов.

Музыканттар тамашасыларҙы башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосы менән дә таныштырҙы. Шулай уҡ төркөм Адель клипта кейеп төшкән бүректе, ә ҡурайсы Ринат Рамаҙанов башҡорт халыҡ ҡоралы ҡурайҙы ҡулланыу нисек эшләүҙәрен күрһәтте.

ХАЗИНА ҮҘЕН ТАНЫТА

HAZINA этно-проекты йәнә халыҡ-ара аренала яңғыраны. Ул Ҡаҙағстанда үткән фестивалдә Башҡортостан исеменән сығыш яһаны. Төркөм 50 мендән ашыу тамашасыны башҡорт мәҙәниәте һәм милли уйын ҡоралдары яңғырашы менән таныштырҙы.

Ил халҡы һәм сит ил ҡунаҡтары Ҡаҙағстандың көнсығышында урынлашҡан Катон-Ҡарағайға йыйылды. Бында "Алтай - төрки донъяһының алтын бишеге" халыҡ-ара

фестивале үтте. Программала мәҙәни һәм спорт саралары бар ине, тип һөйләне төркөмдөң етәксеһе Земфира Рәшитова. "Эн Тамыры" гала-концерты төп ваҡиғаға әүерелде. Фестивалдә Ҡаҙағстан, Азербайжан, Ҡырғыҙстан, Төркиә, Үзбәкстан, Монголия, Венгрия һәм Рәсәйҙән Башҡортостан һәм Тыва республикалары артистары ҡатнашты.

Фестивалдең маҡсаты - төрки донъяһы илдәренең мәҙәни бәйләнештәрен нығытыу, ҡунаҡтарҙы Алтайҙың тарихи мираҫы менән таныштырыу һәм төбәктең туристик кеүәтен күрһәтеү. Ойоштороусылар HAZINA төркөмөнөң сағыу һәм үҙенсәлекле сығышын билдәләп үтте. Халыҡ йырҙарын заманса башҡарыу тамашасыларҙа һәм журналистарҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

Һәм тағы HAZINA төркөмө Дағстан Республикаһында "Аһәң" кросс-милли музыкаль мәҙәниәт фестивалендә ҡатнашты. Күләмле мәҙәни сара илдең төрлө төбәктәренән ижади коллективтарҙы һәм башҡарыусыларҙы берләштереп, дуҫлыҡ, милли традициялар һәм музыка сәнғәте байрамына әүерелде. Фестиваль Махачкала, Каспийск һәм Кизилюрт ҡалаларында уҙҙы. Сәхнәлә Татарстан Республикаһы, Тыва Республикаһы, Башҡортостан Республикаһы, Мордовия Республикаһы, Санкт-Петербург, Мәскәү өлкәһе һәм илдең башҡа төбәктәренән артистар сығыш яһаны.

Ләйлә АРАЛБАЕВА.

ТЕЛҺӨЙӘР

ГӨЛДӘРҘЕҢ ТӘМЛЕ ШУЙЫ

Тәбиғәттә шулай: яҙғы дымлы тупраҡ, муйыл сәскәләре еҫен йәйен ялан еләктәре хушбуйы алыштыра. Ә уныһына алмашҡа алтын көҙҙә баҡсаларҙа алма шуйы аңҡый. Шунан - ҡышҡы һалҡын, ҡырпаҡ ҡар шуйҙары ла көттөрмәй... Беҙ йәнә - һирәк осраған, әммә үҙенсәлеге менән иғтибарҙы тартҡан гөлдәргә тиң һүҙҙәр яланында.

Шуй. Диалектта был һүҙ "еҫ" мәғәнәһендә йөрөй. Алдағы миҫалдарға йәнә әллә ни саҡлыһын өҫтәргә була. *Ел яны сабылған бесән шуйын еткерә. Сифатлы сәйҙең шуйы ла тәмле.*

Шуйтыҡ. Шуйтыҡлау. Был һүҙҙәр ҙә диалекттарға хас. *Шуйтыҡ, тимәк, һылтыҡ, йәғни, бер аҙ аҡһағыраҡ, сатан. Малдың аяғы шуйтыҡ. Шуйтыҡлап атлау.*

Шулап. "Шулап" "улаҡ" тигән мәғәнәгә эйә. *Ямғыр һыуы шулапҡа аға. Шулапҡа таҙа һыу тултырыу.*

Шәт. "Шәт" "моғайын, бәлки" тигән һүҙҙәрҙе алыштыра ала. Һәм ҡайһы бер диалектта шулай һөйләйҙәр ҙә. *Алдағы көндәр аяҙ торор, шәт. Башҡортостан күлдәренә ҡайтҡан аҡҡоштар, шәт, киләһе яҙҙа ла уларға эйәләр?*

Шыған. "Ботаҡһыҙ оҙон ағас" тиер урынға урмандағы үҙ өйөләй күргән кешеләр "шыған" тигән бер генә һүҙ ҡуллана. *Ҡарағайлыҡта шыған осраны. Шығанға үрмәләрлекме һун?* Кешегә ҡарата ла ҡулланыла "шыған" һүҙе. Мәғәнәһе - оҙон буйлы. *Шыған үсмер. Волейбол, баскетболда шыған егеттәр уйнай.*

Шулай итеп, был һүҙҙәр ҙә иҫтә ҡалдырыуға әллә ни ауыр түгелдер, шәт?

НУРБИКӘ әҙерләне.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

АТЫ-ТУНЫ БАР КЕШЕЛӘ...

Алпамышаның көсө бар

Оло менән кесене өләшкән белер, көслө менән көсһөҙҙө көрәшкән белер.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Тормош байлығы беҙ онотҡан хәтирәләрҙә.

(Чезаре Павезе).

Тейешенсә йәшәү өсөн иә аҡыллы, иә сынйырлы булыу кәрәк.

(Диоген).

Күрәҙәләктәр тарихҡа ҡусҡас кенә өйрәнелә башлай.

(Томас Браун).

Үҙ-үҙеңде яратыу енел йәшәүҙе аңлатмай әле.

(Марлен Дитрих).

Кешенең бәхете ул эйә булған нәмәләрҙән генә тормай.

(Варна Дозье).

Изгелек һәм ғилемлелек һәр саҡ бергә атлай, береһе юғалһа, уға алмаш эҙләргә кәрәкмәй.

(Артур Дойл).

Күк есемдәре - кеше яҙмыштары менән, ә Хоҙай күк есемдәре менән идара итә

(Келларий).

Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Өс ҡыҙ тимер юл буйлап барғанда ыжғырып килгән ике поезд уртаһында ҡалалар. Был хәлгә шаһит халыҡ: "Былар өсөһө лә һәләк булды инде..." - тип тетрәнеп ҡарап торһа, ғәжәп хәл була: ҡыҙҙарҙың өсөһө лә иҫән-һау килеш улар алдына килеп баҫа. Шул саҡ халыҡ араһында йөрөгән шайтандар үҙ-ара бәхәсләшә башлай:

- Һин ниңә беренсе ҡыҙҙы поезд аҫтына ырғытманың?

- Ырғыта алманым шул, ул бит иртән намаҙ уҡып, Аллаһы Тәғәләнән хәйерле юл һорағайны, уға бер нисек тә зыян эшләп булмай ине...

- Ә һин ниңә икенсе ҡыҙҙы ырғытманың улай булғас?

- Ул бит юлға сығыр алдынан һәр ваҡыт өс тапҡыр "Аятель Көрси" доғаһын уҡый. Тейеп булмай уға!

- Ә ҡыҙҙарҙың өсөнсөһө бит ни Аллаға, ни муллаға ышанмай!

- Шулайын шулай ҙа, ләкин өйҙән сығып киткәндә уны әсәһе: "Иҫән - һау йөрөп ҡайт, ҡыҙым, Аллаһы Тәғәлә ташламаһын, һаҡлап йөрөтһөн үҙеңде!"- тип доға уҡып оҙатып ҡалды. Бар, тейеп ҡара һин уға! - ти яуап тотоусы шайтан...

Һығымтаһын үҙегеҙ яһағыҙ..."

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Башҡортостан Республикаһы буйынса Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт идаралығында теркәлде:
ПИ №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.
Тел.: 8 (347) 226-99-48.
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир **253-25-44**
Хәбәрселәр **252-39-99**
Матбуғат таратыу **252-39-99**
График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты - 23.07.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 23.07.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
Баҫылып сыҡты - 24.07.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2487
Заказ - 1283